ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22-28 август (урағай)

2020

№34 (920)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Донъяға һине әсәң тыуҙырһа, кешеләр өсөн һине эшең тыуҙыра. Эш - икенсе әсәң һинең. Ул ғына, тик ул ғына һине кеше итә, матурлай, беҙҙәй һәм үҫтерә. Эшһеҙ һин буш һәм мәғәнәһеҙ, шатлығың - ялған, ашағаның - харам, һөйгәнең - гонаһ.***

***Рәми ҒАРИПОВ.***

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Алтын урталыҡ табылдымы?**



3-4

**Әҙәм ғүмеренең асылы...**

**кешеләргә кәрәк булыуҙа**



8-9

**Тәмлекәсенде тот та...**

**"Самауырлы ритайым"ға кил!**



11

**Яҡшының аты ҡалыр**



12-13

**ТВ-программа** 14

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Эскелекте төрлө кимәлдәге тыйыуҙар, ҡарарҙар менән туҡтатыу кәрәк, тигәнгә ни әйтерһегеҙ?

***Илсур ИҘЕЛБАЕВ, Күйөргәҙе районы:*** Эскелекте, алкоголле эсемлектәрҙе ҡулланыуҙы, һатыуҙы тыйыу буйынса ниндәй генә программалар, законда ҡабул ителмәһен, әгәр кеше үҙе теләмәй икән, уны эсеүҙән тыйып булмай. Быны тарих үҙе иҫбат итте. Эскелеккә ҡаршы элек-электән, батша заманында уҡ көрәш алып барылған. Әммә был көрәш тулыһынса бер ҡасан да үҙ һөҙөмтәһен бирмәгән, сөнки алкоголле эсемлектән килгән килем төрлө кимәлдәге бюджеттың ярайһы ҙур ғына өлөшөн тулыландыра.

Минең бер танышым атайәсәһенең тыуған ауылында магазин асты. Асҡан ваҡытта бер ниндәй иҫерткес эсемлек, тәмәке һатмаясаҡмын, тип, яҡты хыялдар менән башлағайны, бер йыл да булманы, араҡыһына ла, һыраһына ла лицензия алғанын аңламай ҙа ҡалды. Тәүҙә дуҫтары килтергәнде прилавка аҫтынан, үҙенең яҡшы белгән кешеләренә генә һатты. Спиртлы эсемлектәр һатыу төшөмлө икәнен бик тиҙ аңғарҙы һәм был шөғөлөн тиҙ генә рәсмиләштереп тә ҡуйҙы. Эше бик алға китте, сөнки араҡы ауыл тирәһендә һаман булһа валюта рәтендә йөрөй. Баҡса ҡаҙҙыртырға, һарыҡ йөнөн ҡырҡтырырға, өй һылатырға, бесән алышырға - быларҙың бөтәһенә лә аҡса менән түгел, ә араҡы менән түләгән хәйләкәр һәм һаран кешеләр булғанда, эскеселәр йәки эсергә яратҡан кешеләр ҙә буласаҡ.

Яңыраҡ ҡына үҙем шаһит булдым шундай күренешкә. Ауылда ҡарт әсәһенең яңғыҙ пенсияһына ҡарап торған, эсергә яратҡан, дөрөҫөрәге, булһа - эскән, булмаһа - эҙләп, аҙып-туҙып йөрөмәгән бер ағай бар. Ул белмәгән эш юҡтыр - етмеш төрлө һөнәргә эйә, тип тап уның кеүектәргә әйтәләр. Дүрт көн рәттән башын да күтәрмәй күршеһенең тракторын йүнәтеп, эшләп бөткәс, техника хужаһы унан: "Ағай, аҡсалата бирәйемме, араҡылатамы?" - тип һораны. Теге ағай аптырауы йөҙөнә сыҡты, бергилке асҡан ауыҙын яба алмай торҙо. Әммә эше өсөн аҡса һорарға оялды. "Әллә..." тигән булды. "Араҡы тиһәң, араҡы бирәм", ти быныһы. Ағайҙың аҡсалата алғыһы, ә трактор хужаһының осһоҙ хаҡҡа алған сифатһыҙ эсемлеге менән түләгеһе килгәне һуҡыр күҙгә лә күренер ине. Оҫтаның, үҙең белеп бир, тигәнен ишеткәс, ҡыҫылмайынса булдыра алманым. Һөҙөмтәлә, ағай бер нисә купюра аҡсаһын матурлап бөкләп, кеҫәһенә һалып ҡайтып китте. Эскән кеше бит эшкә лә шәп була. Үҙен генә уйлағандар ана шундайҙарҙы үҙ файҙаһына ҡуллана, белә күрә эскелеккә һалыштыра.

Бына әле халыҡтың ғүмер оҙайлығын арттырыу маҡсатында араҡы эсеү һәм тәмәке тартыу кимәлен кәметеү буйынса республика программаһы ҡабул ителеүе хаҡында ишеттем. Уға ярашлы, республиканың һәр районында йәшерен араҡы һәм спиртлы эсемлек һатҡан урындар хаҡында хоҡуҡ һаҡлау органдарына еткерә торған инициатив төркөмдәр булдырыласаҡ. Унда йәмәғәт ойошмалары, партия вәкилдәре, әүҙем граждандар инеүе күҙаллана. Программа шулай уҡ халыҡ менән эшләүҙе, имен булмаған ғаиләләрҙе асыҡлауҙы, хәүеф төркөмөндәге балаларҙы спортҡа, сәләмәт тормошҡа йәлеп итеүҙе ҡарай. Белем биреү учреждениеларына яҡын урынлашҡан сауҙа нөктәләрендә, магазиндарҙа тәмәке һатыу тыйыла. Нимә, быға тиклем дә ошо эш алып барылды түгелме ни? Эскән кеше барыбер эсә. Бер ниндәй программа һәм закон уға ҡаршы тора алмай. Ә бына сәләмәт тормошто пропагандалау, эскеһеҙ туйҙар, байрамдар үткәреүҙе модаға индерергә була. Яйлап ҡына республикала айыҡ туйҙар, юбилейҙар уҙғарылыуын миҫалға килтерергә мөмкин. Алкоголле эсемлектәрҙең һаулыҡҡа зыяны, ғаилә иҡтисадына килтергән зарары тураһында күп һөйләү мөһим. Һандар, миҫалдар, факттар килтерергә кәрәк.

Бына быларҙың эскелеккә ҡаршы эшләйәсәген үҙ миҫалымда иҫбатлай алам. Унынсы класта уҡығанда үҫмерҙәр араһында зарарлы ғәҙәттәрҙе иҫкәртеү темаһына класс сәғәте булғайны. Уҡытыусыбыҙ шампан шарабының нисек әсеүе хаҡында ҡыҫҡа ғына видеоматериал әҙерләгәйне. Әсеткенең кеше кеүек "газ сығарыуы" хаҡында уҡытыусы ныҡ тәфсирләп һөйләне, ышанаһығыҙмы-юҡмы, шунан алып иҫерткес эсемлекте ауыҙыма ла алып ҡарағаным булманы. Шуға күрә һәр төрлө закондар, ҡарарҙар, программаларға әллә күпме аҡса түккәнсе, тәмәкегә, араҡыға ҡарата ерәнеү тойғоһо уятырлыҡ видеолар, фильмдар эшләргә кәрәк, тип уйлайым. Бына был эшләйәсәк...

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# БАШҠОРТОСТАНДА - БЕРЕНСЕ!




**Июль башы Башҡортостан өсөн ҡыуаныслы булды: ЮНЕСКО Ассамблеяһы ултырышында "Янғантау" геопаркын ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя селтәренә индереү тураһында иғлан ителде.**

***Геопарк - ул асыҡ һауалағы музей.*** Уның төп экспонаттары булып тауҙар, мәмерйәләр, геологик киҫелештәр, минералдар һәм файҙалы ҡаҙылмалар тора. Инеү сикләнгән милли парктарҙан айырмалы, геопарк туристар өсөн һәр саҡ асыҡ. Геопарк урындағы халыҡтың матди һәм матди булмаған мираҫын, мәҙәниәтен һаҡлау маҡсатында ойошторола. Уның икенсе әһәмиәтле йүнәлеше - төбәкте иҡтисади йәһәттән үҫтереү. Өсөнсө бурысы - йәш быуынды тәрбиәләүҙәге фәнни һәм мәғрифәтселек мөмкинлектәре. Ике йыл самаһы ваҡыт эсендә бында ҙур эш башҡарылған: туристик маршруттар эшләнгән, ял урындарында реакреацион зоналар булдырылған, ҙур фәнни эшмәкәрлек алып барыла. Геопарк штатында геологтар, биологтар, экскурсиялар ойоштороусылар бар.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

12+

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# БӨТӘ КЕШЕГӘ ЛӘ ЯРАП БУЛМАЙ...

**Ҡаланың үҙәк майҙанында ҙур сара бара. Алда - сәхнә, унда саҡырылған маҡтаулы ҡунаҡтар сығыш яһай. Һулда - үҙешмәкәр артистар үҙ сиратын тулҡынланып көтә. Сәхнә ҡаршыһында - төрлө йәштәге тамашасы. Иң алдан кескәйҙәр, коляска менән йәш әсәйҙәр урын алған, шунан - өлкәндәр, арттараҡ - йәштәр.**

- Журналист кеше әрһеҙ була ул, иң алға сығып, ваҡиға уртаһында йөрөргә, халыҡтан байрамға ҡарата фекерҙәрен, тәьҫораттарын яҙып алырға ла, фотоға төшөрөргә лә өлгөрөргә тейеш, - тип бер танышым ситтә генә баҫып, фотоға төшөрөп тороуымды тәнҡитләп алды. Бөтә ҡыйыулығымды йыйып, алғараҡ үтеп, бер нисә фото төшөрҙөм дә яңынан ситкә боҫтом.

Ошо ваҡиғанан һуң оҙаҡ та үтмәне, бер сарала элекке хеҙмәттәштәремдең береһе төптө икенсе яҡтан тәнҡитләне:

- Хәбәрселәр сарала бөтөнләй иғтибарҙы йәлеп итергә тейеш түгел. Байрам булһынмы, кәңәшмәме, "түңәрәк өҫтәл" ултырышымы - улар бөтөнләй күренмәҫкә, ситтә генә баҫып торорға, ваҡиға барышына ҡамасауламаҫҡа тейеш. Юғиһә, ҡайҙа килһәң дә иң беренсе гәзит, телевидение хеҙмәткәрҙәрен күрергә тура килә. Минеңсә, журналист ситтән генә ҡарап, күҙенә нимә күренә, яҡшы күренешме йәки, киреһенсә, етешһеҙлекме, бөтәһен дә теҙеп яҙырға тейеш.

Ике тәнҡитте лә өндәшмәй генә күңелем аша үткәрҙем. Йәшермәйем, уңайһыҙлыҡ кисереүҙән бергилке һөнәремдең кире яҡтарын эҙләп, хатта төрлө кисереш солғанышында ла ҡалдым.

Күптән түгел интернет селтәрендә бөтә кешегә лә ярап булмау тураһында кинәйәле хикәйәт уҡып, үрҙә атап кителгән ике ваҡиғаны иҫләп көлөп ҡуйҙым. Һөйләйем әле.

Йәйге эҫе көндә бер ир ишәккә ултырған да урамдан китеп бара икән. Бәләкәй улы ишәктең дилбегәһен тотоп, алдан атлай. Уларға осраған үткенсе:

- Бахыр балаң арып бөткән, бәләкәй генә аяҡтары талған, ә һин үҙең рәхәтләнеп ишәккә атланғанһың. Балаңды ултыртһаң булмаймы ни? - тип әрләп киткән.

Теге үткенсе күҙҙән юғалыу менән атаһы ишәктән төшкән дә улын атландырған. Икенсе үткенсе быларҙы күреп тауыш күтәргән:

- Оят түгелме ни һиңә, малай остоғо! Солтан һымаҡ ишәккә атланып алғанһың, ә атайың бахыр йәйәүләп бара!

Был юлы малай намыҫланып ишәктән һикереп төшкән. Атаһының да башҡа ишәккә ултырғыһы килмәгән. Икеһе ике яҡтан ишәкте етәкләп китеп барһалар, өсөнсө үткенсе уларҙы ахмаҡлыҡта ғәйепләгән:

- Ниңә һеҙҙең ишәгегеҙ бер нәмә лә эшләмәй? Берегеҙҙе булһа ла үҙенә атландырып, файҙа күрһәтһә була бит!

Өсөнсө үткенсенең һүҙенән һуң атаһы туҡтай ҙа улына:

- Күрҙеңме, улым? Нимә генә эшләһәк тә, беҙҙең менән килешмәгән, риза булмаған кеше табылды. Шуның өсөн, ҡолағыңа индереп ҡуй: беҙгә нисек сәйәхәт итергә үҙебеҙ хәл итергә тейеш!

Ҡайһы берҙә кеше кәңәшен тыңламай, үҙең нисек теләйһең, шулай дауам итеү яҡшыраҡ булғанын һеҙҙең дә тойғанығыҙ барҙыр. Шулаймы?

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## *Эскелекте төрлө кимәлдәге тыйыуҙар, ҡарарҙар менән туҡтатыу кәрәк, тигәнгә ни әйтерһегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**



***Асия ЛАТИПОВА, Мәләүез районы:*** Минеңсә, эскән кешене бер ниндәй закон менән ҡурҡытып туҡтатып булмай. Быға тиклем ҡабул ителгән ҡанундарҙың һөҙөмтәһенән сығып әйтәм быны. СССР ваҡытында ла, хәҙер ҙә алкоголизмға ҡаршы төрлө кимәлдә ҡанундар, программалар ҡабул ителде һәм ителә. Һөҙөмтә бармы йәки булдымы һуң?

Хәтеремдә, 1972 йылда эскелеккә ҡаршы көрәште көсәйтеү буйынса саралар тураһында законға ярашлы, спиртлы эсемлектәрҙе етештереүҙе кәметергә, хаҡын арттырырға хәл ителде. Уларҙы һатыу ваҡыты сикләнде. Мәжбүри дауалау һәм хеҙмәт профилакторийҙары асылды. Әммә эскән кеше нисек эсте, шулай эсте. Етмешенсе йылдар аҙағында хатта араҡы эсеү илдә рекорд кимәленә етте: бер кешегә йылына уртаса 5 литр тура килде.

СССР-ҙың тәүге һәм һуңғы Президенты Михаил Горбачевтың власҡа килеп, бер нисә ай эшләгәндән һуң алкоголгә ҡаршы алып барған кампанияһын да оло һәм урта быуын яҡшы хәтерләйҙер. "Ҡоро закон" тип нарыҡланған ҡанун үҙгәртеп ҡороу менән бер ваҡытта ғәмәлгә ашырыла башланы. Уға ярашлы, йәмәғәт урындарында эсеү ҡәтғи тыйылды, эскән килеш урамда, кеше күпләп йөрөгән урындарҙа тотолғандарға ҡаршы көрәш киҫкенләште, улар айнытҡыстарға ябылды, эшләгән урындарында премиянан мәхрүм ителде, хатта эшенән бушатылды. Был эшкә профсоюз, һаулыҡ һаҡлау, мәғариф һәм бөтә йәмәғәт ойошмалары йәлеп ителде. Араҡыһыҙ туйҙар пропагандаланды, киноларҙан, тамашаларҙан, спектаклдәрҙән эсеү күренеше булған сюжеттар алып ташланды. Партия ағзаларына ҡарата ла ҡәтғи ҡарарҙар ҡабул ителде, улар мәжбүри рәүештә "Айыҡтар йәмғиәте"нә индерелде.

"Ҡоро закон"дың, әлбиттә, һөҙөмтәһе булманы түгел, булды. Илдә үлем, эскән килеш эшләнгән енәйәттәр һаны кәмене, тыуым артты, тыуған сабыйҙарҙың һаулыҡ кимәле яҡшырҙы. Был хаҡта ул замандың киң мәғлүмәт саралары яҙҙы. Тик тотош ил бюджетына, шулай уҡ виноград үҫтереү менән шөғөлләнгән союздаш республикаларҙыҡына ла кире йоғонто яһалды. Ни өсөн тигәндә, эскелеккә ҡаршы көрәш иң беренсе ошо татлы емеш үҫтереү тармағын юҡ итеүҙән башланды. Коллекция сорттарын булһа ла һаҡларға кәрәк, тип, яҡлап сыҡҡандарҙы хатта төрмәгә ултыртыу менән ҡурҡыттылар.

Эскелекте ниндәй ҙә булһа закондар, программалар менән генә тыйып булалыр тигән фекер яҡлы түгелмен. Ә шулай ҙа ундай закондар кәрәк. Бына нисә йыл республикала легаль булмаған юл менән иҫерткес эсемлек һатҡандарға ҡаршы аяуһыҙ көрәш бара. Көрәш күберәк йәмәғәтселек тарафынан алып барыла. Ә хоҡуҡ һаҡлау органдары тарафынан түгел. Сөнки улар ҡулында штраф түләтеү яҙаһы ғына бар. Кемдәрҙер штраф түләй ҙә ҡотола, сөнки уның күләме ҙур түгел, сығым үҙен тиҙ арала ҡаплай. Электән һатҡан кеше әле лә һата, төшөмлө шөғөл икәнен бер татығас, унан баш тарта алмай.

Эскелектән ҡотолоуҙың иң мөһим юлы - төрлө кимәлдә тәрбиә эше алып барыу. Балалар баҡсаһында уҡ балала араҡыға, тәмәкегә, наркотикка нәфрәт тойғоһо уятырға кәрәк. Бала саҡта һалынған онотолмай. Икенсенән, халыҡ мәшғүллеген, бигерәк тә ауылдарҙа яйға һалырға кәрәк. Бөгөн кешегә эш, шөғөл кәрәк. Тап ошо эшһеҙлек, мәшғүлһеҙлек халыҡтың ябай көндәрен дә "байрамға" әйләндерә.

Мәләүез районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы был йәһәттән етди эш алып бара. Төрлө йәштәгеләр өсөн тәрбиәүи саралар, милли йолалар нигеҙендә байрамдар үткәреп кенә ҡалмай, ә эсергә яратҡандар менән шәхси әңгәмәләр, осрашыуҙар үткәрә. Буш ваҡытҡа урын ҡалдырмаҫ өсөн ундайҙарҙы ойошма эшенә лә йәлеп итәләр. Ыңғай һөҙөмтәләр бар: оҙайлы ваҡыт зарарлы ғәҙәтенән арына алмай йөрөгәндәр араһында медицина булышлығынан тыш та эскеһен ташлағандар бихисап. Бөтә нәмә кешенең үҙенә бәйле. Эсәм тиһә, бер ниндәй ҡанундар ҙа кәртә була алмай ундай әҙәмгә...

***Айгөл ИШКИЛДИНА, Күгәрсен районы:*** Араҡы эсеү, байрам табынына тәү сиратта шешә ултыртыу күптән беҙҙең илдә нормаға ингән. Шуға күрә эскеселеккә ҡаршы көрәш беҙҙә тейешле һөҙөмтә бирмәй. Күптәр үҙенең эскелеккә бирелеүен аңламай ҙа. Бөтәһе лә эсә лә инде, тип, үҙен аҡларға маташа. Әгәр ҙә кеше үҙе теләп эскеһен ташларға уйламай икән, бер ниндәй янау ҙа, ҡурҡытыу ҙа, закон да, штраф та тыя алмай. Бер ғаиләне беләм. Башҡа эсмәһен тип, иҫереп ҡайтҡан ирен ҡатыны фатирҙа бикләп китһә, тегеһе баш төҙәтер өсөн икенсе ҡаттан һикереп, ике аяғын да һындырып, дауаханаға эләгә.

Тәрбиә эшен киң йәйелдерергә кәрәк. Бигерәк тә балалар, үҫмерҙәр араһында эскелек, уның зыяны, иҫерек килеш ҡылынған енәйәттәр, эскесе атай-әсәйҙән тыуған балалар хаҡында аңлатыу эше алып барыу мөһим.

Эскелек - ул зарарлы ғәҙәт кенә түгел, ул дауалауға ауыр бирелгән ҡатмарлы сир ҙә. Мәғлүм булыуынса, эскән кешенең физик һаулығы ла, психологик халәте лә ныҡлы ҡаҡшаған була. Алкоголизмға ҡаршы көрәштә һәр төрлө закон, программа менән генә еңеп булмай, минеңсә. Иң беренсе, ошо эскелеккә килтергән сәбәптәрҙе табырға, уны юҡ итергә кәрәк. Эшһеҙлек, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеү, яҡын кешеңде юғалтыу, стресс, депрессия - бына ошолар инде әҙәмде иң беренсе стаканға үрелергә этәргән күренештәр. Алкоголгә бәйлелектән еңел генә ҡотолоп булмай. Бында медицина ярҙамы ла, яҡындар терәге лә кәрәк. Шулай ҙа иң мөһиме эскән кешенең эсергә ташлау теләге һәм ихтыяр көсө булырға тейеш.

**Ләйсән СӘЛИХОВА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓21 август мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостанда һуңғы тәүлектә 34 кеше Covid-19 йоҡторған, 81 кеше пневмония менән ауырыған. Пандемия башланғандан алып республикала 7469 кеше сирләгән, шуларҙың 6614-е һауыҡҡан. Әле 828 кеше сирләй. Вафат булыусылар һаны 28. Covid-19 менән сирләп һауыҡҡан өфөләргә киҙеүгә ҡаршы прививка алырға кәңәш ителә. Вакцинация тураһында ҡарарҙы дауалаусы табиптар сығарасаҡ.

✓Сибайҙа 2-се Бөтә Рәсәй "Урал аръяғы-2020" инвестицион һабантуйы булып үтте. Төп эшлекле программала "Беҙ йәшәргә теләгән ҡалалар нисек булырға тейеш?" тигән һорауға яуап эҙләнде. Эксперттар йәмғиәттең һорауҙарына яуап бирә һәм ҡала эсе мөхитендә килеп тыуған проблемаларға тиҙ генә иғтибар бүлә алыусы мобиль һәм аҡыллы ҡалалар булдырыу буйынса фекер алышты. БР Хөкүмәте Вице-премьеры Андрей Назаров билдәләүенсә, форум һөҙөмтәләре буйынса Сибайҙы Урал аръяғының үҙәгенә әйләндерә торған ҡарарҙар барлыҡҡа киләсәк.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфө, Октябрьский һәм Стәрлетамаҡ ҡалаларына 3 күсмә маммография кабинеты, баш ҡала поликлиникаларына 3 "Лада" еңел автомобиле асҡыстарын тапшырҙы. Республикала 2020 йылда бөтәһе 162 миллион һумлыҡ 8 күсмә маммография кабинеты һатып алынған.

✓Башҡортостанда тәүге тапҡыр ташҡа биҙәк төшөрөүселәр араһында конкурс ойошторола. Ғаризалар БР бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү буйынса агентлыҡтың Халыҡ кәсептәре, һөнәрселек, ауыл һәм экологик туризм үҙәгендә 14 сентябргә тиклем ҡабул ителә. Конкурс В.В. Путин башланғысы менән "Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ, шәхси эшҡыуарлыҡ башланғыстарына ярҙам итеү" милли проекты сиктәрендә ойошторола.

✓Башҡортостандағы балалар баҡсалары 1 сентябрҙән барлыҡ санитар-эпидемиологик талаптарҙы үтәп, штат режимында эш башлаясаҡ, тип хәбәр итә БР Мәғариф министрлығының мәктәпкә тиклемге белем биреү бүлеге етәксеһе Алина Ғәлина. Ведомство мәғлүмәттәренә ярашлы, республикала 1027 балалар баҡсаһы бар.

КӨНАУАЗ

**Ике аҙна инде Ишембай районы биләмәһендәге уникаль шихандарҙың береһе - Ҡуштау тирәләй барған ваҡиғалар солғанышындабыҙ. Тәүге аҙнала халыҡтың "Башҡортостан сода компанияһы"на тауҙы эшкәртеүгә бирмәү өсөн күтәрелеүенә предприятие үҙенең шәхси һаҡ хеҙмәте (ЧОП), үҙенең закондан тыш булған башҡа көстәре менән ҡаршы торһа, 15-16 августа иһә Ҡуштауҙы яҡлаусылар эргәһенә хоҡуҡ һаҡсылары килеп, йыйылыусыларҙы ҡыуып таратырға маташты: кемдәрҙелер ҡулға алдылар, газ да, дубинкалар ҙа эшкә егелде. Хәл үтә киҫкен төҫ алғас, 16-да Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тауҙы яҡлаусылар янына үҙе килде. Был турала ул сираттағы аҙналыҡ оператив кәңәшмә барышында һөйләне һәм мәсьәлә буйынса артабанғы эш юҫығын билдәләне.**

# АЛТЫН УРТАЛЫҠ ТАБЫЛДЫМЫ?



- Үткән аҙнала "Башҡортостан сода компанияһы" алдан килешеү буйынса Ҡуштауҙы эшкәртеү эштәрен башларға ниәтләнгәйне. Әммә тауҙы яҡлаусылар тарафынан шаҡтай ҡаты йәмәғәтселек ҡаршылығына осраны. Былар барыһы ла көслө бәрелешкә әүерелеп китә яҙҙы. Минә унда барырға тура килде. Беҙ тауҙан уны яҡлаусылар ҙа, БСК хеҙмәткәрҙәре лә китергә тейеш, тигән ҡарар ҡабул иттек. Ҡуштауҙа барған хәлдәр - беҙҙең һеҙҙең менән эшләп еткермәү һөҙөмтәһе. Был минең Хакимиәттең эшләп еткермәүе, сөнки халыҡ фекерен, уның мохтажлыҡтарын ентекле өйрәнеү зарур. Был, һис шикһеҙ, предприятиеның эш перспективаларын баһаларға тейешле сәнәғәт блогының эшләп еткермәүе. Был бөтә муниципалитет башлыҡтарының эшләп еткермәүе - кешеләр менән кабинеттан ултырып түгел, күҙмә-күҙ осрашып, уртаға һалып һөйләшеп эшләргә кәрәк. Ишембай районы хакимиәте башлығы тураһында. Әгәр шихандар эргәһендәге ауылдарҙа власҡа ҡаршы шундай киҫкен мөнәсәбәт урынлашҡан икән, тимәк, һеҙгә шәхсән уйланырға кәрәк, - тине Радий Фәрит улы. - Барлыҡ ваҡиғалар беҙҙең ығышлыҡ, иғтибарһыҙлыҡ, етерлек кимәлдә әүҙем эшләмәү сәбәпле килеп тыуҙы. Тағы бер мәртәбә һыҙыҡ өҫтөнә алам: килешеүгә килгәнсе, тауға берәү ҙә теймәйәсәк. Хәҙер цивилизациялы аралашыу майҙанына күсеү мөһим...

Ҡуштауҙы яҡлаусылар тәүҙән үк ошоно - цивилизациялы аралашыу майҙаны булдырыу, конструктив, дипломатик юҫыкта һөйләшеүҙәр алып барыу талабын күтәргәйне лә инде. Был уртаға һалып һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһендә уларҙың БСК производствоһын модернизациялау, альтернатив сеймал сығанаҡтарын эҙләү, Ҡуштауға айырыуса һаҡланыусы тәбиғәт ҡомартҡыһы статусын биреү һәм уны дәүләт яҡлауына алыу кеүек талаптарының үтәлеүенә өмөт ителгәйне. Әммә БСК етәкселәре бындай килешеү яғында булмай сыҡты. Быңа әле республика етәксеһе тәҡдим иткәнсә, экоактивистар Ҡуштау мәсьәләһе буйынса Координация советы төҙөнө һәм Башҡортостан Башлығының был аҙнала улар менән осрашыуы планлаштырылды. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙе билдәләүенсә, ул Координация советы ағзалары менән 17 августа уҡ осрашырға тейеш ине. Осрашыу ниндәй сәбәптәндер килеп сыҡманы. Ләкин шул уҡ көндө кисен Башлыҡ Ҡуштауҙы яҡлаусы башҡа экоактивистар һәм БР Башлығы эргәһендәге Кеше хоҡуҡтары һәм граждандарлыҡ йәмғиәтен үҫтереү советы (СПЧ) вәкилдәре, киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре, йәмәғәт ойошмалары ағзалары һәм ғалимдар менән осрашты. Һөйләшеүҙә башлар алдынан Радий Хәбиров тағы бер тапҡыр: "Килешеүгә килеп булмаһа, Ҡуштау эшкәртелә башламаясаҡ", - тип белдерҙе.

**(Дауамы 4-се биттә).**

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# ЗАУЫҠЛЫ ИТЕП БИҘӘҮ...

## илһөйәрлек тойғоһо ла тәрбиәләнен

**Башҡортостанда Зауыҡлы биләмәләр йылына арналған сараларҙы бойомға ашырыу дауам итә. Был тәңгәлдәге эш газондар, яҡтыртҡыстар, тротуарҙар, кәртәләр урынлаштырыу һәм төҙөкләндереү кеүек дүрт йүнәлештә үҙ эсенә алған. Бөгөнгә республикала 163 километр оҙонлоҡта бер төрлө стилдә рәшәткәләр эшләнде. Егерме алты муниципалитетта 128 мецдән ашыу квадрат метр майҙанда яңы газондар барлыҡҡа килде. Тротуарҙар ҙа иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Шулай уҡ Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына арнап, 350-нән ашыу һәйкәл һәм обелиск, дан мемориалдары үҙгәртеп ҡоролдо һәм ремонтланды. Ә шулай ҙа күҙ уңынан ысҡынған мәлдәр ҙә бар. Нимәләр улар?**

***Әмир ХӘЛИТОВ, хеҙмәт ветераны, Көйөргәҙе районы:*** Быйылғы йыл республикала Зауыҡлы биләмәләр йылы тип иғлан ителгәс, ниһайәт, ҡала һәм райондарҙың милли йөҙөнә иғтибар бирелер, тип уйлағайным. Зауыҡ менән биҙәү, биләмәләрҙе таҙа тотоу, йыйыштырыу, кәртәләрҙе ремонтлауҙы ғына күҙ уңында тоторға тейеш түгелбеҙ. Был, тәү сиратта, илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләүҙең мөһим сараһы ла булырға тейеш. Иғтибар итһәгеҙ, телевидениенан репортаждарҙа, кинофильмдарҙа Америка, Европа илдәрендә байрам булмаһа ла, үҙ дәүләттәре, Европа берлеге байраҡтарын урамдарҙа флагштоктарҙа күрергә мөмкин. Ошо берлеккә юл тотҡан Грузия, Украина, Төркиә лә Евросоюз байрағын мөһим дәүләт атрибутикаһы итеп һанай. Рәсми рәүештә Төркиәгә инмәһә лә, Кипрҙа (унда ни бары 200 мең генә кеше йәшәй) ике илдең дә дәүләт флагын аҙым һайын осратырға мөмкин. Беҙҙең илдә лә, законға үҙгәреш индереп, флагты байрам көндәрендә административ биналарға ғына түгел, ә халыҡ күпләп йөрөгән урындарға элеп, байраҡ менән ғорурланырға өйрәтергә кәрәк. Юғиһә, йыш ҡына етәкселәр уның төҫөн генә түгел, ә урынлашыу тәртибен дә онотоп ҡуя. Башҡортостан дәүләт флагын йыш ҡына баштүбән элгәндәрен дә күрергә тура килгәне бар.

Ошо йыл уңайынан хәл ителергә тейешле тағы бер мәсьәлә - ул ҡалаларҙа канализация, һыу үткәргестәрҙең ҡоҙоҡтарын уңайлы урынлаштырыуға ҡағыла. Төҙөлөш нормаһы буйынса улар араһы теүәл илле метр булырға тейеш. Кәметергә лә, арттырырға ла ярамай. Автомобилдәр хәрәкәте тығыҙ булған урам уртаһына тура килһә лә, шунда урынлаштырыла. Был бик хәүефле, миңәсә. Республика ҡалалары Рәсәйҙең башҡа тораҡ пункттарынан милли биҙәлеш буйынса ныҡ айырыла. Был хаҡта Башҡортостанға килгән туристар ҙа билдәләй. Республика ҡапҡаһы булған "Өфө" халыҡ-ара аэропортында Өфө тигән атаманың башҡортса вариантынан башҡа бер ни ҙә юҡ. Мин интернетта Өфө һәм Ҡаҙанды сағыштырған сайтты ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтеп барам. Ҡыҙғаныска ҡаршы, милли биҙәлеш, милли колорит буйынса өҫтөнлөк Өфө файҙаһына түгел. Был йүнәлештәге эшкә нигеҙ нәҡ быйыл Зауыҡлы биләмәләр йылында һалынырға тейеш, тип уйлайым.

***Ишморат МАЛИКОВ, таксист:*** Күп уҡыған ни белгән, күп йөрөгән шул белгән, тигән әйтем бар халҡыбыҙҙа. Һуңғы бер нисә йылда такси хеҙмәтендә эшләп, республиканың арҡырыһын буйға гиҙәм һәм шуға иғтибар иттем: һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда дәүләт телдәре тураһында закон үтәлмәй тиерлек. Яңы асылған сауҙа нөктәләре лә, ойошмалар ҙа алтаҡталар биҙәлешенә ҡағылышлы талаптарҙы үтәмәй. Быға тиклемгеләрендә хата бик осрамай, сөнки улар тел тураһында ҡануниәттең үтәлешен тикшергән комиссиялар эшләгән ваҡытта барлыҡҡа килде. Махсус үҙәктәрҙә тәржемә яһатып, алтаҡталарҙы дөрөҫ биҙәргә тырыштылар. Ә хәҙер күп ойошмаларҙың атамаһы ла, эш режимы яҙылған таҡталары ла урыҫ телендә генә.

Тағы шуның менән килешкем килмәй: федераль трасса тип, капиталь ремонттан һуң Өфө - Стәрлетамаҡ юлындағы тораҡ пункттарҙың башҡортса яҙыуҙары алып ташланды. Федераль юл бит Башҡортостан аша үтә. Минеңсә, киреһенсә, юл буйында башҡортса атамалар, халҡыбыҙҙың милли йөҙөн, милли үҙенсәлеген, мәҙәниәтен, тарихын сағылдырған башҡа ҡоролма-биналар урынлаштырырға кәрәк. Быны быйыл Зауыҡлы биләмәләр йылында башлау бик тә урынлы булыр ине.

**Лена БАРЫЕВА яҙып алды.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан педагогтарының август кәңәшмәһе барышында 9 фекер алышыу майҙансығы видеокәңәшмә форматында эшләне. "Белем биреүҙең ике һәм күп теллелек шарттарында Башҡортостандың туған һәм дәүләт телдәрен үҫтереү" майҙансығында республика һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән педагогтар ҡатнашты. Улар балаларға туған телде һәм сит телдәрҙе бергәй яҡшы кимәлдә өйрәтеү, туған телдәрҙе һаҡлап ҡалыу һәм уҡытыу методикаларын яңыртыу тураһында фекер алышты. Кәңәшмәнең пленар өлөшөндә БР мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин йомғаҡ яһаны.

✓Электрон сигареттарҙы һатыу Башҡортостанда ғына түгел, тотош Рәсәй буйынса тыйылды. Рәсәйҙә граждандарҙың сәләмәтлеген составында никотин булған продукция файҙаланыу әҙәмтәләренән һаҡлау мәсьәләһе буйынса айырым закон акттарына үҙгәрештәр көсөнә инде. БР Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев белдереүенсә, федераль закон балиғ булмағандарға һәм йәмәғәт урындарында никотиндан торған продукцияны, шул иҫәптән вейп, электрон сигарет, кальян файҙаланыуҙы тыя.

✓Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Евгений Кустов етәкселегендәге бер төркөм медицина хеҙмәткәрҙәре Ҡырғыҙстандан ҡайтты. Улар Covid-19 инфекцияһынан ярҙам күрһәтергә барғайны. Табиптар Ҡырғыҙстандың 7 өлкәһе һәм 2 ҙур ҡалаһындағы 31 медицина учреждениеһында эшләгән, 4 меңдән ашыу ауырыуҙы тикшергән, 615 пациентты һауыҡтырып сығарған, тағы 594 кешене дауахананан сығырға әҙерләгән.

✓Башҡортостанда айыу алыуға рөхсәт ҡағыҙына йәрәбә тартыу көнө 20 августа булды. Ҡатнашыусылар исемлеге БР Экология министрлығы сайтында баҫылған. Дәғүә иткән 2950 кешенән 53 һунарсыға берәр айыу атырға рөхсәт ителде, тип хәбәр итәлә ведомствола.

✓Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығы "Рәсәй Федерацияһында умартасылыҡ тураһында" федераль закон проектын хуплаған. Әлеге ваҡытта РФ Дәүләт Думаһында закон проектын ҡарау өсөн тәҡдимдәр формалаштырыла. Башҡортостанда "Умартасылыҡ тураһында" закон 1995 йылдан эшләй. Пестицидтар һәм агрохимикаттарҙы зыянһыҙ ҡулланыу өлкәһендә күҙәтеүҙе камиллаштырыу буйынса федераль закон проекты әҙерләнә. Республика умартасылары реестрында 11 мең 300 умартасы һәм 221 мең 400 умарта иҫәпләнә.

✓ *Халҡыбыҙ тыныс, конфликттар тыуҙырмай, әммә ул үҙ ерен бирмәйәсәк һәм кемдеңдер аҫабалыҡ хәтерен тартып алырға тырышыуы менән килешмәйәсәк. Ҡуштау ваҡиғаһы шуны асыҡ сағылдырҙы.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## БАЛАЛАР УҠЫРҒА БАРАСАҠ

**Һаман дауам иткән коронавирус шарттарында сентябрҙең тәүге өс аҙнаһында ҡатмарлы эпидемиологик сезон көтөлә, тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә.**

Уның һүҙҙәренсә, көҙ етеп, мәктәптәр һәм башҡа белем биреү учреждениелары асылыу менән грипп һәм һалҡын тейҙереп сирләүҙәр COVID-19 менән ҡатмарлашасаҡ. Республика етәксеһе муниципалитеттар етәкселәрен уҡыу йорттарында инфекция сығанаҡтары барлыҡҡа килеү хәүефен булдырмау өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләргә саҡырҙы. "Беҙ Мәғариф министрлығы менән эпидемияның тәүге тулҡынын тыныс ҡаршылау һәм бирешмәҫ өсөн ниҙәр эшләргә кәрәклеге хаҡында нығлап һөйләштек. Был санитар-эпидемиология нормаларының етди талаптары, етди ойоштороу эштәре, уҡытыусылар өсөн битлек йөрөтөү режимы, даими дезинфекция үткәреп тороу. 496 мәктәптә бөтөн был ҡағиҙәләрҙең үтәлешен студент-медиктарҙан торған медицина инспекторҙары күҙәтәсәк. Улар өсөн был практика буласаҡ, - тине Башлыҡ.- Беҙ уҡыусылар өсөн улай уҡ нығыҡ борсолмайбыҙ - балалар сирләгәндә, еҙәттә, ауырыу билдәләре һиҙелмәй, ләкин улар барыбер йоғошло сир йөрөтөүселәр булып иҫәпләнә. Беҙ уҡытыусылар сәләмәтлеге өсөн хәүефләнәбеҙ, улар араһында өлкәндәр, 65 йәштән олораҡтар бар. Шуны ла әйтергә кәрәк, хроник сирле балалар дистанцион уҡыясаҡ..."

## ГИГИЕНА ТӘРБИӘҺЕ

**Башҡортостанда гигиена тәрбиәһе менән хәҙер педагогтар шөғөлләнәсәк. Шул уҡ ваҡытта уҡыусыларға мәктәпкә килгәндә үҙҙәре менән антисептиктар алып килергә, ә ауырыҡһынған, температуралары булған осраҡта өйҙә ҡалырға кәңәш ителә.**

"1 сентябргә әҙерлек Роспотребнадзор менән берлектә үткәрелде, - тип билдәләй Башҡортостан гигиена һәм эпидемиология үҙәгенең баш табибы урынбаҫары Илнур Хасамиев. - Иҫкәрмәләр әҙерләнеп, улар мәктәптәргә ебәрелде. Педагогтар балаларға үҙҙәрен мәктәптә нисек тоторға кәрәклекте аңлатасаҡ. Балаларҙан уҡыу йорттарында дөйөм файҙаланыу урындарына, ашханаға барғас, коридорҙа йөрөгәндән һуң антисептиктар менән ҡулдарҙы эшкәртеү һәм йыуыуҙы талап итергә кәрәк. Әлеге көндә белем биреү ойошмалары антисептиктар менән тәьмин ителә. Ә инде атаәсәләр балаларына өйҙән антисептиктар биреп ебәрә икән, был бер ҙә артыҡ булмаҫ",- тине ул. Уның һүҙҙәренсә, иртәнсәк мәктәптәрҙә балаларҙың тән температуралары үлсәнәсәк. "Мәктәпкә ебәрерҙән алда баланың температураһын үлсәп, хәлен һорашып, арығанлыҡ, һалҡын алдырыу билдәләре юҡмы икәнен тикшерергә һәм әгәр ниндәйҙер шик булғанда, өйҙә ҡалдырырға кәрәк", - тине Илнур Хасамиев.

Ҡаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Ирина Кононова мәктәптә балаларға битлек кейеп йөрөргә кәрәкмәй, тине. Ә бына йәмәғәт транспортында битлек ҡулланыу кәрәк. Колледждарҙа һәм юғары уҡыу йорттарында уҡыусылар иһә битлектәр йөрөтәсәк, сөнки балаларға ҡарағанда өлкәндәргә сир йоҡтороу һәм ауырып китеү хәүефе нығыраҡ янай, тине министр урынбаҫары.

КӨНАУАЗ

# АЛТЫН УРТАЛЫҠ ТАБЫЛДЫМЫ?



**(Башы 3-сө биттә).**

Осрашыуҙа Ҡуштау ваҡиғаларына ҡағылышлы төрлө һорауҙар күтәрелде, аралашыу һорау-яуап рәүешендә алып барылды. Кеше хоҡуҡтары һәм граждандыҡ йәмғиәтен үҫтереү советы вәкилдәре Ҡуштау буйында барған ваҡиғалар мәләндә һикһәндән ашыу кеше ҡулға алыныуы, 34 кеше административ хоҡуҡ боҙған өсөн яблыуы тураһында телгә алды. Улар Ауырғазы, Ишембай, Салауат һәм Стәрлетамаҡ изоляторҙарында ултырыусыларҙы яҡлап, суд ҡарамағына ялыу яҙып тапшырыу мөмкинлеге биреләүен һораны. Ә бына Ҡуштауҙы әүҙем яҡлаусы йәмәғәт эшмәкәрҙәрен эш урындарынан мәжбүри ебәреү, эҙәрлекләү мәсьәләһендә Башҡортостан Башлығы "нығлы һүҙ бирәм, бер ниндәй ҙә репрессиялар булмаясаҡ" тип вәғәҙәләне.

- Минең ҡараш шундай: "Башҡорт сода компанияһы"ның 38 проценты республикаға ҡарай. Вазифаға тәғәйенләнгәндең беренсе көнөнән үк Торатау эшкәртелмәскә тейеш, тип иҫәпләнем. Әммә предприятие ихтыяждарын да аңлай инем. Һәм минә Ҡуштауҙы эшкәртергә биреү - компромисс ҡарар булып тойолдо, - тип белдерҙе Радий Фәрит улы. - Конфликт был тиклем көсөргәнешле характер алыр тип көтмәгәйнем. Өсөнсө тапҡыр ҡабатлайым - уртаҡ ҡарар ҡабул итербеҙ тип өмөтләнәм. Мин диалог яҡлы.

* * *

***Ҡуштау мәсьәләнен хәл итеүҙең төрлө юлдары эҙләнә. Ә әлегә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Башҡортостан сода компанияһы"ның устав капиталында республика өлөшөн акцияларҙың контроль пакетына тиклем арттырып, предприятиены республика ҡарамағына ҡайтарырға тәҡдим итте. Был турала ул "Эхо Москвы" баш мөхәррире Алексей Венедиктовҡа биргән интервьюһында һөйләне.***

- Предприятиены ла ҡотҡарырға кәрәк. Әгәр предприятие акционерҙары был юлдың хәл ителеүен күрмәй икән, мин дә бит акционер, республика булараҡ (БСК-ның 38,28 процент акцияһы Башҡортостан Республикаһыныҡы), беҙ яуаплылыҡты үҙ өҫтөбеҙгә алырға тейешбеҙ. Беҙгә предприятиены үҙ ҡарамағыбыҙға ҡайтарырға, контроль пакеттың билдәле өлөшөн һатып алырға кәрәк. Был яраһһы уҡ килем килтергән предприятие, беҙ ҙә дәүләт булараҡ яҡшы ғына килем алабыҙ. Контроль пакет беҙҙең ҡулға күсеп, артабан предприятие менән аҡыллы идара итеүҙе ойоштороп, дивидендтарҙы предприятиены үҫтереүгә, яңыртыуға йүнәлтергә була, - тине Радий Хәбиров. Һәм БСК республика ҡарамағына күсһә, артабан уны сеймалдың альтернатив сығанаҡтарына нигеҙләнеп үҫтереү планлаштырылыуын да һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ә "Башҡортостан сода компанияһы" етәкселегенең 2024 йылда яңы сеймал эшкәртелә башламаған осраҡта предприятие яблыласаҡ, яңы сығанаҡтарҙы тикшереү һәм эшкәртә башлау өсөн ваҡыт тығыҙ ҡалыуы тураһындағы мәғлүмәтенә республика Башлығы скептик ҡараште булыуын белдерҙе: "Тап ошо мине бындай ҡарар ҡабул итеүгә этәрҙе лә инде, беҙ был ситуацияға икенсе төрлө ҡараште һәм шуға иңебеҙгә яуаплылыҡ алырға әҙербеҙ", - тине Радий Фәрит улы.

* * *

"Республиканың "Башҡортостан сода компанияһы"ның контроль акциялар пакетын ҡулга төшөрөүе олигархтарҙы производствоны модернизациялауға һәм Ҡуштауға теймәскә мәжбүр итеүе бар, - *сәйәсмән Дмитрий Михайличенко тап шундай фекерҙә.* - Швейцария һәм Франциялағы матур тормошҡа аҡсалар һалған БСК хужалары республика халҡының күптән һарыуын ҡайнатa, ә ағыулы пиар хәлде бары тик ҡиҫкенләштерә. Ниһайәт, власть альтернатив сеймал сығанаҡтары тураһында һүҙ ҡуҙғатты. Әгәр был тәңгәлдә компромисс табылһа - был йәмғиәтте шундуҡ тынысландырасаҡ, республика һәм федераль власка ышаныс рейтингин арттырасаҡ. Акциялар өлөшөн һатып алып та булмаҫ, бәлки, әммә байҙарҙы производствоны модернизациялауға һәм Ҡуштауға теймәскә этәргән көслө һәм ҡеүәтле аҙым был..."

* * *

***Михаил Кривошеев, биология фәндәре кандидаты, доцент, БДУ-ның зоология музейы етәксеһе:*** "2015 йылда айырыуса һаҡланыусы тәбиғәт ҡомартҡылары исемлегенә ингән Ҡуштауҙа Ҡыҙыл китапҡа ингән 40-тан ашыу үҫемлектәр төрө теркәлгән. Шуға күрә, әгәр республика инициативаны үҙ ҡулына алып, нығ әһәмиәтле булмаған урындарҙан эзбиз сығара башлаһа, бик яҡшы - производство ла һаҡланыр, экология ла, шихандар ҙа. Һис шикһеҙ, был шихандарҙың өсөнөн дә берҙәм һаҡланған территорияға индереү кәрәк. "Башҡорт шихандары" Милли паркы статусы биреү урынлы булыр, тип иҫәпләйем. Ә был ҡатмарлы мәсьәләнең киң йәмәғәтселеккә фаш ителеүе һәм шихандарҙың бар донъяға билдәлелеге экотуризмды үҫтереү өсөн уңайлы урынға әүерелдерәсәк. Әлбиттә, әлеге мәлдә иң мөһим мәсьәләләр - альтернатив сеймал сығанаҡтарын билдәләү һәм Ҡуштауға тәбиғәт ҡомартҡыһы статусын биреү, сөнки ул экология күҙлегенән Йөрәктау һәм Торатау кеүек үк ҡиммәтле".

* * *

***Зөһрә Бураҡаева, драматург һәм яҙыусы:*** "Был ҡарар Башҡортостан Башлығына еңел бирелмәгәндер. Береһе лә халыҡтың илһөйәрлек тойғоһо шулай түгелерен көтмәгәйне. Һөҙөмтәлә, был күтәрелеш Ҡуштауҙың (башҡортса "ҡуш" берҙәмлек тигәнде аңлата) Башҡортостан йәмғиәтен берләштереүсе яңы символға әүерелеүенә килтерҙе. Торатау - изге тау. Ә Ҡуштау - бәхәстәр сығанағы булған тау, республика халҡын берләштергән символға әүерелде.

Беҙҙә бер ҡасан да милләт-ара конфликттар тыуғаны юҡ. Әммә башҡорт йәмәғәтселеге күтәргән иң киҫкен проблема - шихандарҙы һаҡлап ҡалыу мәсьәләһе ине. Был глобаль һорау ине. Ҡуштау ер хәтере барлығын, беҙҙә, башҡорттарҙа, ете быуынынды белеү үҙенән-үҙе аңлашылған хәҡиҡәт булыуын сағылдырҙы. Халҡыбыҙ тыныс, конфликттар тыуҙырмай, әммә ул үҙ ерен бирмәйәсәк һәм кемдеңдер аҫабалыҡ хәтерен тартып алырға тырышыуы менән килешмәйәсәк. Ауылдарҙан Себер тарафтарына күсеп китеүселәр күбәйһә лә, әүҙем урбанизация процесы барһа ла, Ҡуштау ваҡиғаһы шуны асыҡ сағылдырҙы: беҙҙә лә бөтә халыҡтарҙы халыҡ иткән ныҙат - милли ғорурлыҡ, булған һәм буласаҡ өсөн яуаплылыҡ тойғоһо етерлек.

**"Башинформ" материалдарын файҙаланып, Гөлбаныу ГӘРӘЕВА әҙерләне.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың мәктәп, мәктәп-интернат уҡыусылары, көндөҙгө бүлектә белем алған вуз һәм ссуз студенттары 1 сентябрҙән электричкала льготалы юл хаҡы түләп йөрөй ала. Студент, уҡыусы билеты йәки мәктәптән справка күрһәткәндә, билет 50 процент ташлама менән һатыла. Ҡала эргәһе поездына льгота 2020 йылдың 31 декабренә тиклем һаҡлана, артабан оҙайтырға мөмкин.

✓Алда көтөлгән ялдарҙа Башҡортостанда көньяҡтан йылы һауа массаһы тарала, тип хәбәр итә Башгидромет. Көндөҙ һауа температураһы +20 градусҡа яҡынаясаҡ. Киләһе аҙнала республикала һыуыҡ булыуы көтөлә, һауа температураһы төндә +4, +11, көндөҙ +12, +18 градустан да юғары күтәрелмәйәсәк. Күп райондарҙа ямғыр, урыны менән борсаҡ яуыуы көтөлә.

✓Башҡортостандың Тарифтар буйынса дәүләт комитеты республика территорияһындағы ҡала һәм ҡала эргәһе, муниципаль һәм муниципаль-ара маршруттар буйынса дөйөм ҡулланылыштағы автомобиль транспорттарында даими рәүештә пассажирҙар һәм багаж ташыу өсөн иң юғары хаҡтар кимәлен раҫланы. Тейешле документ ойошманың рәсми сайтында урынлаштырылған.

✓Өфөнөң Затон биҫтәһендә 9-сы дауахананың поликлиникаһын төҙөү планлаштырыла. Төҙөләш-монтаж эштәренә һәм ҡоролмалар алыуға 1 миллиард 71 миллион һум аҡса йүнәлтелә. Проектты Рәсәй һәм Башҡортостан бюджеттарынан финанслайҙар, төҙөләштә 2022 йылда тамамлау күҙаллана.

✓Өфөнөң Октябрь районы суды коронавирус пандемияһы осоронда санитар ҡағиҙәләрҙе боҙған, ваҡытында тейешле һаҡланыу саралары күрелмәгән өсөн Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһына 100 мең һум штраф һалды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, дауахана-ла 1200 ауырыу һәм табип карантинға ябылғайны, улар бәйләнеш тотҡан 3000 кешегә Covid-19 менән зарарланыу ҡурҡынысы яныны.

✓Белорет районы Сосновка ауылында ҡотороу сире асыҡланыуға бәйле карантин иғлан ителеүе тураһында республиканың хоҡуҡи мәғлүмәт порталында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың ҡарары баҫылған. Ҡотороу сиренең кеше сәләмәтлегенә ниндәй ҙур зыян килтереүе билдәле, шуға Роспотребнадзорҙың бөтә талаптарын үтәү кәңәш ителә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# МӘКТӘПТӘР ӘҘЕР



**Был аҙнала Өфө ҡала округы хакимиәтендә уҙған сираттағы оператив кәңәшмә баш ҡаланың хужалыҡ ойошмалары эштәренә ҡағылышлы мәсьәләләр буйынса фекер алышыуҙан башланды. "Өфө торлаҡ хужалығы идаралығы" МБУ-һы директоры Альберт Ғәҙелшин киләһе йылытыу мәленә әҙерлек барышы менән таныштырҙы.**

- Бөтә хеҙмәттәр ҙә сентябрь башына йылытыу мәленә әҙер булырға тейеш. Әгәр ҙә сентябрь айы тәүге көндәрҙән үк һыуыҡ килһә, барыһын да алдан күҙаллап, тәү сиратта өйҙәрҙә, белем биреү һәм социаль учреждениеларҙы йылылыҡ менән тәьмин итергә бурыслыбыҙ, - тип билдәләне Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин докладты тыңлағандан һуң.

Кәңәшмә барышында баш ҡала мәктәптәренең 1 сентябрҙә ишектәрен асырға әҙерлек кимәле лә тикшерелде. Был турала Киров, Калинин һәм Совет районлары хакимиәттәре башлыҡтары тулы мәғлүмәт еткерҙе. Киров районының 18 дөйөм белем биреү ойошмаһында яңы уҡыу йылында 20752 уҡыусы белем аласаҡ, шуларҙың 2327-һе беренсе синыфҡа килә. Район хакимиәте башлығы Илвир Нурдәүләтов әйтеүенсә, учреждениеларҙы яңы шарттарға әҙерләү буйынса бик ентекле эштәр атҡарылған, балаларҙың һәм педагогтарҙың сәләмәтлеген ҡайғыртҡан бөтә тейешле медицина һаҡланыу сараларынан тыш, дәрестәр теҙмәһе яңыса төҙөлгән, синыфтарҙағы балалар һаны ла кәметелгән. Ә бына Өфөнөң Калинин районында 24 дөйөм белем биреү учреждениеһына 21603 уҡыусы уҡырға килә, 2488-е беренсе синыфҡа. Әйтергә кәрәк, районда 2020 йылда 9 мәктәптә 744 өҫтәлмә урын асылған һәм уҡыусыларҙың хәүефһеҙлеген тәьмин иткән әҙерлек эштәре тулыһынса тамамланған. Баш ҡаланың Совет районында 19 дөйөм белем биреү учреждениеһы эшләй, әлегә 16038 уҡыусы иҫәпләнә, 1926-һы - 1-се синыфтар, ҡабул итеүгә ғаризалар йыйыу дауам итә. Кәңәшмәлә хәбәр итеүҙәренсә, Дим районында 9 мәктәп, 10330 уҡыусы уҡырға бара, шуларҙың 1347-һе беренсе синыфтар. Барлыҡ был мәктәптәрҙә балаларҙың юл хәүефһеҙлеге, учреждениеның эске һағы һәм башҡа уңайлы шарттар булдырыу йәһәтенән эштәр ослanған. Өлфәт Мостафин район башлыҡтарына 28 августа тиклем мәктәп һәм балалар баҡсаларына яҡын урынлашҡан йәйәүлеләр үткәүелдәрендә юл тамғаларын яңыртып бөтөргә, учреждениеларҙа дезинфекция уҙғарырға ҡушты.

Оператив кәңәшмәлә 2020 йылдың беренсе яртыһында административ комиссиялар эшмәкәрлегенә йомғаҡ яһалды. Граждандар йәмғиәте институттары менән бәйләнеш тотоу идаралығы начальнигы Артур Ғафаров ошо осорҙа баш ҡала районларының административ комиссиялары тарафынан 22 мең 739 эш ҡаралыуы тураһында хәбәр итте. Һөҙөмтәлә 19 миллион 177 мең һумлыҡ штраф һалынған. Докладсы шулай уҡ республика Башлығының юғары әҙерлек тураһындағы Указына ярашлы битлек кейеп йөрөү талап ителгән осорҙа административ кодекста яңы пункт - Башҡортостан территорияһында юғары әҙерлек режимы талаптарын боҙған өсөн 13.19 статья барлыҡҡа килеүе хаҡында һөйләне. "Был статья сиктәрендә административ комиссиялар тарафынан 3 мең дә 94 административ протокол төҙөлгән. Был норма буйынса граждандарға иҫкәрмә яһалды", - тине Артур Ғафаров.

Кәңәшмәне дауам итеп, Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин тағы бер нисә мөһим темаға иғтибар итте.

- Быйыл беҙ "Беренсе май" паркын яңыртыу эштәрен тамамлайбыҙ. Шулай уҡ "Мотор төҙөүселәр" мәҙәниәт йорто алдындағы майҙанды төҙөкләндерәбеҙ. Ул ҡаланың төньяҡ өлөшөндә йәшәгән халыҡты үҙенә йәлеп иткән ер, ял итеү һәм мәҙәни саралар уҙғарыу урынына әүерелә бара. Беҙ был майҙансыҡты биҙәрлек фонтан төҙөү тураһында ҡарар ҡабул иттек, - тине Өлфәт Мансур улы һәм өфөләргә буласаҡ фонтан проектын күрһәтергә ҡушты. Ул тағы ла 2022 йылда республикала ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы, һәрби осоусы Муса Гәрәевтың тыуыуына 100 йыл тулыу билдәләнеүен хәтергә төшөрҙө. Быға бәйле Дан бульварында урынлашҡан скверҙы яңыртыу буйынса проект әҙерләргә ҡушты.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Үткән йомала Өфө ҡала округы хакимиәтендә ҡала халҡын транспорт менән хеҙмәтләндереүҙе ойоштороу темаһына матбуғат конференцияһы үтте.**

Спикер сифатында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары, Транспорт һәм элемтә идаралығы начальнигы Илдар Юланов та сығыш яһаны һәм шәхси ташыусыларҙың автобуста йөрөү хаҡын арттырыу хаҡында бер нисә тапҡыр Өфө ҡалаһы хакимиәтенә мөрәжәғәт итеүен әйтте. Быны улар һуңғы дүрт айҙа пассажирҙар һаны кәмеүе, яғыулыҡ һәм запас частарға хаҡ артыуы менән нигеҙләй.

- Ҡала хакимиәте шәхси ташыусыларҙың тәләгән һәм транспорт сараларының әлеге һанын һаҡлау, уларҙы яңыртыу кәрәклеген иҫәпкә алып, хаҡты яңынан ҡарарға тәҡдим итеп, БР Тарифтар буйынса дәүләт комитетына мөрәжәғәт итте, - тине Илдар Ғизетдин улы. - Әлеге ваҡытта экспертиза һәм тәҡдимдәр алыу өсөн үҙгәрештәр индереү тураһында ҡарар проекты дәүләт комитетының рәсми сайтында баҫылып сыҡты.

Был проектҡа ярашлы, ҡулаҡса йәки банк картаһы менән түләгән осраҡта юл хаҡы 28 һум буласаҡ. Ә "Башавтотранс" "Алға" картаһын ҡулланғандар өсөн хаҡты шул көйө, йәғни 20 һум кимәлендә ҡалдырырға ниәтләй. Шәхси ташыусылар "Алға" картаһы менән түләгәндәргә 23 һум билдәләргә ниәтләй. Проект раҫланған осраҡта был үҙгәрештәр 20 августан үҙ көсөнә инәсәк.

ҠЫҪҠАСА

# УҢҒАНДАРҒА - АВТОМОБИЛЬ

✓ **Быйыл уңыш йыйыу эштәре һөҙөмтәләре буйынса иң яҡшы аграрийҙарҙы бүләкләү өсөн республика буйынса 20 "Лада Нива" автомобиле бүленәсәк.** Вице-премьер, ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов әйтеүенсә, конкурс биш төрлө номинация буйынса үткәрелә: "Иң яҡшы комбайнер", "Иң яҡшы үҙйөрөшлө сапҡыс операторы", "2020 йыл уңышын йыйыуҙа ҡатнашҡан йөк автомобиленең иң яҡшы водителе", "Тунға һөрөүҙә иң яҡшы механизатор". Баһаламаның төп критерийҙары булып иген һуғыу, иген һәм иген-ҡуҙаҡлы культураларҙың сабылған дөйөм майҙаны, комбайндарҙан токка һәм элеваторға ташылған игендең дөйөм күләме, йыйып алынған шәкәр сөгөлдөрөнөң дөйөм майҙаны һәм тракторҙа түңгә һөрөлгән дөйөм майҙан. Иген урыуҙа эшләгән конкурста ҡатнашыусыларҙың эш һөҙөмтәләре гектарҙарҙа спутник һәм навигацион контроллөү ҡоролмалары ярҙамында раҫланырға тейеш. Иген урыуы конкурсанттарҙың эш һөҙөмтәләре мониторингы Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығы сайты аша башҡарыласаҡ.

✓ **2021 йылда мәктәп тамамлаусылар информатиканан БДИ-ны компьютерҙар файҙаланып тапшырасаҡ.** Был хаҡта Рособрнадзорҙың матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. 2018 йылда был предмет буйынса имтихан биреүселәр һаны 71 704 кеше булһа, былтыр был күрһәткес 80 меңгә артты, ә быйыл имтихан биреүселәр кәмеүенә ҡарамаҫтан, 83 610 уҡыусыға артты. Имтихандың компьютер формаһы 27 бирем тәҡдим итә. Шул иҫәптән нигеҙ кимәле ҡатмарлығындағы - 10 , 13 - юғарыраҡ һәм 4 иң юғары ҡатмарлыҡтағы биремдәр. Имтиханға 3 сәғәт 55 минут ваҡыт бирелә. Информатиканан БДИ тапшырырға теләүселәргә имтихан эштәре менән алдан танышып, күнекмәләр үткәрә тороу өсөн Федераль тест үҙәге (ФЦТ) һәм Федераль педагогик үлсәмдәр институты сайттарында һынау заданиелары тәҡдим ителәсәк.

✓ **Әлеге көндә Өфө ҡалаһы даими пассажирҙар ташыу муниципаль маршруттары туҡталка урындары реестрына 1233 туҡталка индерелгән. Ҡалала бөгөн 135 "Аҡыллы туҡталка" ҡуйылған.** Шуларҙың 115-ен "Уфагортранс" МУП-ы хеҙмәтләндерә. Был туҡталкалар светодиод яҡтылыҡ, транспорт килеүен хәбәр иткән мәғлүмәти табло, "112" берҙәм һандары буйынса ашығыс ярҙам хеҙмәттәрен саҡырыу, мобиль ҡоролмалар өсөн usb-зарядка менән йыһазландырылған. Шулай уҡ унда 3 тышҡы видеокүҙәтеү камераһы ҡуйылған. Һәр граждан "Уфагортранс" предприятиеһының ҡыҙыу бәйләнеш номерҙарына 8-800-600-51-84, йәки 273-94-29 шылтыратып, видеояҙманы һорап алыуы мөмкин.

✓ **Рәсәйҙә автомобиль, мотоцикл һәм башҡа төр транспорт саралары номерҙарына яңы милли стандарт үҙ көсөнә инде.** Төп знак төрҙәренең шрифты һәм форматы үҙгәрешһеҙ ҡаласаҡ, тип хәбәр итә РИА Новости Росстандартҡа һылтанма менән. Әммә беркетеү урыны стандарт булмаған транспорт та үҙенә тейешле тамғаһын аласаҡ. Бынан тыш, мотоциклдар өсөн габарит үлсәмдәре кәметелде һәм илселек, консуллыҡ вәкиллектәренең мототехникаһы өсөн махсус тамғалар индерелде. Шулай уҡ дөйөм ҡулланылыштағы юлда йөрөүгә тәғәйенләнмәгән мотоцикл транспорт саралары (ҡаргиҙәр, һаҙлыҡта йөрөүсе мотоцикл төрҙәре, мотовездеходтар) өсөн дә айырым тамға биреләсәк. Бынан тыш, мопед, спорт һәм классик (ретро) автомобилдәр өсөн теркәү тамғаларының яңы төрө индерелә. Уларҙы бөтә төр транспорт сараларын теркәү тәртибен регламентлаған норматив хоҡуҡи акттарҙы раҫлағандан һуң тапшырасаҡтар.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тәбиғи антибиотиктар

**Антибиотиктарға альтернатива тәбиғәттә лә бар. Бик күп үсемлектәр, үләндәр, емештәрҙән бактерияларға ҡаршы сифаттары билдәле.**

❖ **Мүк еләге (клюква).** Мүк еләге бөйәл юлдары системаһын инфекциянан ҡаклай, ул лайлалы тиресәлә бактериялар үрсеүҙе киҫәтә. Эмалле һауытҡа 2,2 литр фильтрланған һыу ҡойоп ҡайнатырға. Айырым һауытта 230 грамм мүк еләгенә 140-160 грамм шәкәр һалып иҙергә. Шуны һыуға өҫтәп, ҡайнатырға. Мүк еләге морсын 2 сәғәт тотҡандан һуң һөҙөргә. Бөйәл ҡыуыҡы һәм бөйәр ауырыуҙары булғанда көнөнә 2 литр мүк еләге морсын 1 ай дауамында эсергә кәрәк.

❖ **Петрушка.** Петрушка ла тәбиғи антибиотик булып тора. Ул тамырынан алып орлоҡтарына тиклем файҙалы. Петрушка бөйәл ҡыуығы, эсәктәрҙе ҡатыу алғанда, бөйәр ауырыуҙары яфалағанда бөйәл ҡыуыҙырыу өсөн ҡулланыла. Шулай уҡ тәнгә сыҡҡан төрлө сабыртмаларҙан, сәбәбе төрлө тапма ауырыуҙарынан дауа һәм биҙгәкҡә (малярия) ҡаршы орлоғо ҡулланыла. Петрушка орлоғонан дауа әҙерләү өсөн ярты балғалаҡ орлоҡҡа 250 мл эҫе һыу ҡойорға, 8 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Был бер тәүлек дауамында эсергә кәрәкле төнәтмә, уны өскә бүлеп ҡабул итергә.

Петрушка тамырынан төнәтмә әҙерләү өсөн 4 балғалаҡ ваҡланған тамырға 250 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 20-30 минут тоторға һәм һөҙөргә. Төнәтмәне һыуытырға һәм өскә бүлеп ас ҡарынға эсергә.

❖ **Куркума.** Эсәктәрҙең төрлө ауырыуҙары булғанда тәбиғи антибиотик урынына ҡулланыла ала. Куркума бәшмәктәр, вирустар, бактерияларға ҡаршы һәм шештәргә ҡаршы сифаттарға эйә. Вируслы инфекциялар эпидемияһы һәм грипп осорона ауырыуҙы иҫкәртеү маҡсатында куркуманы картуф, дөгө, ит аштарына ҡушып бешерергә була. Кешегә уны тәүлегенә бер балғалаҡтан ла күп ашарға ярамай.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

XX быуат урталарына боронғо ҡайылған әйберҙәр төбәктең төньяҡ өлөшөндә күп һаҡланған (Дәүләкән, Ҡырмыҫҡалы һәм башҡа райондарҙа). Нәҡ шул яҡтарҙа ғына өйҙә икегә бүлеп эленгән ҡайылған ҙур шаршауҙы осратып булған. Ҡайһы бер сигелгән әйберҙәр Рәсәй этнография музейына һәм Өфө музей фондтары коллекцияларына эләккән.





Һыҙатлы элмәле ҡайыу (биҙәк өлгөләре): а - таҫтамалда; б - ҡатындарҙың түшелдеректәрендә (төньяҡ-көнбайыш райондарҙа)



Элмә һәм ҡыя сәнсеп сатрашлап ҡайылған намаҙлыҡ (БР, Иглин районы, Иҫке Ҡарашиҙе ауылы). Автор фотоһы. 1975

Малсылыҡ менән шөғөлләнгән төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ултыраҡ тормошҡа сағыштырмаса иртә күсеп (XIX быуаттың 70-80-се йылдары) һәм күршеләш башҡа халыҡтар менән даими мәҙәни бәйләнештәре булыуға ҡарамаҫтан, быуат дауамында ҡайыу оҫталығы техник йәһәттән ныҡ үҙгәреш кисермәгән. XX быуат уртаһына тиклем нәфис ҡайыуҙа элмә һәм киң элмә (широкий тамбур), ҡыя сәнсеп сатрашлау төп йөйҙәр буларaҡ ҡулланылған. Йыш ҡына ҡабартма ҡайыу киргелә ырғаҡ менән сигелгән. Кизе-мамыҡ, нәҙек йөн (дебет еп), ебәк ептәр ҡулланылған. Аҡ туҡымаға ла сиккәндәр, крашенин (тупаҫ буялған крәҫтиән туҡымаһы), ҡыҙыл, ҡыҙғылт һары, һары төҫтәгә һатып алынған туҡымаларға ҡайығандар, йәшел һәм зәңгәр ерлектәр ҙә булған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: төньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАШҠОРТОСТАНДА - БЕРЕНСЕ!

**(Башы 1-се биттә).**

***Геопарктың йөрәге - үҙенсәлекле термаль быулы Янғантау тауы.*** Ғалимдар уның килеп сығышы тураһында һаман да бәхәс ҡорғанда, ябай халыҡ рәхәтләнеп тәбиғәт дауаһын файҙалана. "Янғантау" шифаханаһы йыл һайын 30 меңдән ашыу ял итеүсене ҡабул итә. Медицина процедураларынан тыш, бик күп күңел асыу саралары ҡаралған. Берәүҙәр экскурсияларға барғанда, икенселәр аттарҙа йөрөй (иппотерапия), бәғзеләр йәйәүле прогулкаға сыға. Парк территорияһында төрлө оҙонлоҡтағы маршруттар бар. Таҙа, бөхтә, төҙәк, кисен юлдар яҡтыртылған юлдарҙан йөрөү - үҙе бер рәхәтлек.

***Мәсетле киҫелеше - бер нисә геологик дәүерҙе үҙ эсенә алған ҡатлам.*** Бында Ерҙә тормоштоң үҫешен ҡылыҡһырлаған 15 ҡатлам - геологтар өсөн ҙур табыш. Мәсетле киҫелешендә Ерҙең 5 миллион йыллыҡ геологик тарихы һаҡланған. Башҡорт ерҙәрендә динозаврҙар йөрөгәнме? Юҡ, башҡорт ере Ерҙең динозаврҙарға тиклемге формалашыу тарихын һаҡлай. Уның ҡарауы, Башҡортостанда 280-250 миллион йыл элек дингеҙ йәйрәп ятҡан. Мәсетле киҫелешендә табылған ҡалдыҡтар ҙа ошоно раҫлай. Дингеҙ яйлап һайыҡҡан, уның ярҙарында һаҡланып ҡалған табыштарҙы ғалимдар бөгөн дә таба. Бында 100-ҙән ашыу балыҡ, моллюск, ылымыҡ төрө асыҡлана. Мәсетле киҫелеше - Рәсәйҙә тиңе булмаған Ерҙең геологик тарихы таныҡлығы, уникаль тәбиғәт ҡомартҡыһы.

***Спелеологтар баһалауынса, геопарк территорияһында 200-ҙән ашыу мәмерйә бар.*** Уларҙың иң билдәлеһе - Иҙрис йәки Салауат мәмерйәһе (шулай уҡ Киҫәташ, Краснополь, Һарай тип тә йөрөтәләр). 1774 йылда баш күтәреү баҫтырылғандан һуң, Салауат Юлаев тап шунда йәшенгән тигән төрлө легендалар йәшәй. Мәмерйә эргәһендәге ҡаяларҙа мезолит дәүеренә ҡарағ төшөрөлгән һүрәттәре табыла. Иҙрис мәмерйәһе - федераль әһәмиәттәге археология һәйкәле. Уға махсус ҡорамалдарһыҙ ғына инеп була.

Урмантау мәмерйәһе, киреһенсә, насар әҙерлекле яратмай, сөнки ул туннель һәм коридорҙар лабиринтынан тора, иҙәнендә балсыҡ һәм таш ята, ә ингән урында хатта йәйгеһен дә боҙ иремәй. Шуға күрә махсус ҡорамалдарһыҙ инеү тәҡдим ителмәй. Ә инде әҙерлекле туристар боҙ сталактиттарын һәм сталагмиттарын күрә ала.

Лаҡлы мәмерйәһе лә - иң популяр урындарҙың береһе. Атамаһын ул ошо атамалы ауылдан алған. Мәмерйәгә төшөү өсөн уңайлы баҫҡыстар эшләнгән. Уның эсендә хатта йәйгә эҫе көндә лә ныҡ һыуыҡ. Дөйөм оҙонлого - 252 метр. Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш өлөшөндәге иң ҙур мәмерйә.

***Геопарк маҡсаттарының береһе - ауыл иҡтисадын күтәреү өсөн туристар ағымын арттырыу.*** Ауыл халҡы туристарҙы торлаҡ, туҡланыу менән тәьмин итә, такси хеҙмәтен күрһәтә. Бынан тыш, килеүселәр үҙҙәре менән еләк, ҡайнатма, бал, һөт һәм һөт ризыҡтары, ҡул эштәре алып ҡайтырға тырыша. Ҡулы эш белгән кешегә хөрриәт. Мәҫәлән, мәктәптә информатика уҡытыусыһы булып эшләгән Илфат Исмәғилев Иҙрис ауылында "Шайтан-көҙәй" тирмәләр кемпингын булдырған. Йәйге каникулда ул эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә. Эшен тәүҙә бер генә тирмәнән башлаһа, хәҙер инде киңәйә бара. Йылғанан ағыуҙар, көрпәк эшләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре һәм башҡа ҡыҙыҡлы шөғөлдәр ойоштора.

Шулай уҡ урындағы халыҡ үҙ ҡулдары менән эшләгән сувенирҙарын геопарктың визит-ҡарағы аша һата ала. Күп балалы Кинзиндар ғаиләһе ҙур сувенирҙар палаткаһы асҡан. Ойоҡбаштар, бал, миндек һәм магниттарҙан тыш, Башҡортостан тәбиғәтен сағылдырған пейзаждарҙы туристар яратып ала.

***Урмансылағы этнойорт - геопаркта барлыҡҡа килгән ҙур булмаған, әммә тоторокло бизнес өлгөһө.*** Башҡорт мәҙәниәтенә мөкиббән ғашиҡ, районда билдәле мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, төрлө конкурстар лауреаттары, башҡорт музыка ҡоралдарында оҫта уйнаусы Сафуан менән Лидия Сәйетгәлиндар үҙҙәренең шөғөлөн аҡса эшләү ысулына әйләндергән. Йәше бер быуаттан ашҡан олаталарының ике иҫке өйөндә улар башҡорт йорто музейы асҡан. Унда башҡорттарҙың көнкүреш һәм мәҙәниәт әйберҙәре тупланған.

Этнойортта мейес тә бар, тимәк, туристар утын ярып, мейес яғып ҡарай ала. Хатта кәзә һауып ҡарарға ла мөмкин. "Күптән түгел Мәскәүҙән ейәне менән бер ханым килде. Баҡсалағы ҡыярҙы өҙөп алырға мөмкинме, тип һораны. Әлбиттә, рөхсәт иттек." Бер ваҡытта ла түтәлдәрҙә, ҡыярҙың нисек үҫкәнен күргәнем булманы. Уларҙы ғүмер буйы магазиндан һатып алам, тип һөйләне", - тип көлә Сафуан.

Ҡунаҡтар боронғо әйберҙәр менән генә танышып ҡалмай, Сәйетгәлиндар уларға ҙур булмаған тамаша - музыка ҡоралдарында уйнап-йырлап күрһәтә. Һуңынан инде мотлаҡ рәүештә самауыр тирәләй йыйылып сәй эсәләр. Ҡыҫтыбый бешереү өсөн хужабикә таң менән тора, ҡамыр ҡуя. Үҙҙәренең эшмәкәрлеген улар бизнес тип атарға тартына, әммә йәйгеһен ҡунаҡтарға еләк һәм бәшмәк һатып ҡына бер нисә йөҙ мең аҡса эшләйҙәр. Шулай уҡ сувенирҙар эшләүгә ауылдаштарын да йәлеп итәләр.

Ҡунаҡтар көн һайын тигәндәй килә. Уларҙа Ирандан, Австриянан, Швейцариянан, Англиянан, Ирландиянан, Франциянан, Германиянан, хатта Уругвайҙан да туристар булған. Сит ил ҡунаҡтарын ике нәмә һоҡландыра: мейес һәм хужабикәнең селтәре.

***Салауат районында 22 мәсет бар. Уларҙың иң ҡыҙыҡлыһы - Лаҡлы ауылы мәсете.*** Шулай уҡ геопарк һәм район музейҙары менән дә маҡтана ала. Ауыл мәктәбе бинаһында урынлашҡан Лағыр ауылы крайҙы өйрәнеү музейы ла геопарк маршрутына инә һәм унда боронғо хайуандарҙың һөйәктәрен күрергә мөмкин. Малаяҙҙа Башҡортостандың милли геройы Салауат Юлаев музейы урынлашҡан. Уның экспонаттары араһында батырҙың ҡылысы һәм әйәре һаҡлана. "Янғантау" шифаханаһында гәҙәти булмаған "Каравелла" диңгеҙ музейы эшләй. Уны заманында Кубала хеҙмәт иткән Рауил Саматов булдырған. Әрме хеҙмәтенән бер сумаҙан ҡабырсаҡ тейәп ҡайтып, тиҫтә йылдар эсендә ул ҙур коллекция туплауға өлгәшкән. Шулай уҡ Арҡауыл ауылында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың йорт-музейында булырға, уның шәхси әйберҙәре менән танышырға мөмкин.

Теләүселәр "Коргаҙаҡ" һыуын һауыттарға тултырыу цехына экскурсияға бара ала. Әммә бынан алда цехтан бер нисә километр алыҫлыҡта ятҡан минераль һыу сығанағына мотлаҡ сумып сығырға кәрәк!

Ҡыҫҡаһы, бөгөн донъяла ЮНЕСКО-ның 147 глобаль геопаркы бар (иң күбе Ҡытайҙа). "Янғантау" геопаркы - әлегә Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәйҙә берҙән-бер үҙенсәлекле объект. Ошо беренселекте мөмкин тиклем файҙалыраҡ итеп ҡулланып ҡалырға ғына кәрәк.

**Ольга МАЛОВИЦА.**



**✓ Байлар олоҫоноң күренекле башҡорто Дөмәй Ишкәев, был тыйыуға ҡарамай, үҙ эштәрен хәл итеү маҡсатында, Әстерхан аша урау юл уҙып, Мәскәүгә килеп етә.**



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЙЫЛАН ЫРЫУЫНАН,

## боронғо башҡорт затынан беҙ



Мәскәү дәүләтенә ҡушылғандан һуң байтаҡ ҡына йылдар буйына Нуғай Урҙаһы кешеләре көньяҡ һәм көньяҡ-көнбайыш башҡорттары биләгән урманлы-далалы ерҙәргә килеп, бындағы мул үләнле көтөүлектәрҙә үҙҙәренең малын көтөп, күсеп йөрөй. Әммә XII быуат башында уларға ҡалмыҡтар һөжүм итә, инде тамам көсһөҙләнгән Нуғай Урҙаһы уларға артыҡ ҡаршылыҡ күрһәтә алмай. 1610-1613 йылдар арауығында Оло Нуғай Урҙаһы олоҫтары бер-бер артлы Волга аръяғына, артабан Төньяҡ Кавказ һәм Кубань тарафтарына күсеп китә.

Нуғайҙар киткәндән һуң ҡалған ерҙәрҙе төрлө ырыу-аймаҡтар араһында юридик яҡтан теркәү мәсьәләһе килеп тыуа. Әйтергә кәрәк, башҡорт ырыуҙары башлыҡтары был эште тиҙ арала Мәскәү дәүләте хакимиәте чиновниктарынан раҫлата алыуға өлгәшә. Улар үҙҙәре биләгән ерҙәргә раҫлаусы (подтвердительные), бүлеүсе (раздельные) һәм һаҡлаусы (оберегательные) грамоталар ала. Бындай грамоталар XVII быуаттың беренсе яртыһында башҡорт бейҙәренә һәм тархандарына батшалар Михаил Федорович һәм Алексей Михайлович хакимиәттәре тарафынан тапшырыла. Шул уҡ ваҡытта Йылан (Елань) олоҫо башҡорттары ла үҙҙәренә ошондай грамоталар ала. Мәҫәлән, ошо осорға ҡараған бер документҡа ярашлы, атап әйткәндә, 1618 йылда Танып һәм Ағиҙел йылғалары үҙәнендәге ерҙәрҙе биләү хоҡуғы (владенная грамота), ошо грамотала теркәлгән ике башҡорт кешеһенә бирелә: "уфимские башкирцы Казанской дороги Яски-Еланской волости Мухамет Абдулов, Базайка Байметов с товарищи", тиелә бында.

XVII быуат башында Йылан олоҫо ике тармаҡтан - Эске Йылан һәм Ҡыр Йылан (Тышҡы Йылан) аймаҡтарынан хасил була. Уларҙан бер ни тиклем айырымланған Баҙраҡ аймағы ла була, ул П.И. Рычков списогында теркәлгән. Ошо аймаҡ исеме менән аталған 3 ауыл бар: Оло Баҙраҡ һәм Кесе Баҙраҡ ауылдары (Борай районында), Тәүбаш Баҙраҡ ауылы - Дүртөйлө районында.

Йылан олоҫо башҡорттары тарихи Башҡортостан ерлегендә тоҡанған барса ихтилалдарҙа ла бик әүҙем ҡатнаша. Мәҫәлән, 1662-1664 йылдарҙағы хәрәкәт осоронда Минзәлә ҡәлғәһендә аманат итеп тотолған башҡорттар хаҡындағы бер документта былай тип әйтелә: "Иланские волости и деревни Мамбетко Сабачеев, в ево место быть Янчюре Ногаеву или Ирысаю Аккучюкову". Бында теркәлгән Йылан ауылы кешеһе Ейәнсура Нуғаев һуңғараҡ осорҙа киң билдәлелек тапҡан йәмәғәт эшмәкәре Йәркәй Ейәнсуриндың (Янчурин) атаһы була.

Йылан ырыуы башҡорттары Петр I батшалыҡ иткән осорҙа, 1704-1711 йылдарҙа башҡорттарҙың бойондороҡһоҙлоҡ өсөн алып барған оҙайлы көрәшендә ҡатнашып, батша ғәскәрҙәренә ҡаршы байтаҡ ҡына алыштарҙа уңышҡа өлгәшә. Был ихтилал Ижора (Ингерманланд йәки Семенов) канцелярияһы тарафынан башҡорттарға ҡарата ҡылынған иҫ киткес ғәҙелһеҙлектәргә һәм яуыз ғәмәлдәргә ҡаршы тоҡанған протест рәүешендә башланып китә. Шул уҡ ваҡытта ихтилалдың төп сәбәптәре Петр Беренсе Өфө өйәҙен туранан-тура Ҡаҙан губернаһына буйһондорғандан һуң бында йәшәгән башҡорттарҙың уҫаллығы һәм яуызлығы менән билдәле булған Ҡаҙан комиссары Сергеев тарафынан аяуһыҙ йәберләнеүе һәм мыҫҡыл ителеүе менән дә бәйле. 1705 йылда Сергеев башҡорт илселәренә туранан-тура Мәскәүгә барып, ундағы батша хакимиәте чиновниктарына үҙ һорауҙары менән мөрәжәғәт итеүҙе ҡәтғи тыя. Кемдәр был тыйыуҙы боҙа, улар аҫып үлтерелә. А. Сергеев башҡорт старшиналарына былай ти: "...покуда де он в Уфе, будет то и Москва". Байлар олоҫоноң күренекле башҡорто Дөмәй Ишкәев, был тыйыуға ҡарамай, үҙ эштәрен хәл итеү маҡсатында, Әстерхан аша урау юл уҙып, Мәскәүгә килеп етә. Ошо хәл Ҡаҙандың вице-губернаторы Н. Кудрявцевҡа мәғлүм булғас, "башбаштаҡ" Д. Ишкәевты тотоп алыу өсөн махсус операция ойоштора, ул Ҡаҙан ҡалаһына алып ҡайтыла һәм язалап үлтерелә. Ҡаҙандан ебәрелгән комиссар А. Сергеев башҡорттарҙы эҙәрлекләүҙә һәм мыҫҡыллауҙа үҙенең начальнигынан да арттырып ебәрә. Ул байтаҡ ҡына арҙаҡлы башҡорт бейҙәрен, дин әһелдәрен Өфөгә "ҡунаҡҡа" саҡырып, "һыйлау" ойоштора: "...вина и меду поставя и зелья положа, в неволю поил, кто и век свой меду и вина не пивали, азей и муллов и ахунов их поил; а ежели кто не станет пить, тех бив палками и насильно поил, и напившися де лежали без памяти, и лежачих де людей порохом палил, солому огнем зажигал, на руки свечи прилеплял, другим в горсти пороху насыпав огнем палил, а збережась лежалых людей сызнова подняв по неволе поил, хотя поморить... всякому пьяному лежачим людям, держав против солнца зеркало свое, рожи и головы жег и, который тронется, еще поил, чтобы поморить..."

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ
әҙерләне.
(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Башҡорттар артҡа сигенмәй

Нафиҡов иптәштең боецтары һәм командирҙары был һуғышта айырыуса батырлыҡ һәм ныҡлыҡ күрһәттеләр, улар гитлерсыларҙы аяуһыҙ ҡырҙылар. Һуғышта етәкселек иткән Нафиҡов геройҙар үлеме менән үлде.

Н. участкаһында барған һуғыштарҙа Кусимов иптәш часының боецтары һәм командирҙары дошмандың күп өҫтөн көстәренә ҡаршы өс тапҡыр контратакаға күстеләр, дошманды артҡа алып ташланылар, уны ҡасырға мәжбүр иттеләр. Иптәш Кусимов, етди яраланыуына ҡарамаҫтан, алыш аҙағына тиклем үҙ посында ҡалды. Беҙ гүзәл командирыбыҙ менән ғорурланабыҙ.

Бер ваҡыт беҙҙең часть командованиенан яуаплы задание - фрицтарҙы халыҡ йәшәй торған бер пункттан ҡыуып сығарырға бойороҡ алды. Разведка унда дошмандың автоматик минометтар, артиллерия менән ҡоралланған һәм танкылар колоннаһына ышыҡланған ҙур көстәре барлығын билдәләне. Бурыс бик етди ине. Командованиеның заданиеһын алғас та, беҙҙең атлылар төндә, һис көтмәгәндә, һөжүм иттеләр. Аңшайған дошман, һушын йыйып, бөтә төр ҡоралдарҙан ҡоторонған рәүештә ут асты. Шуға ҡарамаҫтан, беҙҙең боецтар дошмандың арыш эсендә ятҡан боевой расчеттарын юҡ иттеләр, халыҡ йәшәй торған пунктҡа бәреп инделәр һәм унан фашист баҫҡынсыларын ҡыҫрыҡлап сығарҙылар. Бурыс үтәлде.

Башҡорт халҡының данлыҡлы улдарының исемдәрен килтерәбеҙ.

Взвод командиры лейтенант Сафи Юртынбаев фашист баҫҡынсыларына ҡаршы батыр һуғышты, командир яраланғандан һуң подразделениеға командалыҡ итеүҙе үҙ өҫтөнә алды һәм үҙенең ҡаһарманлығы, ғәйрәтлелеге менән рухландырып, боецтарҙы атакаға алып барҙы. Бында дошманға ҙур юғалтыуҙар килтерҙе.

Танкыға ҡаршы орудие наводчигы Ф. Ниғмәтйәнов 500-600 метр алыҫлыҡтан тоҫҡап атып, 120-гә яҡын фашист һалдатын һәм офицерын, ике пулемет ояһын юҡ итте.

Өлкән сержант Ибраһим Ғәпсәләмов үҙ подразделениеһының беренсе сафтарында батыр һуғышты, үҙ ҡулы менән дошман офицерын үлтерҙе һәм документтарын алды. Дошмандың көслө уты аҫтында ауыр яраланған лейтенант Насировты һуғыш майҙанынан алып сығып, медпунктҡа илтте.

Хәрби фельдшер Н. Яҡупов дошмандың көслө уты аҫтында алғы һыҙыҡтан яраланған 41 кешене алып сыҡты һәм уларға беренсе ярҙам күрһәтте.

Ветфельдшер Фәйзелғаян Нурмөхәмәтов дошман офицерын, ике һалдатын үлтерҙе һәм уларҙың ҡоралын алды. Пулеметчик Ғәзизйән Ҡотдосов фашист автоматчиктарының ике ут нөктәһен юҡ итте һәм пулеметынан көслө ут асып, дошмандың психик һөжүмгә барыусы колоннаһын таратып ебәрҙе.

Миномет батареяһы командиры Фәтхи Ғайсин, минометтан мәргән атып, дошмандың ғәскәрҙәр тейәлгән понтон кәмәһен юҡ итте.

**Вәли ИҘРИСОВ
әҙерләне.
(Дауамы бар).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1823-1856 йылдар** - заманында күренекле мәғрифәтсе булған Низаметдин ибн Сиражетдин әл Илһами йәшәгән.

➔ **1823 йыл** - Златоуст тау округының Миәс ҡалаһы янында сәнәғәт ысулы менән алтын таба башлайҙар. X1X быуат аҙағына илдә табылған бөтөн алтындың 72 проценты Ырымбур губернаһы өлөшөнә тап килә.

➔ **1824 йыл 17 сентябрь** - Император Александр 1 Өфөгә килә һәм уның килеүе хөрмәтенә төҙөлә башлаясаҡ Александр сиркәүенең нигеҙ ташын һалыусы урындағы дворяндарҙың эшен күҙәтә.Ырымбурҙан Өфөгә китеп барышлай бер нисә сәғәткә Стәрлетамаҡта туҡтала. Өфөнән - Бөрөгә, унан Златоусҡа юллана. Миәс янындағы Ташкүтәргән йылғаһы үҙәнендә ҡом араһынан 3 килограмм да 300 грамм ауырлыҡтағы алтын киҫәге "табып" ала. Әлеге ваҡытта ул шулай уҡ Уралда табылған 36 килограмм 22 грамлыҡ алтын киҫәге менән илдең алмас фондында һаҡлана.

➔ **1825 йыл** - Ырымбурҙа хәрби училище асылып, унда 30 башҡорт балаһы уҡырға ҡабул ителә. 1844 йылдан һуң ул Неплюев кадет корпусы тип атала.

➔ **1825-1839 йылдар** - Мосолмандарҙың Дини йыйылышында мөфти булып эшләгән Әбделсәләм Әбдрәхимов йәшәгән йылдар.

➔ **1826 йылдың йәйе** - Каторгаға Себер һөрөлгән декабристар Урал һәм Башҡортостан ере аша үтеп китәләр.

➔ **1826-1889 йылдар** - Шағир һәм ғалим Ғәли Соҡорой йәшәгән йылдар.

➔ **1827 йыл** - Ырымбурҙа тәүге типография асыла.

➔ **1828 йылдың 11 ноябре** - Өфөлә губерна гимназияһы асыла. 30-сы йылдар урталарынан унда берәр-икешәрләп башҡорт балаларын да ҡабул итә башлайҙар.

➔ **1828-1829 йылдар** - Рус-төрөк һуғышында ике башҡорт һәм яртыһы башҡорттарҙан торған ике казак полкы ҡатнаша.

➔ **1829 йылдың 14 майы** - Ырымбур сауҙагәрҙәренә 5 йыл буйына сит ил сауҙаһы хоҡуғынан файҙаланырға рөхсәт ителә.

➔ **XIX быуаттың тәүге 30 йылы** - Башҡорт ерҙәрен генераль межалау үткәрелә. Ул аҫаба башҡорттар менән ерһеҙҙәр араһындағы ер мөнәсәбәттәрен тәртипкә һалыу маҡсатында эшләнә.

➔ **1829 йыл** - Ырымбур крайына бөйөк немец ғалимы һәм сәйәхәтсеһе Александр Гумбольдт килә.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.
(Дауамы бар).**

✓ *Ә минең ҡайһы бер замандаштарым шуны аңламаны. Улар мине күпме генә баҫһалар ҙа, мин шытып сыға торҙом. Шуның өсөн талантлы кешеләргә киҫәтеп әйтеү кәрәк: бер кемгә, бер нәмәгә ҡарамағыҙ - яҙығыҙ.*

Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы

**Мин белгән иң бөйөк башҡорт шағирәһе ул. Иң тәрән, иң моңло, иң һағышлы, иң затлы поэзия ижад итә белгән һәләт эйәһе. Һәм, ысынын әйтәм, уның шиғырҙарын аңлау һәм ҡабул итеү йәшенә яңы еттем, ҙур әҫәр уҡығандай тәьҫораттар алам, интернетта күҙгә салынған бер шиғырынан да әҫәргә "асығыуым" баҫылып, нәфсе туйып ҡала. Бар булмышым тула ла ҡуя. Ысын талант ошолай тәьҫир итәләр, күрәһең. Тамара Ғәниева тураһында һүҙ алып барғанымды күптәр аңлағандыр. Апайҙың инсульттан һуң сәләмәтлеге шәптән түгеллеген, интервьюларҙан баш тартыуын белһәм дә, осрашыу һорап мөрәжәғәт итергә йөрьәт иттем һәм "валяй" тигән егеттәрсә саҡырыу алып, түбәм күккә тейҙе. Һәм бына, шул һөйләшеү...**

# ӘҘӘМ ҒҮМЕРЕНЕҢ кешеләргә

**Тамара апай, һеҙ билдәле шәхес, Башҡортостандың халыҡ шағиры, әҙәбиәттә ҙур юл үткән ижадсы. Мәктәптә яҙыусы-шағирҙарҙың биографияһын ятлап үҫтек һәм һеҙҙекен дә белдек. Әммә бөгөн мин һеҙҙең биографияның эске яғын, беҙ белгән түгел, ә һеҙ кисергән яғын күргем һәм уҡыусыға ла күрһәткем килә. Шулай итеп, һеҙ Көйөргәҙе районы Кинйәкәй ауылы ҡыҙы...**

- Мин фронтовик атайҙың ҡыҙы. Әсәйем һуғышҡа тиклем Кәтибә Кинйәбулатовалар менән бергә рабфакта уҡып йөрөгән. Кәтибә апай - филология, әсәйем математика буйынса уҡырға инергә әҙерләнгән. Әммә әсәйемә уҡырға яҙмаған, һуғыш башланғас, туғандарын ҡарашырға тип ауылға ҡайтҡан һәм колхозда бухгалтер ҙа, бер арауыҡта председатель дә булырға тура килгән. Һуғыш тамамланғанда, әсәйемә - утыҙ, ә атайым ҡырҡтан үткән була.

Атайымдың һуғышҡа тиклем ғаиләһе булып, ул әйләнеп ҡайтҡансы ҡатыны ла, өс балаһы ла вафат булып ҡуя. Яңғыҙ тороп ҡалған фронтовикка әсәйемде димләгәндәр. Өләсәйем ҡыҙына: "Әхмәтшәриф (минең буласаҡ атай инде) бик уҫал тиҙәр бит, балам, әллә инде..." - тип үҙенсә киҫәтеп тә ҡараған ҡыҙын. Әммә әсәйемдең инде йәше ҙурға бара, иҫән ҡайтҡан ир-егет тә бик аҙ, яусылар ҙа таш яра торған икән - әсәйем риза булған һәм уларҙың ғаиләһендәге баш бала булып мин донъяға килгәнмен.

Атайым колхоз рәйесе булды. Аслыҡ, етешһеҙлек заманында халыҡ менән етәкселек итеү ҙә еңел эш булмаған. Яратҡанына ҡарағанда яратмағаны күп. Шунлыҡтан, мин тыуғас, "Әхмәтшәрифтең өйөндә төнө буйы ут яна, балаһы илаҡ икән, үсем, үсем..." тигәндәр ҙә булған.

Мин быуындаштарымдың барыһы ла күргәнде күреп, бер үк шарттарҙа үҫтем. Ата-әсәм икеһе лә арыуыҡ ологайған, күңелдәре ултырған кешеләр ине. Шулай ҙа өйҙә шул тиклем патриархатлыҡ ине, атайҙың һүҙенән бөрөү ҙә сығалмай. Атайым бит инде - ҡыпсаҡ (был үҙе бер диагноз), фронтовик, комбат! Ғаиләне генә түгел, бөтөн ауылды тотоп тора. Шундай кеше янында һыйышып һәм һыйып йәшәү өсөн ҡатын-ҡыҙға йәки тулыһынса баш һалыу йәки ҡасып китеү генә ҡала. Әсәйем баш һалған да, күрәһең. Һәм мин дә баш һалып, буйһоноп үҫтем.

"Тормош нисек булырға тейеш?" тигән барлыҡ ҡағиҙәләрҙе лә мин ошо атай-әсәйем тәрбиәһендә өйрәндем. Был ике ярым белемле, ярым наҙан булған кешеләр мин белгән иң интеллигент әҙәмдәр ине. Интеллигентлыҡ - ул күп белеү, күп уҡыу ғына түгел, ә донъяға, кешеләргә мөнәсәбәте менән баһаланып, үҙ йәмғиәтендә бер ниндәй хилафлыҡ ҡылмай, ҡарғыштар алмай йәшәй белеү. Улар ҙа миңә үҙ белгәндәрен һеңдерҙе, шул орлоҡто һалды. Юлда ятҡан бер һәнәк бесәнде лә һалып алмай торған бик намыҫлы, ғәрсел булдылар. Бурысҡа алыуҙы иң оят ғәмәл итеп һананылар һәм мине лә шулай өйрәттеләр. Шуға мин дә, ниндәй ауыр хәлдәрҙә лә, үҙем тапҡан тингә генә таянырға тырыштым. Педагогия училищеһында дүрт йыл, институтта биш йыл аслы-туҡлы йәшәгән йылдарҙа ла бурысҡа алманым. Эшләгәндә лә кредит алманым. Үҙем бурысҡа биргеләнем. Булмағанды ла бар, мул итеп күрһәтергә тырыштым.

Әсәйем 74 йәштә вафат булды. Уның китеүен бик ауыр кисерҙем. Бер ҡайтҡанда ауылдаштарымдан: "Һеҙҙең минең әсәйемә берәй дәғүәгеҙ бармы?" - тип һораным. Ауылдаштар: "Һинең әсәйең кеүек беҙҙә берәү генә ине", - тинеләр. Сөнки ул бөтөн ауылға писарь ролендә ине, кемгә документ, кемгә ғариза яҙа, русса яҡшы белә, грамоталы. "Әминә еңгә, ошолайтһаҡ нисек булыр икән?" тип уға кәңәшкә ирҙәр ҙә килә ине. Һәм бөтөн ошоларҙы күреп үҫкән мин кешеләргә кәрәкле булыуҙы әҙәм ғүмеренең асылы икән тип беләм.

**Ғаиләнең ҡаты тәртиптәре шиғриәткә нигеҙ һала алдымы һуң? Ҡайҙан морон төрттө һеҙҙә шиғри хис? Уҡыу, белем эстәү башланғыс бирҙеме, әллә башҡа сәбәптәрме?**

- Ғаиләлә беҙ дүрт бала инек, ике ҡустым, бер һеңлем булды. Бер ҡустым ҡатыны менән иртә үлделәр һәм дүрт балаһы минең елкәгә тороп ҡалды. Баш бала булғас, мин туғандарым өсөн яуаплы булып үҫтем һәм ғүмер буйы шул бурысты атҡарҙым. Айлыҡ алған эш хаҡым да һәр береһенә ниндәйҙер ярҙамға тип бүленә ине.

Мәктәп йылдарына килгәндә, һигеҙ саҡрымға йәйәүләп йөрөп уҡыныҡ. Бәләкәй генә балалар быҙ. Дәрескә һуңламау өсөн иртәнге биштә тороп сығаһың. Электр уты юҡ. Көлгә күмеп ултыртылған сәйнүктең йылы һыуын эсеп, икмәк сәйнәп кенә сығып китәһең. Киске сәғәт биштәрһеҙ ҡайтып булмай.

Бөгөнгө кимәлдән ҡарап әйтһәм, кластағы иң яҡшы уҡыусы иҫәпләнһәм дә, белемһеҙ сыҡтым мин мәктәптән. Сыуаш ауылы балалары менән уҡый башлағас, русса уҡыталар инде, бер нәмә аңламайбыҙ, бер нәмә белмәйбеҙ. Әсәйем әрләп ятлата, китапты танауға терәп аңлата, һарыҡ көтөүсеһе булғың киләме, тип янай. Беҙҙә һарыҡты апайҙар көтә ине, ҡулдарында шәл бәйләмдәре, үҙҙәре көтөүгә эйәреп йөрөй. Мин инде илай-илай ятлап барам, ыҡ-мыҡ итеп яуап бирәм. Һарыҡ көтөүсеһе булғы килмәй бит...

Класта иң бәләкәйемен, ике сәғәт йәйәүләйбеҙ, балалар аяуһыҙ халыҡ бит ул, аҙығымды тартып алғандары ла, этеп-төртөп киткәндәре лә булды.

65 йәшемдә билдәләгәндә, уҡыған мәктәбем матур осрашыуға саҡырҙы. Шунда "Мәктәп йылдарығыҙ тураһында ниндәй иҫтәлектәрегеҙ бар?" тип һорағайнылар, мин: "Мәктәп йылдары минең иң хәрт ваҡытым булды. Беренсенән, русса уҡыу шул тиклем ауыр бирелде һәм мин бәләкәс кенә башҡорт асылымды ташҡабырсаҡ эсенә йәшерергә мәжбүр булдым. Икенсенән, йәйәү йөрөү елеккә үтте. Өсөнсөнән, сыуаш ауылы балалары менән сәкәшеүҙәр, һуғышыуҙар биҙрәтеп бөткәйне", - тип ысынын әйттем, үпкәләһәләр, үпкәләгәндәрҙер инде.

Атайым ҡаты булды тигәйнем инде. Ул беҙҙе туҙҙырғанда, әсәй яҡлашманы, бер һүҙле булдылар. Бала сағым, шулайтып, ике көслө кешенең уртаһында үтте, ике тирмән ташының араһында ышҡылып, шымарып сыҡтым. Айырыуса миңә, баш балаға үтә талапсан булдылар. Уҡыуҙа ла, йорт мәшәҡәттәрендә лә, тәртип буйынса ла.

Икеһе лә уҡыны һәм гәзит-журналдар алдырҙы. Был килгән баҫмаларға минең дә күҙем төшә бит. Бер саҡ миндә лә шиғыр яҙып ҡарау теләге тыуҙы һәм йәшереп кенә бер нәмә әтмәләп, почеркы матур булған Зөлхизә тигән әхирәтемдән аҡҡа күсертеп, "Башҡортостан пионеры"на ебәрҙем. Баҫылып сыҡты был хәҙер. Уҡытыусылар ғына түгел, үҙем дә ҡаты аптырашта ҡалдым. Барыһының да телендә булып алдым бер мәл. Сит мәктәпкә сит ауылдан килеп йөрөгән бәләкәй генә буйлы, ябыҡ, ҡаш аҫтынан һөҙөп ҡараған, ҡурҡаҡ ҡыҙсыҡты аҙыраҡ күҙгә элделәр шул мәлдә.

Һигеҙенсене тамамлағас, әсәйем этеп-төртөп Салауат педагогия училищеһына уҡырға ебәрҙе. Бөтөн тиҫтерҙәрем китте профтехучилищеға, минең дә шунда барғым килә, әммә ата-әсәмә ҡаршы сығыу ҡайҙа! Имтихандар тапшырҙым. Училищеға кандидат итеп кенә алдылар, шулай ҙа ярты йылдан тулыһынса ҡабул иттеләр.

5 декабрҙә Конституция көнө була торғайны элек. Барыһына ла барыу мотлаҡ ине был сараға. Минең байрамдарға кейер айырым күлдәгем юҡ, шул мәктәп формаһына аҡ яға тегәм дә китәм кисәләргә. Бер мәл, тап шул Конституция кисәһендә, директор доклад уҡыны һәм "Баҡһаң, беҙҙең училищела шағирә ҡыҙыҡай уҡый икән, уның исеме Тамара Ғәниева", тимәһенме! Мин ҡойол да төш. Трибунаға саҡырып сығарҙы был мине һәм Сафуан Әлибаев, Хәким Ғиләжев, Муса Ғәлиҙәрҙең автографы менән балалар өсөн яҙылған шиғри йыйынтыҡ тотторҙо. Был хәл минең өсөн генә түгел, курсташтарым, тотош училище өсөн дә бер мәртәбә ине. Ә бөтөн ошо хәл-ваҡиғаны ойоштороусы әсәйем булып сыҡты. Ул "Башҡортостан пионеры"ндағы еңеүселәр исемлегендә минең барлығымды ла күргән дә, редакцияға бүләкте өйгә түгел, ә училищеға ебәреүҙе үтенеп яҙған. Шулай итеп, мин бында ла бер башҡа үҫеп киттем.

Салауат педагогия училищеһы минең өсөн иҫ киткес бер институт булды. Мәктәптә алмаған белемде алдым. Йыр, рәсем төшөрөү, бейеү, бөтөн предметтарҙы һеңдерәһенән үҙләштереү, йөҙ төрлө саралар, кисәләр, ярыштар, осрашыуҙар үткәреү һәм башҡалар. Ашарға бешерергә лә өйрәттеләр хатта, сигергә, тегергә, ямарға ла.

**Тамара апай, ә һөйөү? Әҙәм ғүмеренең кульминацияһы бит инде был тойғо кисереше, булдымы был кульминация һеҙҙең яҙмышта?**

- Ниндәйерәге булды әле! Педучилищены тамамлар алдынан мин ғашиҡ булдым. Бер мәл ятаҡҡа ошо педучилищены тамамлап киткән бер ағай килгәйне. Хәрби кейемдә, иҫ киткес сибәр, эш буйынса ғына командировкала Салауатта һәм ауылдаш ҡыҙҙарына хәл белергә һуғылған. Үтеп барған мине туҡтатып, Сажидә исемле ҡыҙҙы саҡырырға үтенде. Мин саҡырҙым да, сәй ҡайнатып йөрөһәм, Сажидә килгән дә "Ағайым һине һорай", ти. Күҙ алдына килтерәһегеҙме: күргән дә оҡшатҡан! Мин дә шулай уҡ. Был шундай ҡапыл тоҡанған, дөрләп янған һәм фажиғәле һөйөү булды ул.

Беҙ өйләнештек. Дүрт йыл йәшәп ҡалдыҡ. Ҡыҙыбыҙ тыуҙы. Аҙаҡ, бик ғибрәтле һәм ауыр сәбәптәр арҡаһында иптәшем менән айырылыш булдыҡ... Ул киткән еренән әйләнеп ҡайтманы, ситтә йәшәне. Шунда ғаиләһе булды. Хәҙер мәрхүм инде.

Был минең ғүмерлек хәсрәтем. Минең һөйөүемдең һәм шуға бәйле рәүештә ҡатын-ҡыҙ яҙмышымдың да бәхетһеҙлеге. Уның хаҡында иҫләргә яратмайым, әммә онотҡаным булманы...

**Ошо тәңгәлдә көслө ҡатындар тураһында һүҙ алып барһаҡ, әгәр... һеҙ үҙегеҙҙе көслө ҡатын тип иҫәпләйһегеҙме? Ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ ижадсыға ағымда барыу өсөн ниндәй булыу кәрәк? Ҡәләмдәштәр менән һеҙҙең мөнәсәбәт нисек булды?**

- Көслө ҡатындар булмай ул. Психикаһы яғынан бөтә ҡатындар ҙа көсһөҙ. Уларҙы бары яуаплылыҡ тойғоһо ғына көслө итеп күрһәтә. Минең замандаш ирҙәр мине "Ул үҙе шәп, уға ярҙам кәрәкмәй" тигән фекерҙә йәшәне. Һәм беҙҙең ир-егеттә тағы ла бер йәмһеҙ сифат бар, ул да булһа, көнсөллөк. Улар мине, ҡатын-ҡыҙ ижадсыны, һәләтем өсөн ситкә типте һәм төрлөсә баҫырға тырышты. Ижади көнсөллөк ул үҙендән кәм икәнендә таныуҙан килә. Үҙем, мәҫәлән, бер генә прозаиктан да, шағирҙан да көнләшмәнем һәм көнләшмәйем. Сөнки үҙемде уларға тиң һанайым. Ижад итеүселәргә һәр ваҡыт һоҡланам. Бала саҡтан алып һәм бөгөнгә көнгәсә. Мин бына һеҙҙең, йәштәрҙең ижадын да үрнәк итеп күрәм, минән көслөрәктәрһегеҙ, тип уйлайым. Һәм кемдер көнләшеп аяҡ салғанда ла һеҙҙең һәләтегеҙ ҙә, популярлығығыҙ ҙа кәмемәй икәнен беләм. Ҡулығыҙға һуҡҡанда ла, ҡәләмегеҙҙе тартып алғанда ла, өҫтәл тартмаһына һалып ҡуйыу өсөн булһа ла яҙасаҡһығыҙ икәнде лә беләм. Ә минең ҡайһы бер замандаштарым шуны аңламаны. Улар мине күпме генә баҫһалар ҙа, мин шытып сыға торҙом. Шуның өсөн талантлы кешеләргә киҫәтеп әйтеү кәрәк: бер кемгә, бер нәмәгә ҡарамағыҙ - яҙығыҙ.

Үкенескә ҡаршы, талантлы кешеләр араһында белемһеҙҙәр етерлек. Улар тәбиғи һәләттәренә алданып, үҙ өҫтөндә эшләмәй, үҫмәй. Һәм башҡорт әҙәбиәтендә бындайҙар һаны бик күп. Ошо күренеш әҙәбиәт кимәлен күрһәтә лә инде, уны тышаулап тотоп тик тора.

Беҙҙең заманда һәм электән дә ҡатын-ҡыҙ ижадсыны "Ярай, беҙҙең арала төҫ булып йөрөһөн", тип кенә ҡаранылар. Ә наградалар, исемдәр һәм башҡа күр-

***✓ Беҙҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының яҙмышы башҡа төрки һәм мосолман халыҡтарыныҡынан ныҡ айырыла. Быуаттар һуҙымында яугир булып һан алған милләтте кем тыуҙырып үҫтергән һуң?***

# АСЫЛЫ...

## кәрәк булыуҙа



һәткестәр ирҙәргә булды. Ә улай ярамай. Мәҫәлән, Зәйнәб Биишевалар, Кәтибә Кинйәбулатовалар, әгәр беҙҙең ҡәләмдәш ирегеттәр һәм ир-ат етәкселәр күтәрә һәм һанлай белһә, СССР кимәлендә билдәле булған чечен шағирәһе Рәйсә Әхмәтова, ноғай шағирәһе Ҡәҙриә Тимербулатова, әрмән шағирәһе Сильва Капутикяндар кеүек үк күренә ала ине. Тегеләре беҙҙекеләрҙән бер нәмәһе менән дә артыҡ түгел, әммә уларҙы ҡәҙерләй һәм алға сығара белделәр. Халҡының (ир-егеттәр йөҙөндәге) киң күңеллелеге арҡаһында был шағирәләр СССР шағирәләре булып балҡыны.

**Прозағыҙ бар, әммә һеҙ уға артыҡ баҫым яһамайһығыҙ, шулай бит? Шиғыр йыш тыуамы? Нимәләр яҙаһығыҙ бөгөн?**

- Шиғыр көн һайын яҙылмай. Әммә ҡайһы бер көн ул миңә килеп ябырыла. Бөтөн булмышымды һығып сығарып, нескәртеп, арманһыҙ итә. Мин хистәремдән быуылып яҙам да яҙам...

Һуңғы йылдарҙа проза ла ыҙыҡһындыра. Хатта был жанрға күңел бирмәгәнемә үкенеп тә ҡуям. Заманында Рәми Ғарипов "Иң бөйөк жанр ул поэзия" тип өйрәткәс, прозаиктарға юғарыныраҡ ҡарап йөрөлдө. Прозаны уны кем дә яҙа, һин шиғыр яҙып ҡара, тигән яңылыш фекер ҙә йәшәне күңелдә. Һәм был хатаны төҙәтеп, бер китаплыҡ проза тупланым да инде. Алла бирһә, етмеш йәшемә шул китапты сығарырға ине исәп.

Рус телендә көндәлектәр алып барғайным. Шуларҙы компьютерға йыям. Киләсәк быуындарым, ейәндәрем минең заманды һәм мин кисергәндәрҙе минең күҙлектән һәм минең һүҙҙәр менән уҡыһын тием. Мин барыһын да хаҡ һәм дөрөҫ итеп кенә яҙып барҙым. Бер ниндәй ҙә алдаҡ йәки биҙәү-шымартыу индермәнем. Кемдәрҙеңдер һөйләгәненән, ишеткәндәренән генә белмәһендәр мине, ошо яҙмаларҙан белһендәр.

**Һеҙҙә һаманға тиклем мөхәббәт лирикаһы бар. Бар ғына түгел, башлыса шунан тора поэзиягыҙ. Был күңел тулы һөйөү булыуҙанмы, әллә һөйөүҙе һағыныуҙанмы, әллә тема булараҡ ҡына ҡулланаһығыҙмы быларҙы?**

- Яратып етелмәгәнлек, яратылыр-һөйөләр ваҡыттағы яңғыҙлыҡ, ир затының йәлләүен, ҡәҙерләүен тоймай йәшәү, улар тарафынан яҡланмау һәм аялмауҙан тыуған һыҙланыу, ностальгия минең шиғырҙарымда.

Мөхәббәт лирикаһында ҡатын-ҡыҙ өсөн нимә шарт? Автор (ҡатын-ҡыҙ) шиғриәтендә ирегетте рыцарь итеп күрә һәм күрһәтә. Һин генә донъяны тотаһың, һин генә мине бәхетле итә алаһың, һин генә иң яҡшы, ти ул был рыцарға. Ә мин башҡорт әҙәбиәтендә Милли рыцарҙы, милли батырҙы тыуҙырҙым. Милләттәш ир-егет уҡый ҙа әйәген күтәреп, яурындары турайып китә. Был шиғырҙарҙың маҡсаты ла шул: ир-егеттең асылын уятыу һәм ирлеген өҫкә сығарыу. Бында мин ғашиҡ булған сағымда яҙғандарым ғына түгел. Был үҙе бер дидактика, үҙе бер педагогик фән.

Тәүге мөхәббәтемдән, йәғни иремдән һуң мин ғашиҡ булманым. Ул трагедиянан һуң оҙаҡ йылдар шок хәлендә йөрөнөм. Оҡшатып, һоҡланып йөрөгәндәрем булды, әммә улар үтә торған тойғолар ине. Донъя көтөрҙәй, пар итеп һайларҙай әҙәм табылманы. Һәм минең үҙ талаптарым да бар ине. Булыр-булмаҫ ирҙәргә хеҙмәт иткем килмәне. Сөнки мин үҙем егәрле һәм сәмләнеп йәшәй торған ҡатын. Ата-әсәм шулай булды, был миңә лә күскән. Баш төртөр мөйөшөм бар, өҫтөм бөтөн, өҫтәлем һыйлы булырға тейеш ине кем килеп инһә лә. Шулай булды ла. Тимәк, минең эргәмдәге ир минең кеүек үк булырға йәки улай булмағанда ла, минең шундай икәнемде танырға һәм һоҡланырға тейеш ине.

Шиғырҙарымдағы һөйөү иһә ысын һөйөү ул, миндәге сарыф итеп бөтөлмәгән мөхәббәт билгеһе. Әгәр ул кемдәрҙеңдер йәненә барып етә ала икән, маҡсатыма ирешкәнмен, тимәк.

**Тамара апай, 1995 йылда, һеҙҙең менән беренсе тапҡыр танышҡанда, шағирҙар араһында һеҙҙең һүҙегеҙ, тотҡан урынығыҙ, абруйығыҙ юғары икәнен аңғарҙым. Үрҙә һеҙ әйткән "Ҡатын-ҡыҙ итеп баҫтылар", тигәнгә был ҡаршы килә һымаҡ. Тимәк, һеҙ һәләтле булыуҙан тыш, ҡыйыу кеше лә, шулай бит?**

- Әҙәпһеҙлек тип ҡабул итмәгеҙ, бөгөнгө йәшемдә мин бөтә нәмәне лә үҙ исеме менән әйтә һәм һөйләй алам, шунлыҡтан, мин белемле кеше, тигәнде лә хаҡлы итеп әйтәм. Күп уҡыным, уҡыйым. Ә белемленән беҙҙә һағаялар. Ә асылда мин ҡурҡаҡ ҡына бер ҡатын. Ҡурҡаҡ һәм илаҡ. Берәүгә лә ҡаршы асыҡ конфликтҡа инә алманым, сөнки баҙнатһыҙ инем. Сәсрәтеп әйтәм тип барғанда ла, ярһып килгәндә лә, кемдеңдер йөҙөнә ҡарап бит йыртырға йөрәгем етмәне. Бары бөтөнләй тапап-иҙеп китмәһендәр өсөн ошондай "яу-ҡатын" тигән битлек артында йөрөргә мәжбүр булдым. Йәнәһе, миңә тейемәгеҙ, мин яуап бирә алам, мин уҫал, мин тәкәббер! Шул ғына...

**Ҡатын-ҡыҙ нисә йәштән үҙен олоға һанай ала? Донъя стандарттары күпкә артҡа шылды хәҙер. Ҡатын-ҡыҙҙың йәшен һорамайҙар, тиһәләр ҙә, күрәләр бит һуң...**

- Ҡатын-ҡыҙ үҙ ғүмерендә бер нисә этап кисерә. Ҡырҡҡа тиклемге йәштәрҙе мин телгә лә алып тормайым, сөнки был мәлдәр үҙе үк иң матур, иң һутлы, йәшәргә көсө лә, теләге лә булған күркәм осорҙар. Ҡырҡҡа тиклем ҡатындар нисә йәшлек булырға теләйҙәр, шулай була алалар. Хатта йәште алдап әйтергә лә була, улай ҙа бата. Ә ҡырҡтан уҙғас, холоҡто ыҙанға һалырға кәрәк. Һин һаман да "Мин барыһын да булдырам" - тип уйлайһың, ваҡыт уҙғанын аңғармайһың. Күп нәмәләр теләйһең. Һәм әле һинең мөмкинлектәрең дә бар. Әммә был мәлдә инде һинең статусың, дәрәжәң барлыҡҡа килгән һәм һин шуға торошло булырға мәжбүрһең. Һинең инде балаларың үҫеп еткән, улар һинән кәңәш һорай һәм һин уларға кәңәшсе, таяныс була алырлыҡһың.

Иллегә еткәндә мин "Моғайын, ошонда ғүмер тамам булалыр", тип, бөтөн биҙәүестәремде ҡыҙыма тапшырғайным. Ләкин бара торғас адаптация килә һәм икенсе этап башлана - өләсәй, нотоҡ уҡыусы, аҡыл биреүсе ағинәй этабы. Бында ла һин үҙеңдең кәрәклегеңде тояһың. Артабан инде һиндә йәштәрҙе яратыу тойғоһо барлыҡҡа килә. Уларҙың йәшлеген, бер ҡатлылығын, айбарлығын, сафлығын, ҡыйыулығын яратыу. Был йәштәр мин йәш саҡта белмәҫтән яһаған хаталарҙы яһамаһын, яңылышып ҡуймаһын, ыҙалар сикмәһен тип уйлап хафаланаһың, араларға, яҡлашырға ынтылып ҡаңғыраһың. Донъя стандарттары нимә генә күрһәтһә лә, беҙҙә ҡатын-ҡыҙҙың йәшен һәм олоғайыу тупһаларын уның ҡатын, әсәй, өләсәй һәм ағинәй булыу төшөнсәләре билдәләй.

**Әҙәби мәктәп булырға тейешме? Мәҫәлән, шиғыр яҙырға өйрәтеүсе уҡытыусылар кәрәкме ул?**

- Мотлаҡ кәрәк. Беҙҙе Муса Ғәли, Рәми Ғариповтар өйрәтте. Беҙ улар мәктәбендә шиғыр нисек булырға тейеш икәнлекте аңлап ҡалдыҡ. Шул мәктәпте дауам итеп, мин дә кәңәш һораусыларға өйрәтергә, аңлатырға, шиғырҙары өҫтөндә эшләргә тырышам. Әммә күптәре был кәңәште алмай. Инерция буйынса ғына шиғыр яҙыу, мәғлүмәти генә, хисһеҙ, рифма яһауға ҡоролған шиғырҙар яҙыу - ул әҙәбиәт булдырыу түгел. Шиғриәттең тәртиптәре һәм ҡанундары бар, улар мотлаҡ үтәлергә тейеш. Әҙәбиәткә ныҡ етди ҡарарға кәрәк, ул һиңә "частная лавочка"мы? Йөҙ йылдан, ике йөҙ йылдан киләсәк быуындар "Беҙҙең ата-бабалар ниндәй рухи ҡиммәттәргә һәләтле булған икән?" тип алып ҡарағанда йөҙ ҡыҙартырлыҡ булмаһын.

**Шағирҙарҙың ауыр, һынаулы, төрлө кисерештәргә бай булған яҙмыштары уларҙың ижадын да һутлы, көсөргәнешле, сағыу итә, тиһәм, килешәһегеҙме?**

- Бәхетлеләр шиғыр яҙмай, тигән әҙер яуабы ла бар һорауыңа. Шиғыр яҙыу өсөн, ғөмүмән, әҙәбиәт, ижад тыуҙырыу өсөн бер генә талап бар - һәләт. Һәләтле кеше яҙмыштың бөтөн ҡаршылыҡтарын да кисереп, үҙе аша үткәреп ебәрергә лә һәләтле була. Кисерештәре, һағыштары, хәсрәттәре ни тиклем генә тәрән булмаһын, уның булмышында ла, холҡонда ла, зиһенендә лә һаҡлана торған бер көс бар. Был ниндәй ҡараңғылыҡтан да яҡтылыҡҡа алып килә торған көс. Иммунитет тип тә әйтергә була.

Кешене талант өсөн маҡтарға кәрәкмәй. Быны һин үҙ белдегең менән яһап йәки яулап алмағанһың. Был һиңә Аллаһы Тәғәлә тарафынан һалынған ҡөҙрәт һәм миссия. Был эске ҡаршылыҡтар, яҙаланыуҙар, яҙмыш һынауҙары аша һығылып килеп сыға торған бер мөғжизә ул. Кисерештәрһеҙ ижад тыумай. Хатта шулай тыуғандары булған хәлдә лә, ул уҡыусы йөрәгенә барып етә алмай. Әйтелә бит, батшалар ғына ергә батшанан тыуа, ә шағирҙар шағир булып тыуа. Ижадсының кем икәнен, ниндәй баһаға лайыҡлығын ваҡыт билдәләй. Заманында "Егерменсе быуаттың иң беренсе шағиры кем - Вознесенскиймы, Евтушенко әллә Рождественскиймы?", тип бәхәсләшкәйнеләр. Ә ваҡыт тотто ла Высоцкийҙы пьедесталға ҡуйҙы. Шуның өсөн, бөгөнгө көндә Башҡортостандың халыҡ шағиры исемен йөрөткән шағирә булараҡ, мин был исемгә лайыҡмы-юҡмы икәнгә баһа бирә алмайым. Замандаштарым мине шулай ололап яңылышманымы икән, тигәнгә лә яуап бирә алмайым. Быларҙың барыһын да ваҡыт үҙе билдәләр һәм халыҡ хәтере үҙенә кәрәк булған, күңеленә яҡын булғандарҙы йәшәтер ҙә.

**Беҙҙә ҡатын-ҡыҙ аҡыллы булырға, аҡыллы булып күренергә, аҡыллы икәнен күрһәтергә тырыша. Һәм ҡыҙ балаға ла бәләкәстән "аҡыллы бул, аҡыллы бул" тип һеңдерәләр. Ана шул аҡыллы булырға артыҡ ынтылыу ҙа, көслө булырға тырышыу ҙа күп бәхетһеҙлектәрҙең сәбәпсеһе түгелме икән? Күп төрки халыҡтарҙа ҡатын-ҡыҙға ундай талап юҡ, минеңсә.**

- Беҙҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының яҙмышы башҡа төрки һәм мосолман халыҡтарыныҡынан ныҡ айырыла. Быуаттар һуҙымында яугир булып һан алған милләтте кем тыуҙырып үҫтергән һуң? Ирҙәре яуға, походҡа, һөргөндәргә киткәндә, бөтөн ил-ғаилә хәлен үҙ иңдәрендә күтәреп һәм һаман атҡа менеп сабыр малайҙар, егеттәр быуынын үҫтереп торған бит улар. Ана шул баш һалмай, һынмай, бөгөлмәй торған ҡатындарҙан юғалмай һәм ҡоромай торған милләт тыуған да инде.

Ҡатын-ҡыҙ хужабикә булыуға мәжбүр сүрәттә лә йәшәй. Ана шул мәжбүрилек беҙгә йәшәргә тырышыу, хатта көрәшеп йәшәү талаптарын да ҡуя. Әлеге лә баяғы йәмғиәттең социаль, мәҙәни һәм рухи асылын ҡатын-ҡыҙ тәьмин итергә тейеш була. Шуға ла аҡыллы булмау мөмкин түгел. Быуаттар дауамында ҡаршылыҡлы тарихи шарттарҙа йәшәгән халыҡтың тотҡаһы булырға тура килә. Ир-ат беҙҙә күбеһенсә һуғышҡа киткән, ҡорбан булған, һалдатҡа алынған, төрмәләргә ябылған, ил хеҙмәтенә тотонолған, эскелеккә бирелгән, ә ҡатын-ҡыҙ бер ҡайҙа ла китмәгән, уның бурысы ошо илдең, милләттең киләсәген, дауамын булдырыу булған. Һәм был ҡанун үҙгәрмәгән, үҙгәрмәйәсәк тә. Ирҙәр яҙмышы үҙенсә, ә ҡатындыҡы тап тәбиғәт ҡушҡанса ғына - тыуҙыра, үҫтерә, тәрбиәләй. Бының өсөн ул бер нәмә лә талап итмәй һәм итергә тейеш тә түгел.

Ҡатын-ҡыҙ аҡыл кимәлен йәшәү шарттарына бәйле үҫтерә һәм көс тә уға тап ана шул йәшәү рәүешенән килә. Әгәр һин һәр ваҡыт ир артында, тамаҡ туҡ, ҡайғың юҡ икән, ул аҡылдың артыҡ кәрәге лә юҡ һымаҡ. Рәхәт көндә йәшәү шул тиклем ябайға әйләнә. Әгәр бер халыҡ ҡатын-ҡыҙы быуаттар буйы үҙ тәртиптәре менән көн иткән, мәҫәлән, мосолман илдәре ҡатындары шариғәт закондары ҡурсыуында йәшәп өйрәнгән, ниндәй осраҡта нисек була, ниндәй тәртиптәрҙе боҙмаҫҡа, нимәләргә буйһонорға һәм был халәт һиңә тыныс тормош бирә, тигәнгә ышана һәм был ысынлап та шулай икән, уларға әллә нимә уйлап сығарып ултырырға кәрәкмәй ҙә. Ә беҙҙә ундай ышаныс та, ҡурсыу ҙа, бер нәмәгә гарантия ла юҡ. Беҙ аҡыл, көс һәм сабырлыҡ менән ошо көнгәсә һаҡлана алғанбыҙ. Һәм артабан да нимәләр үҙгәрер тип уйламайым. Шуға үҙем дә һеҙгә һәм йәш ҡатын-ҡыҙҙарға әйтәм: аҡыллы булығыҙ, көслө булығыҙ.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

**✓ Ата аҡҡош буласаҡ бәпкәләренең әсәһен һаҡлап, янында ғына йөҙөп йөрөй. "Эй, Раббым, кешеләр үҙ башына ла, тоҡом-нәҫеленә лә аҡҡоштарҙың да, әҙәм балаларының да ҡарғыш-рәнйешен, күҙ йәштәрен алмаһын ине".**

ҺАБАҠТАР

# ҮҘ БАШЫҢА БУЛМАҺЫН



Баймаҡ ҡалаһын уртаға ярып, таҫмалай аҡҡан Таналыҡ йылғаһында бәпкә сығарырға ултырған аҡҡошто барыбыҙ ҙа ниндәйҙер аңлатып бөтөрә алмаҫлыҡ илаһи хистәр менән күҙәтәбеҙ. Ә инде ата аҡҡоштоң эт өргән һәм башҡа хәүефле тауыштарға йыртҡыстай ташланырға әҙер тороуы күҙҙәргә йәштәр йүгертә. Ғаиләһе, балалары өсөн йәнен бирергә әҙер ҡоштар...

Аҡҡоштар элек-электән беҙҙең ерҙәрҙе төйәк итә. Ошонан бер нисә йыл элек уларҙың ҡапыл әҙәйеп, беҙҙең йылға-күлдәрҙе урап үтеүен тәбиғәт менән йәндәш булған кешеләр шунда уҡ һиҙҙе. Мөхәббәт тоғролоғона тере һәйкәл булған аҡҡоштарҙы юҡһыныу күңелдәрҙе өтөп-өтөп алғайны.

Иҫләйем, шул мәлдә телефоным яңғырап китте. Таныш бер апайҙың борсоулы тауышы яңғыраны: "Ҡала ситендәге быуаға төшкән аҡҡоштарҙы кис етеү менән бер ҡатын атып йөрөй, ти. Үҙе комуфляж форма кейеп алған, ҡулындағы ҡоралына ирҙәр ҙә аптырай икән. Шул хәлде тикшереп яҙа алмайһығыҙмы? Унан алдағы йылдарҙа ла беҙҙең аҡҡоштарҙы шул ҡатын атып өркөтөп бөткән ти бит!" Илай яҙып һөйләгән апайҙы тынысландыра ла алманым. "Ул аҡҡошто ни өсөн атырға була? Хәҙер бит аслыҡ заманы түгел! Юйылмаҫ гонаһ алалар бит. Етмәһә, ҡатын, әсә кешелер әле..."

Ул ваҡытта аҡҡоштарҙың йәнен ҡыйып йөрөүсе тураһында бер ниндәй мәғлүмәт таба алманым. Ҡайҙан килгән ул? Үҙен һунарсы тип иҫәпләп йөрөгән ҡаты бәғерле кеше ысын ҡатын-ҡыҙ затынанмы? Кемдер нимәлер ишеткән, әммә тулы мәғлүмәт табып булманы.

Был хәл күңелде өйкәп йөрөнә лә, онотола башланы. Аҡҡоштар яңынан беҙгә килә башланы. Тик улар Таналыҡ өҫтөнән иркен йөҙөп йөрөгәндә генә йөрәк семеткеләп ҡуя. Матурлыҡты күрә белмәгән, йәнле донъяны һәләк итергә яратҡан ҡара уйлы кешеләр килеп сыҡмаһын инде, тип уйланым. Шулай ҙа һәр үтеп барыусының баҫып ултырған инә аҡҡошто, уны яҡлашырға әҙер торған ата аҡҡошто ихлас йылмайып күҙәтеүен ҡарап, күңел тынысланып китә.

Уйламағанда "һунарсы" ҡатын тураһында ишеттем. Юҡ, хәҙер ул аҡҡоштарҙы атып йөрөмәй. Дөрөҫөрәге, бындай ҡара эште башҡарырға хәле юҡ. Уның яҙмышы тетрәндерҙе лә, ауыр уйҙарға ла һалды, һәр атҡан таңға шөкөр итеп, тик яҡшы уйҙар менән йәшәргә кәрәк икәне хаҡында сираттағы һабағын да бирҙе...

...Ҡыҙыҡай матур ғаиләлә, икенсе бала булып донъяға килә. Ағаһы унан ун йәшкә тиерлек өлкән була. Ата-әсәһе тағы бәпес ауазын ишетеүгә өмөтөн өҙөп бөткәндә тыуа ул. Мөғжизә итеп ҡабул ителгән сабыйҙы барыһы ла ярата, иркәләтә. Ике яҡтан да өләсәй-картатайҙарға һыйынып, яҡлаулы-ҡурсаулы бала булып үҫә ҡыҙыҡай. Атаһы карьера баҫҡысынан ҡапыл үрләп китә. Ғаилә кемделер һоҡландырып, бәғзеләрҙе көнләштереп, өс ҡатлы ҙур йортҡа күсә. Шәхси водитель, ялсылар, сит илдәрҙә генә ял итеү, бармаҡ менән төртөп күрһәткән бар нәмәнең алдына килеүе - ҡыҙҙың бала сағы шулай үтә. Ағаһы күптән инде атаһы асып биргән фирманың генераль директоры булып эшләй, өйләнеп, үҙе бәпес үҫтерә. Ғаилә ял, байрам көндәрендә бергә йыйыла, сәйәхәт итә.

Үҫмер осорона еткән ҡыҙ зауыҡлы, замокка тартым йорттарында ниҙер үҙгәргәнен тоя. Атаһы йыш ҡына ҡалалағы фатирҙарында йоҡларға ҡала, әсәһе илауҙан шешенеп бөткән була... Хәҙер ғаилә ял көндәрендә лә бергә йыйылмай. Ҡыҙға иғтибар биргән кеше лә юҡ. Тәүҙә уға был хәл бик оҡшай. Сөнки төнгө клубтарҙы үҙ итә башлаған үҫмергә иркенлек кәрәк. Хатта таңға тиклем ҡайтмаған сағында ла бер кем шылтыратмай. Шулай ҙа әсәһенең көн һайын тиерлек илауы, уның йыш ҡына шарап тотоп ултырыуы, кискә ҡарай иҫерек булыуы ҡыҙыҡайҙы борсой башлай. Ул ипләп кенә өйҙәге хеҙмәткәрҙәрҙең хәбәрен тыңлай. Сөнки уларҙың барыһын да белеүе билдәле бит инде. Ҡыҙ атаһының яңы ун һигеҙе тулған ҡыҙ менән йәшәүен белеп ҡала. Әсәһенән был хаҡта һорағас: "Буш һүҙ! Атайың эштә! Беҙ яҡшы йәшәһен өсөн ялһыҙ эшләй!" - тип ҡысҡыра башлай. Шулай ҙа ҡыҙ барыһын да - атаһының ни өсөн хәҙер уның уҡыуы тураһында һорашмауын, хатта уның менән бик һирәк һөйләшеүен дә, өйгә ҡайтмауын да аңлай. Ул ағаһына барып, барыһын да илай-илай һөйләй. Уныһы ҡыҙҙы ярты һүҙҙә туҡтата. Ағаһы барыһын да белгән булып сыға. Ул: "Атай үҙе белә. Уларҙың араһына ҡыҫылма. Атай барыбер әсәйҙе ярҙамһыҙ ҡалдырмаҫ", - тип кенә ҡуя. Ағаһы, тимәк, атаһы төҙөп биргән фирманан яҙыуҙан ҡурҡа.

Ҡыҙыҡай ҡалалағы фатирҙарына йүнәлә. Атай кеше балаһының килеүенә аптырамай. Янына килеп баҫҡан йәш кенә һылыуҡайҙы ҡосаҡлап: "Әсәйең һөйләгәндер, һин хәҙер барыһын да аңлар йәштәһең", - ти.

Ҡыҙ фатирҙан атылып сығып китә. Ул, атаһы үҙен ғәйепле тойор, барыһын да инҡар итер, тип ышанып барған була бит. Ҡыҙының атаһы менән осрашҡанын белгән әсәһе уға һуғып ебәрә: "Нимәгә барҙың унда? Быға тиклем атайың айырылышыу тураһында һүҙ ҡуҙғатмай ине! Ул йәш ҡыҙҙан ялҡҡас, миңә әйләнеп ҡайтыр ине. Һин барыһына ла ғәйепле!" - тип ҡысҡыра. Ҡыҙ аптырап ҡала. Шунан әсәһен ҡосаҡлап, тынысландырырға тырыша. Тик әсә балаһын этеп ебәрә: "Айырылышһаҡ - атайың менән йәшә! Һин миңә кәрәкмәйһең!"

Әсәһе яңылыша: атаһы балаһын янына алыу тураһында һүҙ ҙә ҡуҙғатмай. Киреһенсә, ҡәлғәләй йортонда йәш ҡатыны менән йәшәйәсәген белдерә. Хәҙер инде уларға ҡалалағы фатирға күсергә тура килә. Ҡыҙға барыһы ла ҡурҡыныс төш булып тойола. Бына ул уянып китер ҙә, элекке кеүек, бар ғаилә менән йыйылырҙар, көләшерҙәр, шаярырҙар. Тик мөғжизә булмай. Әсәһе ҡайғынан һығылып төшә. Көн-төн атаһы менән өйләнешкән көнө тураһындағы видеоны ҡарап, эсеп тик ултыра. Бәхетле ата-әсәһенең ЗАГС-тан сығып килгәндә яңғыраған "Аҡҡоштар тоғролого" тигән йырҙы ҡыҙ хәҙер бар ерҙә ишетә башлай. Уйламағанда ҡолағында яңғырап китә был йыр, унан күҙ алдына әсәһенең хәсрәтле йөҙө барлыҡҡа килә...

Ҡыҙыҡай ошондай хәлдәрҙең төп сәбәпсеһе атаһын һалдырып алған йәш ҡатында икәнен нығлап аңына һеңдерә. Бер көн тота ла улар йәшәгән йортҡа китә. Һаҡсы ҡыҙҙы таныға, йортҡа бер ҡаршылыҡһыҙ үткәрә. Ҡыҙ өйгә инеү менән йәш ҡатынға ташлана. Көскә айырып алалар. Ошонан һуң атаһы уның менән һөйләшмәҫ, аралашмаҫ була, уны йортҡа индермәҫкә ҡуша.

Ун ете йәшендә ҡыҙ таңға ғына өйөнә ҡайта һәм ... әсәһен үле килеш таба. Һәр саҡтағыса, туй видеоһын ҡараған, эскән һәм йөрәге туҡтаған. Ҡыҙ әсәһенең үлеүен еңел ҡабул итә. Сөнки атаһы уларҙы ташлағандан һуң, әсәһе тере мәйеткә әйләнә, ҡыҙында ла, улында ла, ейәнендә лә эше булмай. Ошо фатирға бикләнеп, бәхетле мәлдәренең видеоһын ҡарап, көн үткәрә. Ҡыҙ хатта үҙен ҡулға ала алмай, ниндәйҙер мәхлүккә, ҡараҫҡыға әйләнгән әсәһен күрә алмай башлай.

...Һылыулығы менән айырылып торған ҡыҙ иртә кейәүгә сыға. Был атаһынан аҡса һорамау өсөн эшләнә. Сөнки ире бик бай була. Бер ҡайҙа ла эшләмәгән ҡыҙ үҙе өсөн генә йәшәй. Иң яратҡан шөғөлө - атырға өйрәнеү була. Ҡорал яратҡан ире йәш ҡатынын да ошо ғәҙәткә йәлеп итә. Бынан тыш, ҡыҙ атаһының тормошон күҙәтеүен дауам итә. Ҡатыны артынан аңдып, уның йәш ир менән йөрөүен белеп, фотоға төшөрттөрөп, атаһына ебәрттерә. Уларҙың ғаиләһе боҙолғанын ишетеп тә күңеле тынысланмай, үс алыу тойғоһо менән яна.

Өләсәһенең вафаты тураһында хәбәр алғас, ҡатын ауылға килә. Ерләү мәшәҡәттәренән һуң ҡалаға китергә сыға. Юлда туҡтап, быуа өҫтөндә йөҙөп йөрөгән аҡҡоштарҙы күреп ҡала. Ҡапыл әсәһенең илауҙан шешенгән йөҙө күҙ алдына килә, аҡҡоштар тураһында тыңлаған йыры ишетелгәндәй була. Һәм йөрәгендә аҡҡоштарға ҡарата нәфрәт, уларҙан үс алыу тойғоһо уяна.Ҡыҙ әллә нисәмә саҡрым алыҫлыҡтағы ҙур ҡаланан килеп, ошо аҡҡоштарҙы ата башлай. Кешеләргә тотолмаҫ өсөн кистәрен, ҡараңғы төшөп барған мәлдә эш итә ул.

Атаһы ла, әсәһе лә йәнһеҙ булып йылғаға һуҙылып төшкән ҡоштар янында кескәй бәпкәләр сипылдығы сыға. Яҡлауһыҙ ҡалған кескәйҙәргә шунда уҡ йылға өҫтөндәге көслөрәк йәнлектәр ташлана. Сабый ҡоштарҙың өнһөҙ илауы, ярҙам һорап ялбарыуы күккә барып олғаша...

Йәш ҡатынға йәндәре күккә атылған аҡҡоштарҙың күҙ йәштәре төшмәй ҡалмаған икән. Утыҙға ла етмәүенә ҡарамаҫтан, был ҡатында онкология сире тапҡандар. Иренең хәтһеҙ аҡса түгеп, Израиль табиптарына алып барыуы ла ярҙам итмәгән. Хәҙер ул һәр атҡан таңдың уның өсөн һуңғы булыуы ихтимал икәнен аңлап, һыҙланып түшәктә ята...

Таналыҡ ярында аҡҡоштар ғаиләһен сираттағы мәртәбә сәләмләргә туҡтаным. Ата аҡҡош буласаҡ бәпкәләренең әсәһен һаҡлап, янында ғына йөҙөп йөрөй. "Эй, Раббым, кешеләр үҙ башына ла, тоҡом-нәҫеленә лә аҡҡоштарҙың да, әҙәм балаларының да ҡарғыш-рәнйешен, күҙ йәштәрен алмаһын ине", - тигән тауыш ишетелгәндәй булды.

Башын бер яҡҡа ҡырын һалып, миңә текләгән ата аҡҡоштоң ауазы ине ул...

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

# СОРАМАН МӘҘӘКТӘРЕ

Зиннур Шоғайып улы минең йәмәғәтем. Сәсән телле, йор һүҙле ир уҙаманы. Ҡайһы саҡтарҙа олатаһына оҡшатыбыраҡ ебәрә. Ҡунаҡҡа килгән ағай менән оҙон-оҙаҡ урам буйлап йөрөп, таң атыуға ғына ҡайтты был. Йоҡо аралаш тәҙрә төбөнән "Ғәлиәбаныу" көйөн ишетеп, өнөммө, төшөммө, тип ятам.

...Һөйөүҙәрең ысын булһа,
Ишегеңде аса һал, - тип йырлап, минән ишек астырмаҡсы икән.

* * *

Бынығы ла Зиннурҙың мәҙәктәренән: - Илгиҙәр, яңы гәзиттәрҙе килтер әле?

- Почта килмәгән, атай.
- Иҫкеләрен килтер ҙә ҡуй. Баштүбән әйләндереп уҡырмын, ул саҡта яңы гәзит һымаҡ була...

* * *

Зиннурҙың тамағы быуылып, тауышһыҙ йөрөгән сағы. Әлдән-әле дауахана юлын тапай. Шулай бер мәл ҡаршыһына күптәнге танышы осрай. Ул Фәнит Шаһиев. Һәйтәк ауылына ит алырға килгәндәргә, беҙҙә фил ите генә һатыла, тип алдап, баҙарҙы шаулатҡан мәрәкәсел кеше. Билдәле, ике тел бисҭәһе араһында үҙ-ара "бәйге" китә.

- Хәлдәр нисек?
- Боҙоҡ телевизор һымаҡмын. Үҙем күренәм, ә тауыш юҡ.
- Бәй, лампочкаларыңды алыштыр.
- Бына, күрәһеңме дарыу шешәләре, файҙаһы юҡ.
- Әтеү антеннаңды ҡара. Уныһы урынында торамы?
- Тора, тора.
- Әтеү аҫтараҡ инде, юғарыға күтәреңкерә.
- Һуң уныһына кабель етеңкерәмәй бит әле...

* * *

Йорт бурау тураһында һүҙ сыҡҡас, Зиннур эргәһендәгеләрҙе аптыратҡан.

- Һеҙҙә һаман кешеләр бураймы ни? Ә беҙҙең яҡта компьютер бурай.
- Нисек инде?

Асыҡлыҡ керетеп ҡуя аҙаҡ:

- "Компьютер" ҡушаматлы ағай...

* * *

Мин сессияла саҡта был һис тә һыр бирергә теләмәй ти: - Һыйырҙарға автодойка ҡуйҙым әле... Быҙауҙарҙы ҡуштым...

* * *

Дүрт бала Наурыҙҙан ялға ҡайтып баралар. Бер малайҙа ғына саңғы. Ҡапыл буран сыға. Балалар сумкаларын баштарына кейергә мәжбүр.

Саңғы кейгән бала хәлде тиҙ төшөнөп ала. Алға шыуып бара бирә лә, туҡтап, иптәштәрен көтөп ала. Мәжит Ғафуриҙың шиғырын яттан һөйләп, дуҫтарын алға әйҙәй.

- Бер аҙым алға баҫам да
Әйләнәм мин артыма.
Ҡайҙа баҫҡандар икән, тип,
Күҙ һаламын халҡыма!
- Бирешмәгеҙ, малайҙар! Йәһәтерәк!

Шулай итеп, саҡ өйҙәренә ҡайтып йығылалар.

* * *

Зәйнәкәй ауылына барып етеүе ҡыйыныраҡ ул. Кеме йәйәү, кеме ниндәй транспорт таба әле. Берәүҙе ире комбайнға ултыртып алып бара хатта. Аҙаҡ бынан көләләр икән.

- Еңел-елпегә комбайн һәләк арыу ҙа ул.

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.**
**Учалы районы.**

✓ *Сараның тиҙ арала күптәрҙең күңеленә хуш килеүенә бигерәк тә яр буйының төҙөк булыуы ыңғай йоғонто яһай, унда һәр кем үҙенсә ял итә: берәү самокатта йөрөй, кемдер йүгерә, бейей, һүрәт төшөрә.*



ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ...

**Гүзәл баш ҡалабыҙҙа йәмле Ағиҙел ярын төҙөкләндереү эштәре осланып барыуын сәбәп итеп, ҡала йәштәре шунда ял итергә йыйыла башланы. Улар араһында башҡорт йәштәренең ял минуттарын "Самауырлы ритайым" сараһы ярҙамында ойоштороусылар ҙа бар. Йәмәғәтселек тарафынан ихлас ҡабул ителгән ошо сара, ҡала йәштәренең буш ваҡыттарында күңел асыу төрҙәре тураһында уны ойоштороусы Рөстәм Абдразаҡов һәм Шәһитулла Хамматов менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

# ТӘМЛЕКӘСЕНДЕ ТОТ ТА...

## "Самауырлы ритайым"ға кил!





**➔ "Самауырлы ритайым" һәр аҙна Өфө йәштәрен Салауат Юлаев һәйкәле тапҡырына Ағиҙел йылғаһының яр буйына йыя. Йәштәрҙең ялын ошо рәүешле ойоштороу идеяһы ҡайҙан барлыҡҡа килде?**

**Р. Абдразаҡов:** "Йәштәрҙең ялын ойоштороу" тиһәң, мәжбүрләү һымаҡ яңғырай. Беҙ ундай маҡсаттан сығып башламаныҡ, ә йәйге осорҙа, бигерәк тә быйыл рәсми саралар, бергә йыйылышыуҙар һирәк булғанда бер аҙ үҙебеҙҙең күңелде күтәреп алырға булғайныҡ. Былтыр Төркиәлә сәйәхәт иткәндә шундағы йәштәрҙең тышта, ҡала урамында, парктарҙа, йорт ихаталарындағы эскәмйәләрҙә ыҡсым ғына самауырҙар ҡуйып, сәй эсеп ял итеүҙәрен күргәйнем. Өфөлә, Мәскәүҙә, йә булмаһа Париждамы бейек-бейек йорттар араһында урамда самауыр менән сәй эсеп ултырыуҙы күҙ алдына ла килтереп булмай, ә Төркиәнең был ҡалаһында бик тәбиғи тойолдо. Шуға ла башта дуҫ-иштәр менән Ағиҙел буйына йыйылып, самауыр сәйе эсеп аралашып алыу теләге тыуҙы. Ике тапҡыр шулай яҡын таныштар менән осрашып ҡайттыҡ. Беҙгә Шәһит тә ҡушылғайны матур, ихлас бер йыйынға әүерелеп китте сарабыҙ.

**Ш. Хамматов:** "Самауырлы ритайым"дың төп ойоштороусылары Рөстәм менән Роберт Дәүләтшин. Улар был сара ярҙамында Өфө йәштәренең тормошона ниндәйҙер яңы һулыш индереп ебәрҙе. Унда бер кемде лә махсус рәүештә "Әйҙә, килегеҙ, ял итәбеҙ" тип өндәп саҡырмайҙар. Сөнки йәштәр осрашҡан, аралашҡан мәлдә самауыр ҡайнатып сәй эсеү Өфө ҡалаһы өсөн 249-сы маршрут автобусы кеүек ғәҙәти күренешкә әүерелергә тейеш. Ҡурай, гармун, баян һәм башҡа уйын ҡоралдарыбыҙ бар беҙҙең, моңло тауышлы йырсылар, өҙә баҫҡан бейеүселәребеҙ бар һәм улар ошо осрашыуҙарҙы йәмләп, дәррәү ҡушылды.

Сараның тиҙ арала күптәрҙең күңеленә хуш килеүенә бигерәк тә яр буйының төҙөк булыуы ыңғай йоғонто яһай, унда һәр кем үҙенсә ял итә: берәү велосипедта, самокатта йөрөй, кемдер йүгерә, латиноамерика бейеүен, көнсығыш бейеүҙәрен өйрәнә, һүрәт төшөрә. "Самауырлы ритайым"ға башҡа милләт кешеләре лә ҡыҙыҡһынып килеп ҡушыла, башҡорт йәштәренең шулай ихлас, ябай, алсаҡ булыуын күреп, ыңғай тәьҫорат алып, ҡалай шәп икәнһегеҙ, тип китәләр. Иң ҡыуаныслыһы, матур йәш ғаиләләр балалары менән килә.

**Р. Абдразаҡов:** Башҡорт сәй эсергә ярата, күмәк йыйылғанда күңел асып йырлап-бейеп алыу ҙа беҙгә хас. Шул уҡ ваҡытта бына ошо осрашыуҙарҙы аҙнаһына бер тапҡыр үткәрә башлағас, "Ә беҙ унда нимә эшләйбеҙ? Унда барһаң, сәй бушлаймы? Ни өсөн йыйылабыҙ?" тигәнгә оҡшаш һорауҙар яуҙырырға тотондолар. "Самауырлы ритайым"дың төп үҙенсәлеге - ябайлыҡта, бер ниндәй ҙә махсус әҙерләнгән программа юҡ, барыһы ла бушлай, ҡайһы берәүҙәр үҙҙәре сәйгә күстәнәс тотоп килә. Әммә был башланғыс тик беҙҙеке генә булып ҡалыуын теләмәйбеҙ, ошо рәүешле ял минуттарын уҙғарыу баш ҡала йәштәре араһында уртаҡ күренешкә әүерелергә тейеш. Кем теләй, күңеленә ятҡан урында самауыр алып сыҡһын да, таныштары, дуҫтары менән йыйылып һөйләшеп ултырһын.

"Самауырлы ритайым" һуңғы йылдарҙа өфөләр араһында бик популярға әүерелгән ғәҙәткә - машина капотына ҡуйып кальян тартыуға ҡаршы альтернатив ял итеү ысулы. Үҙем ғүмерҙә лә кальян тартҡаным юҡ, әммә кешеләр был рәүешле ағыу һулағылары килгән өсөн түгел, ә бергә йыйылып, аралашыуға һыуһаған, һөйләшеп тороуға бер сәбәп булһын тип ойошалар ҙыр, тип фараз итәм. Беҙҙең күп йәштәр байрамдарҙы айыҡ үткәреү яҡлы, шулай ҙа башҡаларға ла ошондай ҡыҫҡа осрашыуҙарҙы, ауыр эш көнөнән һуңғы ял минуттарын да спиртлы эсемлекһеҙ, тәмәкеһеҙ, кальянһыҙ үткәреп булыуын күрһәтке килә.

**➔ "Самауырлы ритайым" ысынлап та матур бер яңылыҡ булараҡ ҡабул ителде. Тағы ла ниндәйерәк пландағы саралар кәрәк бөгөн баш ҡаланың башҡорт йәштәренә?**

**Р. Абдразаҡов:** Башҡорт йәштәре талантлы булыуын барыбыҙ ҙа беләү, ләкин уларға артабан үҫешергә мөмкинлектәр тыуҙырыу йәһәтен уйларға кәрәк беҙгә. Шуға ла кәсепсе, эшҡыуар, үҙ һөнәренең оҫтаһы булған шәхестәр ҡатнашлығында оҫталыҡ дәрестәре, даими эшләгән мәктәптәр булдырыу мөһим. Һуңғы йылдарҙа "Аҫылташ" проектын алып барған йәштәр актив эшләп килә, әммә улар күберәк теорияны өйрәтә. Был да кәрәк, әлбиттә, шулай ҙа практик белемдең дә өҫтөнлөгөн оноторға ярамай. Бына, мәҫәлән, бер ағас оҫтаһы тотһон да тағараҡ эшләргә өйрәтһен. Кемдер ҡыҙыҡһынып шуны эшләп ҡараһа, һөнәрен арттырыр. Ә берәү, бәлки, шул ябай ғына тағараҡтан дәртләнеп, ҙур оҫтахана асып, ағас эшенә тотоноп китер. Беҙгә әллә ҡайҙан ситтән килгән коуч-тренерҙар, бизнесмендарҙың ҙур бизнес, миллионлы килем алыу тураһындағы хәбәрен тыңлау урынына көндәлектә ошо ерлектә тормошҡа ашырырлыҡ эштәр менән булыу отошлораҡ. Әйтәйек, ҡыҙҙарға сигеү эшен өйрәтеү ҙә шулай уҡ яҙыҡ түгел, хәҙер ҡул эштәре бик юғары баһалана һәм оҫта ҡуллылар үҙенең бәләкәй генә бер эшен асып ебәрә ала. Шунда уҡ уларға күҙ нурын түгеп сиккән әйберен һатып, бер аҙ аҡса эшләргә өйрәтһәк, эшҡыуарлыҡҡа һәләте лә асылып китеүе бар. Юғиһә, совет осоронан киләмелер был, ни өсөндөр көс түгеп башҡарған эшеңдән килем алырға тырышыуҙы негатив яҡтан баһаларға күнеккәнбеҙ һәм бына шул ҡалыптан арынырға ине.

**Ш. Хамматов:** Бөгөн халыҡ йәнле аралашыуға ҡоролған сараларға бик һыуһаған. Ә баш ҡалала уҙғарылған белем биреү, мәҙәни, һөнәри саралар араһында башҡорт мөхитен сағылдырғандары һирәк һәм бер ҡалыпҡа һалынғандар. Айырыуса тиҫтә йылдар дауамында ойоштороло килгән йәштәр өсөн мәҙәни сараларҙа шундай тенденция күҙәтелә: унда барһам, мин кемдәр сығыш яһауын, икенсе бүлектә тамашасыларҙың яртыһы таралышыуын, үҙем сәғәт нисәлә өйгә ҡайтып етеүемде беләм. Беҙгә офлайн форматтағы ла, телевизион форматта ла танышыуға, тыныс ултырып фекер алышыуға, аралашыуға ҡоролған саралар кәрәк. Шуға әле "Самауырлы ритайым"ға килгәндәрҙән үҙҙәре менән таныштырыуҙарын һорайбыҙ: кем ул, ҡайҙа эшләй? Бәлки, был кеше эшҡыуарҙыр, йә республика буйлап сәйәхәттәргә йөрөйҙөр, йә риэлторҙыр. Ул үҙе тураһында ҡыҫҡа ғына танышыу-сәләмен әйтһә, арала торған берәүгә тап ошо ваҡытта шундай файҙалы танышлыҡ, йә булмаһа фекерҙәш, кәңәш алыу талап ителеп, һөйләшеп тә китерҙәр. Кәрәк кеше бер-береһен табыр. Әлеге ваҡытта Өфөлә башҡорт йәштәренең ниндәйҙер бер даирәһе билдәләнгән, бөтәбеҙ ҙә бер-беребеҙҙе күптән беләбеҙ һәм ул даирәгә яңы кешеләр һирәк килә. Ҡайҙа, ниндәй сараға барһаң да бер үк кешеләр осрай. Ә бына яңыраҡ бер туй үткәрҙем, дүрт матур башҡорт ғаиләһе менән тынышып ҡайттым, бөтәһе лә бизнесмендар, шул тиклем өлгөлө йәштәр. Беҙгә күберәк ана шундай беҙ белмәгән кешеләрҙе ылыҡтырыу, баш ҡалала башҡорт даирәһен киңәйтеү, аралашыуға ҡоролған саралар кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Самауырлы ритайым" тиҙ арала баш ҡала йәштәренең иғтибарын йәлеп итеүе бөгөн уларға ниндәй форматтағы саралар кәрәклеген сағылдырҙы. Уларға Өфөнөң төҙөк, тыныс һәм ял итеү өсөн тәғәйенләнгән урындарында буш ваҡыттарын айыҡ, яңы танышлыҡтар табып уҙғарыу өҫтөнлөклө. Быны үҙебеҙҙең йола, ғәҙәттәргә нигеҙләнеп атҡарыу отошло булыуы ла һыналды бында.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**







✓ *Доғаларын уҡып-уҡып, ашъяулыҡҡа бөтә төр ризыҡтарҙы теҙеп ултырта ла, уртаһына баланы һала. Ашъяулығы, ризыҡтары менән баланы һыуға сумырып ала. Баланы ала, ә ашъяулыҡ ризығы менән һыуға ағып китә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# САЛАТ АША...

## ябығырһың

■ Салат, ҡуҙғалаҡ һәм башҡа төрлө йәшел тәмләткестәр ябығырға ярҙам итә, ти Италия ғалимдары. Рационды бындай йәшелсәләр менән тулыландырыу организмды кәрәкле күҙәнәклек менән байыта, аппетитты көйләргә ярҙам итә. Сөнки уларҙың составындағы фолий кислотаһы һәм К витамины инсулин бүленеп сығыуҙы яйға һала. Күҙәнәклек иһә эсәктәр өсөн "щетка", токсиндарҙы сығара, аш һеңдереүҙе тиҙләтә.

■ Гарвард университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡайнар какао ҡулланыу ҡарттарҙың баш мейеһе торошон һәм хәтерен яҡшырта. Ғалимдар быны какао составындағы флавоноидтар менән бәйләй. Һынауҙарҙа уртаса 73 йәшлек кешеләр ҡатнашҡан. Ай дауамында улар көнөнә ике тапҡыр какао эскән. Асыҡланыуынса, бынан һуң уларҙың баш мейеһендә ҡан әйләнеше яҡшырған, хәтерҙәре нығынған. Какао тромбтар һәм насар холестерин, ҡан тамырҙары системаһы ялҡынһыныуын булдырмай.

■ Ә бына ҡәһүә эсеүселәрҙә бауыр циррозы булмай, ти Сингапур ғалимдары. Әлеге мәлдә бауыр циррозы донъялағы бөтөн үлемдәрҙең 1,3 процентының сәбәбе булып тора. АҠШ-та ул 11-се урында тора. Тикшеренеүҙәр 15 йыл дауам иткән, унда 63 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан. Ғалимдар ҡәһүә, алкоголь, ҡара һәм йәшел сәйҙәр, емеш һуттарының цирроз булдырыуға йоғонтоһон өйрәнгән. Иң ҙур хәүеф алкоголдән булып сыҡҡан. Ә көнөнә 2 сынаяҡ ҡәһүә эсеүселәр араһында был процент иң түбәне булған. Әммә гепатит һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән циррозға ҡәһүә бер нисек тә йоғонто яһамай икән.

■ Клиник психолог Рамани Дурвасула әйтеүенсә, ҡәһүәнең ниндәй төрөнә өҫтөнлөк биреүенә ҡарап, кешенең холҡон билдәләргә була. Мәҫәлән, классик ҡәһүә яратыусылар үтә дөрөҫ йәшәүсе, талапсан булып ҡыланыусылар рәтенән. Улар ҡиҫкен, түҙемһеҙ була, үҙгәрештәрҙе яратмай. Латтеға өҫтөнлөк биргәндәр ярҙамсыл иҫәпләнә. Ниндәй һорау менән мөрәжәғәт итһәң дә, уларҙан гел ярҙам көтә алаһығыҙ. Әммә был кешеләрҙең юҡҡа көйөп барыу кеүек сифаты ла бар. Артыҡ талапсандар капучино ярата. Улар хис-тойғоға бай, бар нәмәне контролдә тоторға тырыша, үҙҙәренең сәләмәтлеген дә яҡшы һаҡлай. Ирей торған ҡәһүә еңел холоҡ, мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе аҙаҡҡа ҡалдырырға ятыусы кеше тураһында һөйләй. Ә һалҡын татлы ҡәһүәне социаль яҡтан ҡыйыуҙар эсә. Улар, ғәҙәттә, күп нәмәне уйламайынса хәл итә.

■ Һауаның бысраныуы кеше сәләмәтлеге өсөн хәүефлегә әйләнә бара. Бигерәк тә 2,5 микрондан ҙур булмаған аэрозоль өлөшсәләр ҡурҡыныс, ти ғалимдар. Был өлөшсәләрҙе һауаға башлыса ҡаҙылма яғыулыҡтар ҡулланып эшләүсе сәнәғәт, энергетика, транспорт бүлеп сығара. Кешенең бер бөртөк сәсенең ҡалынлығынан 30 тапҡырға бәләкәйерәк булған был өлөшсәләр үлем осраҡтарының күбәйеүенә килтерә. Лондондың Гигиена мәктәбе докторы Кэтрин Тонн билдәләүенсә, бөтөн Европала яңы эшкәртеү ҡоролмалары ҡулланыу һөҙөмтәһендә һауаны бысратыусы матдәләрҙең кимәле күтәрелә. Шуға ла һуңғы йылдарҙа Көнсығыш Европа халҡы араһында инфаркт һәм инсульттан үлеүселәрҙең һаны 20 процентҡа артҡан. Белгестәр фекеренсә, экологик яҡтан таҙа төбәктәрҙә йәшәүселәр йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә дусар булмай.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ЯҠШЫНЫҢ АТЫ ҠАЛЫР



*Уртала Мәүлиха Мифтахова инәй.*

**Ҡарттар ҡара аҡылға бай, йәштәр яңы аҡылға бай, тигән боронғолар. Борон-борондан ололар үҙҙәренең ҡара аҡылын, донъяуи белемен, тәжрибәһен быуындан-быуынға, йәштәргә тапшыра килгән. Элек ололар халыҡ медицинаһын һәйбәт белгән, ҡиҫкен мәлдәрҙә бер-береһенә ярҙам итергә ашыҡҡан.**

## Кендек әбейҙәре

Элек ауылдарҙа бигерәк тә кендек әбейҙәренең ярҙамына мохтажлыҡ ҙур булған бит. Улар йөклө йәш килендәрҙе үҙҙәренең ҡарауы аҫтына алып, кәңәштәрен биреп торған, бала тыуғас та әжәл ҡырҡ көн, ҡырҡ төн әсәһен дә, балаһын да аңдып тора, тип, өҙлөгөүҙән һаҡланыу юлдарын өйрәткән. Ул замандарҙа бер баланың да зәғиф булып тыуғанын, ДЦП менән ауырығанын хәтерләмәйем.

Һыу ағыр ҙа таш ҡалыр, яҡшынан иҫкә алып, һағынып һөйләрлек исем ҡалыр, тигән ата-бабаларыбыҙ. Яңы Байрамғол ауылында, мәҫәлән, 1935-1939 йылғы балаларҙың тәрән донъяуи белемле, изгелекле, ҡулдары имле кендек инәйе Мифтахова Бәҙеғол инәйҙе, Ғилмисафа инәйҙе (халыҡ уны "Һымыс әбей" ти ҙә ҡуя ине) ауылдаштары һаман да һағынып иҫкә ала. Ғилмисафа инәй ҡот ҡойған, йөрәк һылаған, муллалар булмағанлыҡтан, уны балаларға исем ҡушырға ла саҡырғандар. Шаһизатова Факиһа инәй ҙә алсаҡ, киң күңелле кеше булып хәтерҙә ҡалған. Ауылдаштары уға йөрәк һылатырға йөрөр ине. Шаян, йор һүҙле, күңелсәк Шаһизатова Мәнфүзә инәйҙең дә ҡуш яулығын ябынып, биҙрә, батмус сиртеп, ҡумыҙ уйнап ултырғаны хәтерҙә, ул да күп кенә балаларҙың кендек инәйе булды, ноҡот һалды.

## Өшкөрөү, эс һәм йөрәк һылау...

Нәбиуллина Роза апай шулай уҡ күп балаларҙың кендек инәйе булды. Эстәре түбәнләгән ҡатындар эс һылатырға, мейе ҡаҡтырырға, кернә тарттырырға, йөрәк һылап, урынына ултырттырырға йыш ҡына уға килер ине. Уның һөйләгәндәренән: "Инәйем Иҙелбаева Менәүәрә беҙ, балалар, әҙ генә сөскөрһәк тә, тиҙ генә мунса яғып ебәрер ҙә шарылдатып сабындырыр ине. Ҡатыҡ, көл һыуы менән йыуындырҙы. Өйҙә һәр саҡ тондоролған көл һыуы ултыра торғайны. Ул да мейе ҡағыр, йөрәк ултыртып һылар ине. Ҡатындар бәпәйләгәндә, һуңғылығы төшмәһә, инәйемде килеп алып китер булдылар. Әзәйем (был яҡта өләсәйҙе "әзәй" тиҙәр) Мәхмүтова Мөхтәримә Сорағолда йәшәне. Ул быума ауырыуылыларҙы дауалай торғайны. Доғаларын уҡып-уҡып, ашъяулыҡҡа бөтә төр ризыҡтарҙы теҙеп ултырта ла, уртаһына баланы һала. Ашъяулығы, ризыҡтары менән баланы һыуға сумырып ала. Баланы ала, ә ашъяулыҡ ризығы менән һыуға ағып китә. Бер ағайҙың алты балаһы ла быума ауырыулы булды. Әзәйем алтыһын да шәбәйтте, әле дүртеһе тере".

Яңы Байрамғол ауылы ҡыҙы Закирова Миңзирә лә өләсәһе тураһында үҙенең яҡты хәтирәләре менән уртаҡлашҡайны: "Йылдар үткән һайын бик йыраҡта ҡалған бала сағым, тормоштоң әсе-сөсөһөн елегенә үткәнсе татыған, күпте күргән, күпте белгән Мәүлиха, Ғәйникамал әзәйҙәрем һағындырып иҫкә төшә лә торалар. Мифтахова Мәүлиха әзәйем бик изге күңелле, уҡымышлы кеше ине. Күҙ алдымда: бәләкәй генә өйҙә әзәйем, атайым, инәйем, береһенән-береһе бәләкәй генә биш бала йәшәп ятабыҙ. Элек шампунь тигән нәмәләр булманы бит инде, һабын да әле ул тиклем мул эләкмәне. Бер ваҡыт баштарыбыҙҙы ҡутыр йәки шире тигән нәмә баҫты. Әзәйем уҡынып, дарыу эшләп алды ла беҙҙең баштарға һөрттө. Бер-ике көндән ул эшләгән дарыу ҡутырҙы бөтөнләй һыпырып алды. Әзәйем тондоролған көл һыуы менән баштарыбыҙҙы таҙартып йыуҙы ла бал ҡортоноң балауыҙынан эшләнгән дарыуын һөрттө. Ике аҙна үткәс, беҙ был ҡутырҙарҙан бөтөнләйгә таҙарындыҡ.

Дүртенсе синыфта уҡый инем, ноябрь каникулында бәйләргә өйрәнергә уйланым. Шунда бәйләм менән булышып ултыра торғас, ялығып китеп, тимер карауат башына менеп һикерҙем, күҙ асып йомғансы энәләр минең тубыҡ аҫтына ҡаҙалды ла торҙо. Әзәйем ҡаушап ҡалманы, доғаларын уҡып, энәләрҙе һурып алып, аяғымдың яранан өҫкө яғын ат ҡылы менән бәйләп ҡуйҙы. Атайым эштән килгәс, тиҙ генә Уральск дауаханаһына алып барҙы һәм врачҡа хәлде аңлатып бирҙе. Аяғым шешкәндән шешә бара. Врач нимә тип әйткәндер инде, мин уны ишетерлек, аңларлыҡ хәлдә түгел инем, атайымдың кәйефе төшкәнлеген күреп, хәлемдең шәптән түгеллеген тойҙом. Беҙ ҡайтып кереү менән әзәйем: "Үҙем беләм", - тине лә атайыма тиҙ генә ат тиҙәге йыйып алып килергә ҡушты. Әзәйем ат тиҙәгенә үләндәр ҡушып, йылытып, аяғыма һалды. Шеш таралып китмәһен өсөн аяғымды ат ҡылы менән өс урындан бәйләп ҡуйҙы. Көн һайын шул процедура ҡабатланып торҙо. Ат тиҙәген алыштырған һайын ҡылдарҙы ниндәйҙер доғалар уҡып алмаштырып бәйләне. Ҡырҡ көндән һуң минең аяҡтағы шеш һытылды. Ни йәнем менән түҙгәнмендер инде - әзәйем мәк сәскәһенең орлоғон ашатты ла, атайыма эскәмйәгә ҡуйып, аяғымды бөгөргә ҡушты, яранан һүл аҡты ғына. Әзәйем үлән һыуы менән ярамды йыуып торҙо. Күпмелер шулай маташа торғас, аяғым үҙ хәленә керә башланы, әзәйем яйлап ҡына атлап йөрөргә ҡушты. Көн дә бал ҡортоноң балауыҙынан эшләгән шыйыҡсаһын аяғыма һөрттө. Был аяҡ менән мартҡа тиклем шулай ыҙаланым. Бер көндө атайым мине тағы ла Уральск дауаханаһына алып барҙы. Врач иғтибар менән аяғымды ҡараны ла: "Әзәйең әүлиә булған икән", - тине. Ҡаны ағыуланған, тип, аяғымды ҡырҡырға булғандарын аҙаҡ ҡына белдем. Тиктормаҫ бала сағым хәтирәһе булып, тубығым аҫтында тәрән соҡор тороп ҡалды. Һау булыуыма, зәғифләнмәй ҡалыуыма әзәйемә мең-мең рәхмәтлемен.

Күпмелер ваҡыт үткәс, мин тағы ла ауырып киттем. Был юлы күҙемде трахома баҫты. Әзәйем атайыма: "Был ауырыу ныҡ йоғошло, ҡыҙыңды Учалыға алып бар. Унда врач Баһауетдинов эшләй, ул дауалар", - тине. Шулай итеп, мине Учалыға больницаға алып барып һалдылар. Әзәйемдең был ауырыуҙың йоғошло икәнен белеп, дауаханаға һалырға ҡушыуы ла һоҡланырлыҡ бит. Мин дауаханаға киткәс, өйҙө көл һыуы менән йыуып, ағартып ҡуйған. Хәҙерге тел менән әйткәндә, дезинфекция эшләгән. Әзәйем эңер төшкәс, шайтандар йөрөй, тип, беҙҙе урамда йөрөтмәҫкә тырыша торғайны. Йоҡлар алдынан ауыҙҙарыбыҙҙы сайҡатырға, аяҡ-ҡулдарыбыҙҙы йыуырға ҡуша ине..." - тип һүҙен тамамланы Миңзирә Аллабирҙе ҡыҙы.

## Тағы бер ғәжәп хәл

Халыҡ табиптары, имсе инәйҙәр тураһында яҙғас, 2000 йылда үҙебеҙ шаһит булған бер хәл-ваҡиға тураһында ла һөйләп китмәй булдыра алмайым. Һеңлем, Бөрйәндә йәшәгән ҡустыбыҙҙың ҡыҙы, ауыр хәлдә булып, Бело-

✓ ***Беҙ, әҙәм балалары, урмандарҙы, йәнлектәрҙе аяуһыҙ ҡырыу, ғәзиз еребеҙҙең байлыҡтарын йыртҡыстарса талау ғына түгел, хатта тауҙарҙы ла кимерә башланыҡ. Ҡыҙғаныс...***



ретка дауаханаға алып килеүҙәре тураһында хәбәр итеп шылтыратты. Ҡыҙҙың хәле бик ауыр, боролоп та ята алмай. Ул тәүге тапҡыр үҙенең туйы барған ваҡытта йығылған икән. "Беренсе тапҡыр йығылғаным нисек тә үтеп китте. Бер аҙҙан тағы ла йығылдым. Бер мыйыҡлы ир килә лә муйынымды һыға. Бөрйән дауаханаһында ике көн реанимацияла яттым. Белоретка нисек килтергәндәрен белмәйем, - тине лә, әсәһенә үпкә һүҙҙәрен әйтеп ташланы. - Күпме әйттем мин һеҙгә, абыстайлыҡҡа уҡыйым, тип. Рөхсәт итмәнегеҙ бит, шулай уҡыу буламы, тинегеҙ. Абыстайға уҡыһам, былайтып ауырып ятмаҫ инем, эсем ҙурая ла ҙурая, ярау итеүе - бер бәлә... Атайым менән кейәүегеҙ әле Белорет урамында йөрөп яталар. Улар килгәс, мин тағы ла нығ итеп ауырып алам. Ир врачты саҡырып килтерегеҙ, ул минә укол эшләр. Ул уколдарҙың минә бер генә файҙаһы ла теймәй. Һеҙ минә мулла саҡырып килтерегеҙ", - тимәһенме. Беҙ аптырандыҡ, Белоретта бер кемде лә белмәйбеҙ, ул муллаһын ҡайҙан табырға икән һуң, тип тәрән уйға ҡалдыҡ.

Ҡустым менән кейәү палатаға килеп кереү менән ҡыҙыбыҙ нығ итеп ауырыны ла китте. Быуылып, ҡарағусҡыл сирень төҫөнә керҙе. Ҡустым яһалма тын алдырып ҡараны. Ҡыҙыбыҙ алдан әйткәнсә, ир врач килде, укол эшләне. Ирем менән коридорға сығып, ауыр, аянысլы хәлдә туғандарыбыҙға ярҙам итергә хәлебеҙҙән килмәгәнгә йөрәгебеҙ әрнеп, өмөтһеҙлеккә бирелеп, шаҡҡатып стенаға һөйәлдек. Шул саҡ ҡаршы палатанан оҙон буйлы, тулы ғына кәүҙәле бер ҡатын килеп сыҡты.

- Мин Чечнянан килдем, - тине. Бәлки, исем-шәрифен дә әйткәндер, мин иштерлек хәлдә түгел инем. - Бындай ауырыуҙарҙы больница дауалай алмай, ваҡытығыҙҙы әрәм итәһегеҙ. Белоретта баба Шура йәшәй, уға барһағыҙ, яҡшыраҡ булыр, - тине.

Баба Шура христиан диненән, беҙ мосолмандар бит, улай ярармы, әллә ҡыҙыбыҙҙың һораған муллаһы ошо урыҫ әбейеме икән, тип аптыраштыҡ. Баланың хәле бик ауыр, бәлки, был уның һуңғы үтенеселер, тип, баба Шураны эҙләп киттек. Ишекте бәләкәй генә кеҙәле, ап-аҡ сәсле әбей асты. Көс-хәлгә ни өсөн килгәнебеҙҙе аңлатып бирҙем.

- Дауаханаға килә алмаһағыҙ, бәлки, фотографияға ҡарап булһа ла дауалап ҡарарһығыҙ, - тинем (ҡайны бер кешеләрҙең фотографияға ҡарап та дауалайҙар, имеш, тигән һүҙҙәрҙе ишеткәнем бар ине).

- Кем һеҙгә мине фотографияға ҡарап кеше дауалай, тип әйтте, - тип әбейем мине әрләп ташланы. - Баланы бында килтерегеҙ, - тине.

- Баланың хәле бик ауыр шул, уны бында бер нисек тә килтереп булмай, бәлки, беҙҙең туғаныбыҙ булып, дауаханаға барып, ҡыҙыбыҙҙы ҡарарһығыҙ, - тип үтендем. Ул ризалашты, транспорт табырға ҡушты. Шура әбейҙе дауаханаға алып барҙыҡ.

Ике көн үткәс, ҡыҙҙың дауахананан сығыуы тураһында ишеттек. Аҙаҡ ҡыҙым үҙе һөйләне: "Палатаға килеп кергән саҡта Шура инәй йығылып китә яҙған, атайым менән ирем саҡ тотоп алып ҡалған, - тип башланы ул һүҙен. - Мин, тиргә батып, йәнгә талашып, нығ итеп ауырып ятҡанмын. Күҙем алдында ҡулындағы тәреһе туктамай әйләнеп торғаны ғына хәтерҙә. "Ауырыуы нығ көслә, мин, йылға аша килеп, уны дауалай алмайым. Бына бит тәре әйләнеп тик тора. Ҡыҙығыҙҙы өйөмә алып килһәгеҙ, яҡшыраҡ булыр", - тип ҡайтып киткән. Атайым менән ирем, такси яллап, мине Шура инәйгә алып килделәр, носилка менән өйгә индерҙеләр. Тәүге өс көндә инәй ишек төбөнән ары үткәрмәне. Иң алда минә сукынырға ҡушты, үҙе лә уҡынып, сукынып алды. Атайым менән әсәйемдең ризаһыҙлыҡтан йөҙҙәре сирылып киткәйне: "Ничего страшного, Бог один", - тине. Балауыҙҙы иретте лә һыуыҡ һыуға һалып, доғаларын уҡып, баш осомда өйөрөлтә башланы. Балауыҙҙа аҡһаҡ әбейҙең, бала имеҙеп ултырған ҡатындың, йәш ҡыҙҙың һындары хасил булды. "Һине өс көндән үлерлек итеп сихырлағандар. Ауылығыҙҙа яңыраҡ ҡына кем үлде, шул кешенең мәйет һыуын эсергәндәр бит", - тине. Өс көн шулай доғаларын уҡып, баш осомда балауыҙ ҡойоп дауаланы. Дүртенсе көндә яңы ғына һалған тауыҡ йомортҡаһын алып килергә ҡушты. Йомортҡаны ытып, банкаға һалды ла өҫтөнә һыу ҡойҙо: "Әгәр йомортҡа аҫҡа төшһә, тиҙ йүнәлерһең, юғары күтәрелһә, оҙаҡ шәбәйә алмаҫһың", - тине. Доғаларын уҡып, йомортҡаны баш осомда әйөрөлтөп йөрөтә башланы. Йомортҡа тамырланып, ҡарағусҡыл төҫкә инеп өҫкә ҡалҡты, унда ла балауыҙҙағы һымаҡ һындар барлыҡҡа килде. Шура инәй өс көн баш осомда йомортҡаны әйләнтеп йөрөтөп өшкөрҙө. "Мин нығ арыным, әҙерәк ял итеп алырға кәрәк", - тигәс, ирем менән бер аҙнаға Учалы районындағы туғандарыбыҙға барып йәшәп килдек.

Шура инәй иремә иртәнге сәғәт 4-тә йылғанан бизрәне кирегә ҡаратып һыу алып килергә ҡушты. Шул һыуҙы өшкөрөп, мине көн һайын сайындырҙы. Иң һуңынан Шура инәй тағы ла йомортҡаны баш осомдан әйләнтеп өшкөрҙө. Был юлы йомортҡа аҫҡа төштө, төҫө лә үҙгәрмәне.

- Һине сихырлаған кешеләрҙең үҙҙәренең дә тормоштары алға бармаҫ. Бер йылдан һинә илап килерҙәр, бер үк йәлләй күрмә, әтеү сихырҙары үҙенә кире ҡайтыр. Ҡулыңды йәшер ҙә күкиш күрһәт тә ултыр. Йәнә сихырлап ҡарарҙар, килерһең, - тине. Минә был аҡсалар өсөн теге донъяла яуап тотаһы бар, тип, дауалағаны өсөн хәйер итеп биргән аҡсаны алманы. Май, балыҡ, бал биреп ҡарағайныҡ, ҡулымдың көсөн ҡайтармаҫлыҡ ҡына тип, әҙ генә алды. Беҙ ҡайта торған көндө инәйебеҙ матур итеп өҫтәл әҙерләгәйне, гармунда уйнап, таҡмаҡ әйтте. Һыу өшкөрөп бирҙе лә:

- Ҡайтҡас, ошо һыу менән башыңдан аша ҡойонорһоң да кеше аяғы баҫмаған ергә, берәй ҡайын төбөнә түгерһең. Ҡайнынга "Прости меня, пожалуйста, Матушка-Береза. Береги мое здоровье", тип әйтерһең, - тине.

Ҡайтҡас, ул әйткәнсә эшләнем. Һыуҙы бер ҡайын төбөнә түктем. Күп тә үтмәне, күҙгә күренеп япраҡтары кибеп ҡойолоп, ҡайын ҡыуарҙы. Хәҙер ул ағас юҡ инде. Ҡайын ағасының бөтөн ауырыуҙы үҙенә алып, тиҙ арала ҡороуы ла хайран итә.

Эйе, Шура инәйҙең әйткәне раҫ булды, мине рәнйеткән кешеләр килеп илап ултырҙылар. Тормоштары ла алға барманы. Ишегем алдына тутыһып бөткән бысаҡ ырғытып киткәндәр. Иремдең бысағы икән, тип, һандыҡҡа һалып ҡуйған булдым. Тәүге балам, улым, үлде. Шура инәйҙе башҡа күрергә яҙманы. Беҙ уға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ, йәне ожмахтың түрендә генә булһын инде. Аллаһҡа шөкөр, дүрт балаға ата-әсә булдыҡ", - тип һүҙен тамамланы ҡыҙым.

- Шунан, ҡыҙым, абыстайлыҡҡа уҡыр инеңме? - тип һораным.

- Һис шикһеҙ, уҡырмын, инәй, - тине.

Күңелдән киңлеге, изгелеклеге милләтеңдән, диндең ниндәй булыуына ла ҡарамай шул. Ошо иҫ киткес матур, яҡты донъяла шөкөр итеп, ҡыуанып ҡына йәшәп ятыу урынына үсле, көнсөл, тар күңелле әҙәм балалары бер-беренең харап итергә төрлө юлдар эҙләүе лә аптырата.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Яманлыҡ ҡылған кешене үҙе ҡылған яманлыҡ сорнап аласаҡ. Ундай кеше йәһәннәмлектер, улар мәңгегә утта ҡалыр", - тип әйтелә "Баҡара" (Һыйыр") сүрәһенең 81-се аятында. Хоҙай Тәғәлә тарафынан тәбиғәттә бер генә нәмә лә тиккә генә яратылмаған. "Ул һеҙҙең өсөн күктән ямғыр яуҙырҙы. Әсер өсөн һыу бирҙе, хайуандарығыҙ утлап йөрөһөн өсөн үләндәр үҫтерҙе. Һеҙҙең өсөн игендәр, зәйтүндәр, хөрмә ағастары, йөҙөмдәр һәм еләк-емештәрҙең һәр берең үҫтерҙе. Быларҙа башында фекере булған кеше өсөн, әлбиттә, Аллаһтың барлығына, Унын сикһеҙ ҡөҙрәтенә дәлил бар" (Нәхел ("Бал ҡорто") сүрәһе 10-11-се аяттар). Беҙ, әҙәм балалары, урмандарҙы, йәнлектәрҙе аяуһыҙ ҡырыу, ғәзиз еребеҙҙең байлыҡтарын йыртҡыстарса талау ғына түгел, хатта тауҙарҙы ла кимерә башланыҡ. Ҡыҙғаныс, был яуызлыҡтарҙың аһы килер быуындарға хәтәр булып төшөр инде бер заман.**

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы Ҡәйепҡол ауылы.**

*ШУЛАЙ ИКӘН ДӘ!*

# ҠАРТЛЫҠ...

## аяҡтан башлана

Организмдың ҡартайыуы аяҡтан башлана, дөрөҫөрәге - табандан. Был боронғо Ҡытай табиптары заманынан уҡ билдәле. Аяҡ табанында бөтә ағзаларҙың эшен көйләгән әүҙем нөктәләр урынлашҡан. Әгәр ҙә улар тейешенсә эшләмәһә, организм эшмәкәрлегендә кире сағыла, һөҙөмтәлә һәр ағза ҡартайыуға дусар була. Аяғыбыҙҙың сәләмәтлеген, дөрөҫөрәге үҙебеҙҙе ҡартайыуҙан нисек һаҡларға һуң? Ҡытай врачтарының кәңәшенә ҡолаҡ һалайыҡ әле.

- Аяҡ осонда, шулай уҡ үксәлә, эске һәм тышҡы "ҡабырға"ларында йөрөгөҙ. Бындай гимнастика аяҡ мускулын, һөйәген нығыта, ҡан әйләнешен, тимәк, эске ағзаларҙың эшен яҡшырта.

- Көн һайын табанығыҙға, бармаҡ аҫтындағы йомшаҡ урынға резина йәки ағас сүкеш менән еңелсә һуғығыҙ. Ул булмаһа, уҡлау йәки шешә лә ярай. Тәнгә ҡан йүгергәнсе "тукмағыҙ". Бындай массаж аяҡтың ғына түгел, бөтә организмдың ҡан әйләнешенә ыңғай йоғонто яһай. Күреү һәләте кәмегәндәр икенсе һәм өсөнсө бармаҡ башланған урынға өҫтәмә рәүештә тағы 5-әр минут һуҡһын. Унда күҙгә бәйле әүҙем нөктә урынлашҡан.

- Бармаҡтан һуң табан уртаһындағы юн-цюань тип аталған нөктәгә егермешәр тапҡыр баҫығыҙ. Тәүҙә бер аяҡҡа, һуңынан икенсеһенә алмашлап эшләгеҙ. Иртәле-кисле яһаһағыҙ, бигерәк яҡшы.

Ошондай күнекмә лә һәйбәт һөҙөмтә бирә. Тасҡа 38 градус эҫелектәге һыу ҡойоғоҙ ҙа, ҡыҙарғансы аяғығыҙҙы тығып ултырығыҙ. Аҙаҡ юн-цюань нөктәһенә 80-шәр тапҡыр баҫығыҙ һәм 3-5 минут ҡулығыҙ менән ышҡығыҙ. Контраст душ та файҙалы.

- Күберәк йәйәү йөрөгөҙ. Урман һуҡмағынан, үләндән яланаяҡ йөрөү айырыуса яҡшы.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

### 35-се идея
### Тормошоң фатихаға әүерелер

Минең яратҡан емештәремдең береһе - гранат. Элек беҙ уны "индеецтар алмаһы" тип атай торғайныҡ. Бала саҡта мин бакалея кибетенә барып, гранат һатып алырға ярата торғайным.

Был емеш бик ҡыҙыҡлы бер үҙенсәлеккә эйә. Бөртөктәре иҫ киткес һутлы һәм шәрбәтле булһа ла, улар тәме әсе булған йоҡа, йомшаҡ ҡына һары төҫтәге яры менән ҙур булмаған ояларға бүленгән. Әгәр гранаттың үҙен тешләргә маташһаң, ҡәнәғәтлек урынына әселегенән уртыңды ҡамаштырырһың. Әгәр инде гранатты бөртөкләп ашаһаң, тәмлелегенән телеңде йоторһоң.

Тормошта ла тап шулай. Һин ғүмереңде бер һелтәнеүҙә генә йәшәп бөтә алмайһың - көн артынан көндәр үткәреп кенә йәшәйһең.

Берәй ағзаңды ҡырҡһаң, ҡырҡылған урын бер секундта ғына уңалмай. Һауығыу ҡырҡылған мәлдән алып башлана һәм минут һайын, көндән-көн дауам итә.

Белемде лә бер юлы алмайһың - бер көн уҡыу икенсеһе менән алмашына.

Ҡәҙерле кешеңде юғалтыу ҡайғыһынан һин бер көндә генә арына алмайһың. Юғалтыуҙы еңеү - ул оҙайлы процесс, әгәр көндән-көн яңыса йәшәргә өйрәнһәң генә, юғалтыуыңды еңеп, яңыса йәшәй башлаясаҡһың.

Йәғни һин бөтә тормошоңдо бер һелтәнеүҙә генә йәшәп бөтөрә алмайһың. Көн артынан көн уҙғарып йәшәйһең, ә был һинә тормош ҡороуҙа түҙемлек һәм тырышлыҡ талап итә.

Әйтәйек, әгәр ҡулың һынған булһа, бөгөн уға бер аҙ күнекмәләр яһарға тырыш. Әгәр сирләп торһаң, бөгөн үҙеңде яҡшыраҡ тойорға тырыш. Үҙ-үҙеңә, был көндө мин тағы ла күпмелер алға ынтылыш яһаным һәм аҡрынлап, көндән-көн үҙ маҡсатымды тормошҡа ашырыуға яҡынлашам, тип әйтергә тырыш.

Бөгөн ниндәйҙер ҙур проблемаға осраның икән, уны шунда уҡ хәл итергә маташма. Бөгөн уны өлөшләтә генә хәл итергә тырыш, шулай итеп һин тотош проблеманы хәл итеүгә яҡынлашырһың. Әгәр бер юлы бөтә проблемаларыңды күҙ уңыңдан үткәрһәң, һинә йәшәүе бик ауыр булып күренер. Әйтәйек, һинең тәрбиәңдә балаларың, ҡарауға мохтаж өлкән йәштәге туғандарың һәм яуаплылыҡ йөкмәткән башҡа бик күп проблемаларың торһа, тормош нәк тамуҡ һымаҡ тойолор. Ләкин һин бөтә проблемаларҙы бер юлы бөтөрөргә тейеш түгелһең. Бөгөнгө проблеманы ғына хәл ит. Мин һинә ярҙамға бер ябай фекер ҡалдыра алам: "Миль буйынса йәшәһәң, тормошоң - ҡазаға, ә дюймлап йәшәһәң, фатихаға әүерелеүе мөмкин".

Һинә бөтә булған проблемаларыңды бер юлы хәл итергә ярамай, ә бөгөнгө көндәге проблемаңды ғына хәл итергә кәрәк. Һәм һинән әлеге мәлдәге сиргә түҙеү генә талап ителә.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ТЕҘ СҮКМӘЙСӘ, СЕБЕР КИТҺӘМ КИТӘМ, БИРӘСӘГЕМ ТҮГЕЛ УРАЛЫМДЫ!




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**33-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тырыз. Рафиҡов. Наряд. Хоҙай. Кәрим. Ырғаҡ. Аҡсабыр. Сыуал. Солтан. Креол. Ҡар. Бабич. Ҡыр. Аҡыл. Урман. Диван. Иген. Транса. Оскар. Спутник. Манн. Ал.

**Вертикаль буйынса:** Анаконда. Хөсәйенов. Баул. Ан. Рота. Тылсым. Йырсы. Туфан. Ҡолға. Нептун. Реактор. Хис. Ганди. Завод. Көл. Көс. Бруно. Ыҙма. Ауди. Мал. Чинар.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йылдар.*

| Август (Зөлхизә - Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 (5) дүшәмбе | 4:40 | 6:10 | 13:30 | 18:55 | 20:25 | 21:55 |
| 25 (6) шишәмбе | 4:42 | 6:12 | 13:30 | 18:52 | 20:22 | 21:52 |
| 26 (7) шаршамбы | 4:44 | 6:14 | 13:30 | 18:50 | 20:20 | 21:50 |
| 27 (8) кесе йома | 4:46 | 6:16 | 13:30 | 18:48 | 20:18 | 21:48 |
| 28 (9) йома | 4:48 | 6:18 | 13:30 | 18:45 | 20:15 | 21:45 |
| 29 (10) шәмбе | 4:49 | 6:19 | 13:30 | 18:43 | 20:13 | 21:43 |
| 30 (11) йәкшәмбе | 4:51 | 6:21 | 13:30 | 18:40 | 20:10 | 21:40 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ЕТЕМ МӨЛКӘТЕНӘ ҠУЛ ҺУҘЫУ

Бәйғәмбәребеҙҙең ете һәләкәтле гонаһтары араһында етем балаларҙың мөлкәтенә ҡул һуҙыу ҙа бар. "Хәйлә һәм һылтау менән етем хаҡын ашаған кешеләр ҡарындарына утлы киҫәү тыҡҡан кеүек буласаҡтар, быныһы хаҡ, һуңынан улар ялҡынлы утҡа барып инәсәк" (ән-Ниса,10).

"Балиғлыҡҡа ирешкәнгә саҡлы етемдең малына ҡағылма, яҡшы ниәт менән генә ҡағыл (ул малды етем кәрәгенә тотҡанда ғына, үҙеңә алһаң, ҡайтарып биреү шарты менән йәки ул малды арттырыр булһаң ғына). Ғәҙел итеп үлсәгеҙ, ғәҙел бүлегеҙ. Беҙ һәр кемгә йөктө үҙе күтәрә алған ҡәҙәре генә тейәйбеҙ. Яҡындарығыҙ тураһында ла ғәҙеллек менән шаһитлыҡ итегеҙ. Аллаһҡа биргән һүҙегеҙҙә тороғоҙ" ("Әнғәм", 152).

Опекундарға етемдәрҙең мөлкәтен үҙҙәренә рөхсәт ителгән тиклем ҡулланырға рөхсәт ителә, бынан артып киткәне - харам һәм ул мәнфәғәткә килтермәйәсәк. Был рөхсәт ителгән өлөш насар уйҙарҙан азат, Ислам ғөрөф-ғәҙәттәренә һәм үлсәмдәренә тап килгән булырға тейеш.

АФАРИН!

# ЕЙӘНСУРА ҺАНДУҒАСЫ



**Сибай ҡалаһында башҡорт йырын башҡарыусыларҙың XV "Ирәндек моңдары" төбәк-ара конкурсы тамамланды. Еңеүсе бәхете Ейәнсура һандуғасы - Әлфиә Мырҙабаеваға йылмайҙы һәм ул бәйгенең төп бүләге - "Лада гранта" автомобиленә лайыҡ булды. Еңеүсегә елле бүләкте Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тапшырҙы.**

34 йәшлек йырсы сығышы менән Ейәнсура районының Ярғайыш ауылынан. Әлфиә Рәил ҡыҙы конкурс тарихында һәүәҫкәр башҡарыусылар араһынан Гран-при яулаған тәүге конкурсант. "Ирәндек моңдары"нда ул 2010 йылдан ҡатнаша. "Бәйгелә халҡыбыҙҙың иң зарлы, киң диапазонлы йырҙарының береһе "Буранбай"ҙы башҡарҙым. Уны мин Абдулла Солтанов яҙмаларын тыңлап өйрәндем. Көсөмә ышандым, еңеүгә ынтылышым көслө булды. Музыкаль белемем бөтөнләй юҡ. Хужабикә булараҡ, ир, балалар бағып, өйҙә ултырам. Водитель таныҡлығым бар, тыуған яғыма машинаны үҙем йөрөтөп ҡайтасаҡмын", - тине Әлфиә Мырҙабаева конкурсты ойоштороусыларға ҙур рәхмәттәр белдереп.

Сибай ҡалаһының 65 йыллығы, "Урал аръяғы" инвестиция форумы сиктәрендә ойошторолған XV башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың төбәк-ара "Ирәндек моңдары" конкурсының үҙәк майҙанда үткән йомғаҡлау сараһын республиканың мәҙәниәт министры Ә.И. Шафиҡова асты. Мәртәбәле конкурста быйыл республикабыҙҙың төрлө ҡала һәм райондарынан, Мәскәү өлкәһенән, Ханты-Манси автономиялы округынан, Татарстандан, Силәбе өлкәһенән 183 кеше ҡатнашты. Шуларҙың 56-һы балалар булыуы халыҡ йырын башҡарыусыларҙың яңы быуыны үҫеп килеүен күрһәтте. Балаларҙың 11-е Гала-концертта ҡатнашты.

Бәйгелә Айзель Әҙелбаева, Рәмил Ҡотосов, Арсен Кәримов - III, Розалия Аҫылғужина, Юнир Һағынбаев, Ғаяз Ғәйетбаев - II, Гөлдәр Аллабирҙина, Фәттәх Аралбаев, Алмас Сирусин I урын яуланы. Балалар араһында Гран-приға Сибай ҡалаһынан Мира Харрасова лайыҡ булды. Мираға 16 йәш, ул сәнғәт мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе. Моңло тауышлы ҡыҙ быйыл ҡалала үткән "Урал аръяғы тауышы" шоу-проектында ла уңышлы сығыш яһаны. Халыҡ йырҙарын еренә еткереп, күңелен биреп башҡарыусы Мира 30 мең һум аҡсалата премия, электрон самокат менән бүләкләнде.

Әйткәндәй, быйылғы "Ирәндек моңдары" конкурсы башҡа йылдарҙағынан айырыла. Бәйгенең I туры Сибай ҡалаһының "Мир" йәштәр йортонда онлайн форматта ойошторолдо.

Жюри составы яңырҙы: бәйгеселәрҙе Башҡортостандың халыҡ артисы Азамат Тимеров, Иҙел Аралбаев, Сөмбөл Моратова, Раян Алтыншин, Рөстәм Шаһбалов, Эльвира Әхмәтйәнова баһаланы. Йырсыларҙың һәләттәрен баһалаусы 5 артист та төрлө йылдарҙағы "Ирәндек моңдары" бәйгеһе еңеүселәре. Улар ярышты төптән белгәнгә лә ғәҙел хөкөм сығарҙы.

- Халыҡ йырын автомобиль алам тип түгел, ә уны еренә еткереп өйрәнәм, оҫта башҡарам тип йырларға кәрәк, - тигән фекер белдерҙе жюри рәйесе, Башҡортостандың халыҡ артисы Азамат Тимеров. - Элек иң яҡшы йырлаған кешегә бер ат биргәндәр. Ул ваҡытта ат иң затлы бүләк һаналған. Бөгөн оҫта йырсыға бер машина бирәләр. Ул техника әллә нисәмә ат көсөнә эйә. Ә сифат барыбер аҡһай. Быйыл профессиональ йырсыларға ҡарағанда һәүәҫкәрҙәр көслөрәк булды. Уларҙың тауышы ла көслө, моңо ла, башҡарыу техникаһы ла шәп ине. Улар һирәк башҡарылған йырҙар йырлауҙары менән дә оттолар.

Тағы шундай яңылыҡ бар: жюри халыҡ йырҙарын башҡарыусыны моңло тип тапһа, йәшел төймәгә баҫты. Йырҙы еренә еткереп йырламаусыларҙы ҡыҙыл төҫ туҡтатты.

Шуны билдәләп китеү зарур: конкурстың беренсе туры ла, икенсеһе лә республиканың "Сәләм" , СТВ, Ютуб каналдары аша тура эфирға сыҡты. Конкурс барышын республиканан ситтә йәшәүселәр ҙә ҡарай алды.

**Гөлдәр ҠАДАЕВА.**

*✓ Йылы тойғоларыңды оҙаҡ йәшерһәң, улар һыуыныуы ла мөмкин.*
*(Ж. Итье).*



*ӘҘИП ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ*

# ҒӘМҺЕҘЛЕК ӨСӨН ТЫУМАНЫМ...

**Еңел генә, етеҙ генә**
**Тормош ҡуйған һорауҙарҙы**
**Ситкә этеү, үтеп китеү**
**Минең өсөн хас булманы -**
**Ғәмһеҙлек өсөн тыуманым,**
**- тип яҙғайны республикала танылған шағирә Эльмира Сәсәнбаева.**



Эльмира Йыһанбай ҡыҙы шағирҙарға бай яҡ - Ишембай районы Маҡар ауылында уҡытыусылар ғаиләһендә тыуған. Ул тарих, антропология, биология, химия, физика һ.б. фәндәр буйынса бихисап китаптар уҡып, үҙләштереп үҫә. Уның шәхес булараҡ формалашыуына атаәсәһе, ятаҡан уҡытыусылары, мәктәбе, тыуған ауылы ифрат күпте бирә. Мәктәпте тамамлағас, геология разведкаһында эшләп алыуы ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтары, минералдар тураһында белемен тәрәнәйтеүгә булышлыҡ итә. Күп йылдар Стәрлетамаҡтағы "Сода" производство берекмәһендә эшләй.

Ижадҡа ул 29 йәшендә генә килә. Уның "Рәхмәт һүҙе" тип исемләнгән тәүге китабы 1983 йылда донъя күрә. 1990 йылда "Илгиҙәр"е менән китап уҡыусыларҙы һөйөндөрә. 1997 йылда "Моң Тәңре" тип аталған шиғри йыйынтығы баҫыла. Ошо китабы менән уны шиғри мәҙәнилекте үҫтереүселәрҙең береһе тип атап була. Эльмира Сәсәнбаеваның жанрҙар, формалар өлкәһендә тынғыһыҙ эҙләнеүҙәрен ҡыйыу һәм уңышлы эксперимент тип таныйҙар. Был китабында автор экологик, әхлаҡи, социаль проблемаларҙы күтәреп сыға. Унан бер-бер артлы "Ваҡыт әйләнеше", "Ҡобайыр ҡатламдары" китаптары донъя күрә, "Шиғырҙар" йыйынтығында ғүмер һәм тәбиғәт, күңел һәм рухиәт хаҡындағы әҫәрҙәре туплана. Замандың көнүҙәк проблемаларын күтәргән тәрән фәлсәфәүи лирикаһы уҡыусыны уйландырып ҡына ҡалмай, унан шәхес яһай.

Эйе, шағирә башҡаларҙан шиғриәтенең үҙенсәлеклелеге менән айырылып тора. Уның шиғырҙарындағы һәр һүҙҙе, рифманы мәғәнәһен аңлап, аҡыл бизмәненә һалып уҡыу кәрәк. Шағирә донъя, йыһан, ғүмер, көнкүреш кеүек традицион проблемаларҙы ғына яҡтыртып ҡалмай, ә ҡайһы саҡта һүҙҙең тарихын, тарихи сығанаҡтарын өйрәнә, төрлө ғилми хеҙмәттәргә нигеҙләнеп, этимологик эҙләнеүҙәр алып бара. Шул эҙләнеүҙәрен иһә шиғыр ҡалыбына һалып, уҡыусы күңеленә алып барып еткерергә, күңеленә "бикләргә" булышлыҡ итә.

2014 йылда баҫылған "Ҡобайыр ҡатламдары" исемле фәнни-популяр китабында автор Боронғо Азия, Көньяҡ Америка илдәре тарихын, мифологияһын тикшереп, башҡорт халҡы тарихы менән уртаҡлыҡтар барлығын күҙәтә, сағыштырыуҙар үткәрә. Был йәһәттән китапҡа баш һүҙ яҙыусы, филология фәндәре докторы, профессор Рәшит Шәкүрҙең һүҙҙәре иғтибарға лайыҡ: "Тарихыбыҙ таң ҡалырлыҡ бай һәм үҙенсәлекле. Шуныһы ҡыуаныслы, был тарихтың яңынан-яңы серҙәре асыла бара. Ошо эҙләнеү-тикшеренеү эшенә, профессиональ тарихсылар менән бергә, яҙыусылар ҙа үҙ өлөшөн индерә... Был йәһәттән Э. Сәсәнбаеваның мәғлүмәтлелеге күҙгә күренеп тора. Бында ул үҙен ғәйәт киң ҡоласлы, тәрән белемле тикшеренеүсе итеп күрһәтә..."

Эльмира Сәсәнбаеваны ысын Илһөйәр тиһәк тә хаталанмабыҙ. Сөнки башҡорт теленә ҡәҙер-хөрмәт яулаған дәүерҙә, ҡалабыҙҙа башҡорт театры, башҡорт мәктәбе, балалар баҡсаһы асҡан йылдарҙа уның үткер һүҙе лә ярайһы ярҙам итте һәм ул "Сәсәниә" тигән ҡушаматын нығытты, сөнки кешелек ғүмеренә, ер-ил яҙмышына шағирә бер ҡасан да битараф булманы.

Бөгөн дә ул беҙҙең А. Инан исемендәге китапхананың яҡын дуҫы һәм партнеры. Беҙҙә үткән төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнаша, беҙгә өр-яңы китаптар ҙа бүләк итә. Тағы ла шағирәнең 62-се башҡорт балалар баҡсаһына 10-ар дана "Аҡбуҙат" журналын яҙҙырыуын да телгә алһаҡ, Сәсәниәнең ҡалабыҙ мәҙәниәте, китап уҡыусылары өсөн ысынлап тырышҡанын танырға тейешбеҙ. Беҙ китап уҡыусылар исеменән Сәсәниәне 70 йәшлек юбилейы менән ҡотлап, ижад ҡомары, ныҡлы сәләмәтлек, шатлыҡлы оҙон ғүмер теләйбеҙ!

**Нәзифә ИҪӘНҒУЖИНА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

*Эльмира СӘСӘНБАЕВА.*

## Иң тәбиғи драма

Иҫке өмөттәрен ҡоя күңел,
Тәбиғәтте аңлап һүҙһеҙ генә.
Йөрәгемде Көҙ ҙә аңлай еңел,
Алтын телгә күнеп, түҙем генә.

Өмөтһөҙлөк юк был диалогта,
Кеселекле аҡыл тыныс бөгөн -
Аса минә бер хәҡиҡәт, дуҫтар,
Туттар теймәй торған яҡты йөҙөн:

Иң тәбиғи драма - һиндер ул, Көҙ!
Һыҡтамайһың юҡҡа, эҙләп йәбер.
Усағына атлап, баҫыуың төҙ -
Гүйә, үҙ-үҙеңә биргән әмер.

Үҙгәрештәр, һеҙгә - хөрмәт-ҡәҙер!
Яңы өмөттәргә урын әҙер.

## Йәш ел

Алһыу баҡыр, ҡуҡһел ырыҡта...
Еҙем аға, иҫләп барыһын.
Яңы мәктәп һөйрәй ҡырыҡҡа,
Уналғанда йөрәк яраһы.

Таңғы Ҡояш, ахры, баҡырҙан,
Алтынланыр, төшкә йылынып.
Төнөн еҙ Ай тағы саҡыра,
Тын әйләнә йондоҙ болоно.

Ел һис туймай көҙгө сәфәрҙән
Япраҡ вальстарын өйрәп.
Бүртеп ята китап-дәфтәрҙәр,
Яңы асыштарға төйәлеп.

Көндәр оса тығыҙ хәстәрҙә,
Йәш ел оя ҡора састәрҙә.

## Көҙ еле

Һаташтырған романстай
Тәңкәле ел шаукымы,
Әйтерһең, һөйөүҙән һулҡый
Ғашиҡтарҙың алҡымы.

Бер һүҙ ҡылыу өсөн күпме
Көс сарыф - хәл бөткәнсе,
Тәңкә өйөмөндә аунап,
Аҡ олондо үпкәнсе...

Болоттарға ҡарап ят та,
Күр Айҙың тонок йөҙөн,
Ҡатлам-ҡатлам хыял аша
Табып йырыңдың эҙен.

Ҡанат ҡаға ҡайын күккә
Алтын балыҡҡа оҡшап...
Ах, был ел, йөрөй йыһанды
Өнһөҙ күңелгә ҡоршап.

## Көҙ юлы

Яңы көҙҙөң текә елдәрендә
Яҡын күктән илһам табамын.
Саҡрымдарҙы туймай, юл көйөндә
Йырлап бара еңел табаным.

Һағыштың да бар үҙ камиллығы.
Донъяуи ел - Ваҡыт тирмәне.
Сәскә ғүмеркәйҙәр һис йәл түгел,
Емештәргә тулы килгәне.

Бала йәйҙең керһеҙ шатлыҡтары
Болот булып илай иңемдә.
Хушлашыуҙы сабыр көткән Көҙөм
Һүҙһеҙ генә тоткан еңемдән.

Ағастарҙың түҙгән сатырҙары
Миҙгел драмаларын алҡышлай.
Үрҙән күрәм ҡулса йылдарымды
Күлен урап осҡан аҡҡоштай.

Һорнай моңо таңда һиҫкәндереп,
Ҡобайырлы ҡанат яралта.
Балкон ишегенән кергән Көҙөм
Ҡосаҡлай ҙа ала: "Яратам!"

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АТЫ-ТУНЫ БАР КЕШЕЛӘ...

### Алпамышаның көсө бар

Оло менән кесене өлөшкән белер, көслө менән көсһөҙҙө көрәшкән белер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙ-үҙенә ышанысыңды ҡаҡшатырға теләгәндәрҙән ҡас. Был ҡылыҡ ваҡ кешеләргә хас. Бөйөктәр һинә, киреһенсә, һин дә бөйөк була алаһың, тигән тойғоно һеңдерер.

**(Марк Твен).**

Күреүе еңел ул, алдан күреү ауыр...

**(Бенджамин Франклин).**

Йылы тойғоларыңды оҙаҡ йәшерһәң, улар һыуыныуы ла мөмкин.

**(Ж. Итье).**

Кем бик тиҙ үҙ етәксеһенең етәксеһе булырға ынтыла, ул үҙенә буйһоноусыларҙың буйһоноусыһы ғына булып ҡалыуы ла ихтимал.

**(Веслав Брудзиньский).**

Әгәр ҙә кемдәндер белеме аҡылынан күберәк булһа, ул үҙ белеменән үҙе яфа сигергә лә мөмкин.

**(Ибн Авд ал-Барр).**

Ҡатыны ятаҡан ире өсөн барыһын да эшләй, тик бер иҫкәрмә бар: ул ирен тәнҡитләүҙән һәм тәрбиәләүҙән бер ваҡытта ла туҡтай алмай.

**(Джон Пристли).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Өс ҡыҙ тимер юл буйлап барғанда ыжғырып килгән ике поезд уртаһында ҡалалар. Был хәлгә шаһит халыҡ: "Былар өсөһө лә һәләк булды инде..."- тип тетрәнеп ҡарап торһа, ғәжәп хәл була: ҡыҙҙарҙың өсөһө лә иҫән-һау килеш улар алдына килеп баҫа. Шул саҡ халыҡ араһында йөрөгән шайтандар үҙ-ара бәхәсләшә башлай:**

**- Һин ниңә беренсе ҡыҙҙы поезд аҫтына ырғытманың?**

**- Ырғыта алманым шул, ул бит иртән намаҙ уҡып, Аллаһы Тәғәләнән хәйерле юл һорағайны, уға бер нисек тә зыян эшләп булмай ине...**

**- Ә һин ниңә икенсе ҡыҙҙы ырғытманың улай булғас?**

**- Ул бит юлға сығыр алдынан һәр ваҡыт өс тапҡыр "Аятел-Көрси" доғаһын уҡый. Тейеп булмай уға!**

**- Ә ҡыҙҙарҙың өсөнсөһө бит ни Аллаға, ни муллаға ышанмай!**

**- Шулайын шулай ҙа, ләкин өйҙән сығып киткәндә уны әсәһе: "Иҫән - һау йөрөп ҡайт, ҡыҙым, Аллаһы Тәғәлә ташламаһын, һаҡлап йөрөтһөн үҙеңде!"- тип доға уҡып оҙатып ҡалды. Бар, тейеп ҡара һин уға! - ти яуап тотоусы шайтан...**

**Һығымтаһын үҙегеҙ яһағыҙ..."**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
21 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.



«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3007
Заказ - 662/08